*Ринат КАМАЛ*

# АҒАЙ-ЭНЕЛӘР

*Роман*



*А.Вәсилов һүрәте*

# БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

## I

Хәмиҙә менән Ҡотлоярҙың оло улы Камил Мәғҙәнгә ҡайтып төштө. Ул — ҙур совхоз директоры. Киң яурынлы, мыҡты кәүҙәле. Әйтерһең дә, донъяның бар йөгө шундай ирҙәр иңенә ятҡан, улар атланттар кеүек Ерҙе үҙ елкәләрендә күтәреп тора.

Туған ҡайтҡас, ғәҙәттәгесә, Ҡотлоярҙың балалары төп йортҡа йыйылды. Башта күршелә генә йәшәгән Зөлҡәрнәй инеп сыҡты. Ул оҙаҡ ултырманы. Алыҫта йәшәгән туғанының хәл-әхүәлен белеште, киленде күрҙе, бала-сағалар менән күреште, тигәндәй. Ағай-энеләр менән оҙон-оҙаҡ итеп бал эсеп, буш хәбәр сурытҡыһы килмәне, кәйефе лә шәптән түгел. Ай ярым әүәл колхоз рәйесе вазифаһынан төшөрҙөләр — башына иҫәңгерәтә һуҡтылармы ни. Шунан бер килке айный алмай йөрөй. Күрше-күләндең дә күҙенә салынмай, элеккесә еңел машинала елдереү ҙә бөттө — йәйәү бара идараға, йәйәү ҡайта. Әлегә орлоҡсо агроном бурысын йөкмәтеп ҡуйҙылар. Кәйефе юҡ Зөлҡәрнәйҙең ҡустыларының буш хәбәрен тыңларға. Һүҙ эйәрә һүҙ сығып, Ҡотлояр ҡарттың васыяты тураһында хәбәр ҡуйыртырҙар… Зөлҡәрнәйҙең һүҙҙән түгел, эштән башы ҡатып бөткән.

Әсләм ауыл советындағы ваҡ-төйәк эшен осланы. Атаһына тартып, ҡалын елкәле (шулай ҙа Хәмиҙә ҡарсыҡ уны йоҡа елкә тип атай), ялтас башлы, тәбәнәк буйлы. Ҡотлояр ҙа, ағай-энеләре лә уға ҙур өмөт бағланы: тыуыр заман, Әсләм ҡарт урынын биләр, Мәғҙән дилбегәһен үҙ ҡулына алыр! Шуға уны, армиянан ҡайтҡас та, ауыл советы башлығы итеп ҡуйҙылар.

Донъялар тыныс түгел барыбер, Мәғҙәндә ғәрәсәтле ямғыр алдынан ғына була торған алдаҡтыс тынлыҡ. Мәғлүм ки, хәҙер Әсләмдең дә хәле мөшкөл. Был хаҡта берәү ҙә ауыҙ асып һүҙ өндәшмәй, әлегә борсолор сәбәп тә юҡ кеүек, шулай ҙа күңел тыныс түгел. Ғәрәсәт тигәнеңдең дә олоһо ҡупты бит инде: Зөлҡәрнәй тәхетенән ҡолатылды, шуның еле Әсләм ҡустыһына ла ҡағылмағайы. Ҡотлоярҙар йортоноң нигеҙе сатнай: нисәмә йылдар Мәғҙәндәге хакимлыҡтың ахыры яҡынлаша. Власть ҡулдан ысҡына, ҡотлоярҙар йөрәген шом баҫа, аяҡ аҫтында ер убыла.

Камил хәҙер был заттың иң оло ғорурлығы: йәш, көслө, ҙур совхоздың башлығы. Нәҡ уға ҡарап, ҡотлоярҙар нәҫелдәренең боронғо данын иҫкә төшөрә: Камил түгелме Ҡотлояр солтандың төп вариҫы, атаһы эшен лайыҡлы дауам итеүсе? Ул — туғандар ҡоро уртаһында. Тыйнаҡ йылмая, ҡустыларын тыңлай, хатта сөм ҡара галстугын да һалған. Яңы заман етәксеһе. Интеллигент. Зөлҡәрнәй, мәҫәлән, ғүмерендә галстук таҡманы, өҫтөнән хәрби кителен һалманы. Әсләм дә, пинжәк кейһә лә, бер тапҡыр ҙа шул ”быҙау муйынсағын” быуманы. Ағаһы иһә шуны оло мәртәбәгә һанай, ахырыһы. Хатта ҡунаҡта, Әсләмде тыуған көнө менән ҡотлап, галстук бүләк итте. Шунда Әсләм дә, бисәһе Баныубикә лә ныҡ ғәрләнгәйне: йәнәһе, совхоз директоры уларҙы, крәҫтиәндәрҙе, шулай мыҫҡыллай. Түрҙә, уртала урыны Камилдың. Хәмиҙә ҡарсыҡ өлөштөң иң мулын, иң тәмлеһен яратҡан улы алдына ҡуя. Тик һаман ҡаушауын еңә алмай. Дәрәжәле ҡунаҡтар алдында ҡойолдо ла төштө: ни тоторға, ни бирергә белмәй, бе-

рен ала, икенсеһен һала — тотҡаны ҡулына эләкмәй, эләккәне лә төшөп бара. Ярай Рәйсә килене өлгөр: йүгереп йөрөй, мул итеп күстәнәс тейәгән. Килен алсаҡ, йомарт — ҡәйнәһенең бер алдына, бер артына сыға.

— Килен, уларға самауыр нимәгә? Ҡашығаяҡта үҙебеҙ генә сәй эсеп алырбыҙ тигәйнем — тамаҡ ыта кибеп китте. Уларға һинең сәйең…

— Усаҡты терелтәм…

— Ҡоромға буялып бөтөрһөң. — Хәмиҙә ҡарсыҡ ултырғысҡа лып итеп ултырҙы. — Башым да әйләнеп китте. — Тауыҡ сүпләһә лә, бөтмәй ул эш, килен.

— Ай-вайына ҡарамай, алып сығып киттем Камилды!

— Уңай иткәнһең, килен.

Килеште ҡәйнә менән килен. Улар ҡашығаяҡта, ә ағай-эне түрьяҡта мәж килде. Әсләм ҡорҙо оторо күтәреп ебәрҙе, гүйә, ҡыҙған табаға май һипте.

— Әсләм абзыйым — Мәғҙәндә беҙҙең һуңғы таяныс! — Ҡыҙмаса булып алған Ғәтиәт күтәрелеп һуғылды, еңдәрен төрөп ебәргән, зәңгәр күҙҙәре быялаланған, таҡыр итеп ҡырылған башы ялтырай. — Әсләм абзый! Наконец-то браттар жыйылышып бөттө!

Әсләм, айныҡ булғас, тәүҙә үк сиселеп китмәне. Барыһы өсөн дә бер Ғәтиәт кенә һөйләне. Ул әллә таңдан һалған, әллә ағалары йыйылыуға ҡыуанысы сикһеҙ: төп йортта ул — хужа, уға ян-яктан ҡунаҡтар ҡайтҡан! Шул һөйөнөс уны өйөрөлтөп-сөйөрөп йөрөтә.

— Ғәтиәтулла, туҡтәле! Әҙерәк кешегә тын алырға бир!

— Камил, сәйме, ашмы?

— Ә Зөлҡәрнәй абзыйым ниңә ҡайтып китте?

— Ғәтиәтулла!..

— Әсләм абзый, һин миңә шуны әйт… — Ғәтиәт ағаһын бүлә. — Ҡотлоярҙар бәләһе нимәлә? Ниңә улар тағы һөрлөктө: ун йылдан һуң Мәғҙәндә власты юғалтты?

Ағайҙар шаңҡып ҡалды. Ауыҙҙарына һыу уртланылармы ни. Ысынлап та, һорау хәтәр ине: ни өсөн? Төп бәлә нимәлә?

— Һеҙ миңә шул һорауға яуап ҡайтарығыҙ, браттар! — Ғәтиәт өҙмәне лә ҡуйманы, ағайҙар өнһөҙ булды. Әллә һорауҙың асылы баштарына барып етмәне, әллә ҡеүәтле бал баштарына сыҡты? Ғәтиәт дауам итте: — Әтейем үлгәнгә ун йыл… Ҡотлояр ҡарт беҙгә, уландарына, нимә тип васыят әйткәйне? Уландарым, Мәғҙәндә властыҡулығыҙҙа тотоғоҙ, Мәғҙән дилбегәһен ысҡындырмағыҙ! Ситтә олтан булғансы, үҙ илегеҙҙә солтан булып йәшәгеҙ! Беҙ — ҡотлоярҙар, Мәғҙәндә беҙ хужа булырға тейеш! Был — беҙҙең ер!.. Ул шундай васыят әйтте, ситтә, кеше табаны аҫтында йөрөмәгеҙ, илегеҙгә ҡайтығыҙ, тине. Ә Зөлҡәрнәй абзыйым?.. Ул ниңә ҡайтып китте, браттарын тиңһенмәйме?

— Ғәтиәт, абзыйыма теймә! — тине Камил киҫә генә. — Зөлҡәрнәй абзыйым ни эшләргә белә ул.

— Ғәтиәт, абзыйым ҡыйын хәлдә… — Әсләм дә өлкән ағаһын яҡлашты.

— Эһе, Әбхалиҡ… Шул башына етте!

— Эш бер Әбхалиҡта ғына түгел, — тине Камил уйсанланып.

— Абзыйым һуғышта — офицер, аҙаҡ МТС-та партком, директор… — Әсләм теҙеп китте. — Райкомдың зональный секретары булды, аҙаҡ — Мәғҙән колхозы рәйесе…

— Колхозды алға сығарҙы, раҫ, — тип килеште Ғәтиәт. — Биш йыл алһыҙ-ялһыҙ эшләне, хәҙер арт һынына типтеләр — Ҡотлоярҙар тағы абынды. Уларҙы түрҙән һепереп төшөрәләр! Мәғҙәндә Ҡотлоярҙар бөтә власты ҡулдан ысҡындырып бара! — Ғәтиәт тынысланманы.

— Абзый, һинең ҡулда — власть! Әбхалиҡтарҙың ауыҙын ҡайырырға кәрәк!

— Са-ма-лап…

— Беҙ — ҡурҡаҡтар, беҙ бер-беребеҙҙе яҡлай белмәйбеҙ! Беҙҙе берәмләп сүпләйҙәр! — Ҡустыһы ярһыны. — Ҡотлоярҙар тарҡау, бер-береһенә таянып йәшәмәй! Ә Зөлҡәрнәй абызыйым үҙе ғәйепле!

— Ғәтиәт!

— Камил абзый, һин белмәйһең… Зөлҡәрнәй абзыйым түрҙә ултырғанда туғандарын күрмәне, уларҙы янына яҡын юлатманы! Йәнәһе, ул — честный…

— Ғәтиәт!

— Абзый, әйтеп бөткәнде көт! Зөлҡәрнәй абзыйым иң элек үҙенең туғандарынан ҡурҡты. Әсләм һораныр, Ғәтиәт трактор таптырыр, Сабирйән килер, тип өрктө. Йәнәһе, браттар уның абруйын төшөрә, уның аяҡ-ҡулын бәйләй! Түрә сағында абзыйым бер үҙе генә ялтырап йөрөргә теләне, туған-тыумасаһын күрмәне, береһенә ярҙам итмәне. Ул — коммунист, уның өсөн әшнә лә, туған да юҡ, бары колхоз, колхозсылар ғына… Партком секретары Хөрмәт ағай мине ”Ҡоҙаса”ға завферма итеп ҡуйғас, нишләне? Зөлҡәрнәй Ҡотлояров — колхоз рәйесе, ә Ғәтиәт Ҡотлояров кем? Һеҙгә бер Ҡотлояров етмәйме? Зөлҡәрнәй Ҡотлояров янында тағы бер Ҡотлояров йөрөп ята аламы? Ғәтиәт — алабарман, Ғәтиәт Зөлҡәрнәй Ҡотлояровтың абруйын төшөрә! Юҡ, батмай былай! Әйт, Әсләм абзый!

Әсләм өндәшмәй.

— Ғәтиәт, ярай ул турала…

— Камил абзый, беҙ һөйләшәбеҙ! Бында ла һөйләшмәгәс, тағы ҡайҙа, ҡасан осрашабыҙ?.. Бында браттар жыйылышҡан! — Ғәтиәт тағы бал ҡойҙо. — Камил абзый, һин абзыйымды яҡлайһың; беҙ Әсләм абзыйым менән Мәғҙәндә йәшәгәс, беләбеҙ. Һин дә абзыйымдың политикаһын тәүләп ишеткәндәй ултырма!

Ағай-энеләр тәмәке көйрәтеп инделәр ҙә, һөйләшеүҙәрен артабан дауам иттеләр.

— Ҡарәле, Ғәтиәт энем, йәшең утыҙға табан атлай — давай өйлән! — тип һалды Камил. — Давай, туй яһайбыҙ!

— Ҡуй әле, абзый. — Ғәтиәт ҡул ғына һелтәне.

— Һин нимә, энем, бисәһеҙ ҡартайырға уйлайһыңмы? — Әсләм дә ҡыҫылды.

— Беҙҙең нәҫелдә бисә алмай ҡалыу ғәҙәте юҡ, Ғәтиәт.

— Абзый…

— Абзый ҙа абзый, имеш. — Камил асыуланды.

— Бер ҡат өйләнеп ҡараным бит инде… — Ғәтиәт был һүҙен үртәлеп әйтте.

Ағайҙар телһеҙ ҡалды. Теге онотола яҙып бөткән ваҡиғаны иҫләнеләр. Телде тешләмәй булмай ине шул.

## II

Ғәтиәттең "бер ҡат өйләнеп ҡараным бит инде" тиеүе хаҡ ине.

...Әсләмдең ауыл советында яңы эш башлаған йылы. Ағалы-энеле икәүләп аръяҡҡа йыйындылар. Көн тыныс, һалҡынса һауа. Әсләм ағаһы ауыл советының ҡара айғырын еккән. Әй йылғаһы аша сығырға була борамға төштөләр. Биҙәртау ситенән юл һалынған. Ҡабырғала — эре-эре дүрткел-дүрткел таштар һерәйешә, аяҡ аҫтында ла, яр ситендә лә — йомро суғырмаҡлы таштар. Тау битенә дәү бағана ҡағылған, шунан аръяҡҡа йыуан сынйыр сығыр тарттырылған. Борам шул сығыр буйлап йөрөй. Көҙ, боҙ туңғас, күтәреп ҡуялар ҙа, яҙ, ташҡын ҡайтҡас, тағы төшөрәләр.

— Эһе-һе-һей!

— Эһе-һе-һей! — Әй буйҙары ла теләкһеҙ генә яуап ҡайтарҙы юлаусыларға.

— Борамсы Мөхәмәтйән аласығында ҡуна яталыр… — тине егет, аръяҡтағы борамсы өйөнә төртөп. — Мөхәмәтйән аға-ай!

Шунда тауыҡ кетәгендәй аласыҡ ишеге шар асылып китте лә ике ҡыҙсыҡ ағаслыҡ араһына йомолдо. Ай күрҙе, ҡояш алды.

— Миң-за-да! — тип саҡырҙы егет. — Миң-зи-фа!

Игеҙәктәр тегенең өнөн ҡолаҡтарына ла элмәне.

Был хәл юлсыларҙы юрый шаяртыуға оҡшап ҡуйҙы.

— Күрәһең, ҡарт үҙе юҡтыр, — тине Әсләм. — Ә ҡыҙҙарына — ике донъя, бер мөрйә.

Аптырағас, Ғәтиәт сисенә башланы. Анауындай егеттәргә был йылға — сүп кенә. Ылауҙы аръяҡҡа сығарғас, Ғәтиәт йылынырға була, арбаға ултырманы. Күп тә китеп өлгөрмәнеләр, теге шилмалар муйыллыҡта күренде. Шул төҫ, шул ыҫым һеҙгә, йәнәһе. Һемәйттекме, егет, үҙеңде?

Ғәтиәт уртын сәйнәне. Әй буйына һыу төшөргә йөрөүҙәрен хәтерләне. Игеҙәктәрҙе шулай үсектерә торғайнылар:

Миңзифа, Миңзада,
Күңелләрең кемләрдә;
Йүгереп тороп,
Борамды сығарсада.

Игеҙәктәр ҙә аптырамай:

Ғәтиәт — Тәхиәт,
Эсе тулы әкиәт.

Ҡайтышлайға борам тағы — аръяҡта, юлсыларға кире яҡта.

— Миңзада, Миңзифа, арытылған…

— Уф, эшем эйәләре!

— Борамды тиҙерәк сығарығыҙ, Миңзада, Миңзифа…

— Һин — шәп йөҙөүсе лә, иртәнге кеүек йөҙ ҙә сыҡ!

— Ҡыҙҙар, телегеҙгә һалышмағыҙ! — Әсләм, йәш түрә, эре генә, етди генә бойорған була.

— Әсләм ағай, аҡсағыҙ бармы?

— Борам колхоздыҡы ла, Миңзада! — тип яуаплай Ғәтиәт. — Ә беҙ колхозда эшләйбеҙ.

— Ә-ә, һин колхозникмы? — Ҡыҙҙар көлә.

— Йә!

— Абау, колхозниктар! — Ғәтиәттән дә бәләкәйҙәр бит әле: ҡаш һикертәләр, ҡылансыҡтар, тел сарлаған булалар. Мәктәптә лә Миңзадаһы шаярырға ғына тора, Ғәтиәтте ағай тип белмәй. Егет бер һүҙ ҡатһа, теге бөрсә биш һүҙ әйтә. Игеҙәктәрҙең шулай үҙҙәрен еткән ҡыҙҙарҙай тотоуы ҡыҙыҡ та, ирмәк тә тойола.

Егет ҡул һелтәй: йәнәһе, һеҙҙең ҡайғығыҙмы, ул — эш кешеһе. Атаһы ла Мәғҙәндә башлыҡ ине. Һәр хәлдә борамсы Мөхәмәтйән ҡартҡа иш түгел.

...Ғәтиәт борамдағы шул хәлдән һуң игеҙәктәр тураһында йышыраҡ уйлай башланы. Хәс тә күҙҙәре асылды: Миңзада эргәһендә генә урала бит. Үҙе күҙгә кереп бара! Ошо көнгәсә Ғәтиәт һуҡыр булған!

Миңзада сая, үткер ҡыҙсыҡ. Йылмайһа, муйылдай ҡара күҙҙәре янып китә; уҫаллығы ла бар, ҡыр кәзәһеләй етеҙ ҙә.

Мәғҙән солтанының улы эре ине. Миңзаданың үҙенә битараф түгеллеген һиҙеү ҙә уға ниндәйҙер ышаныс бирҙе. Кесерәк ҡыҙҙар, ғәҙәттә, үҙҙәренән олораҡтарға күҙ атыусан шул, йомоҡ тиҫтерҙәренә әйләнеп тә ҡарамайҙар. Уларҙы бешмәгәнгә, етлекмәгәнгә һанайҙар. Ғәтиәт талдай оҙон, аҡ битле, өҫкө ирендәре ҡабарыбыраҡ тора... Кешегә тиҙ ышанып барыусан холҡо ла бар. Сәсен дә оҙон итеп йөрөтә, ағаларынан күреп, уны артҡа тарап ебәргән була. Ысын егет. Өҫтә — Әсләм ағаһының гимнастеркаһы, билдә — киң һорғолт офицер ҡайышы. Миңзада ла сер бирмәй: егеткә тишеп ҡарай, күҙенә ҡарап шарҡылдап көлә. Гүйә, ҡоралай — осоноп-һонолоп йүгерә. Шаянҡай.

Ғәтиәт — иҫәр, һаман нығыраҡ, нығыраҡ эҫенә бара. Башын юғалтты. Башта, әҙәмгә лә һанамай, орсоҡ буйы ҡыҙсыҡ, бала-саға тип йөрөгәйне, шаярыуына иҫе лә китмәгәйне... Хәҙер шул ҡыҙ серле бер затҡа әүерелде. Бер әкәмәт мәрәкәгә лә тарыны.

Ул кистә Ғәтиәт менән Миңзада клуб ҡаршыһында осрашырға килеште. Егет һыланды-һыйпанды ла дәрте ташып урамға сыҡты. Күҙҙәре сөбәкәйләнәме, әллә башы ла әйләнеп китте? Ҡаршыһында кемде күрә? Миңзадаһы Сәйфетдин менән етәкләшеп алған! Ғәтиәткә иҫтәре лә китмәй... Клубҡа үттеләр. Миңзада дуҫын һанға ла һуҡмай: исмаһам, бер күтәрелеп ҡараһасы, тотолғас, саҡ ҡына ҡыҙарһасы.

Ғәтиәт, ел ҡуласаһылай, кирегә боролдо. Төнө буйы әллә ниҙәр хаҡында уйлап бөттө, үҙ алдына һөйөкләһенә әллә ниндәй язалар һайланы. Иртүк Миңзада үҙе килеп еткән.

— Ғәтиәт, ауырыйһыңмы? — Егетте ут баҫтырырға самалаған кеше, ишенең ап-аҡ йөҙөн сырамытып, тыйылды.

— Ғәтиәт, тим, ишетмәйһеңме?

— Ҡысҡырма ла!

— Һаң, һине ниндәй ҡорт саҡты — кисә клубҡа ла сыҡманың? Егет һүҙе шулмы?

— Шул!

— Ниңә йүнләп һөйләшмәйһең? Телен, ысын, ҡорт саҡҡан бының! — Ирәйеп көлдө ахырҙа ҡыҙ.

— Башыңды иҫәргә һалма!

— Нимә? — Ҡыҙ көлөүенән яҙҙы, күҙендә зәһәр осҡондар баҙлатты. — Һаң, мин иҫәрҙәме хәҙер? Һин, ялҡау, һүҙеңдә торма ла, әрләндәй өйҙә йоҡо һимертеп ят та — мин ғәйепле булайыммы?

— Ә кисә кем клубта Сәйфетдинде ҡултыҡлап алғайны?

— Шаҡайҙа шаҡай инде бынау! Тәхиәт! — Ҡыҙ тағы шарҡылдап көлдө. — Сәйфетдин Миңзифаның дуҫы бит, шуларҙы күргәнһеңдер.

Көлкөгә ҡалды башы. Аҙаҡ Ғәтиәттең дә күңел күҙе үткерләнде әҙерәк. Миңзада киҫкенерәк, хәрәкәттәре тилбер, ә Миңзифа — яйман, баҫымса. Тауышы ла талғыныраҡ, хәрәкәттәре һалмаҡ. Хатта донъяға ла битараф, Ғәтиәткә лә ғәмһеҙерәк кеүек. Ә Миңзада — ут, эште лә өтөп-ҡырып алып бара: ҡулдарына күҙ эйәрмәй, йөҙөнән йылмайыу китмәй. Әсәһе Миңзадаға ла, Миңзифаға ла бер иштән күлдәк тегә, бер төрлө кейендерә — игеҙәктәрҙе еңел генә айырырмын, тимә. Миңзада ла, Миңзифа ла ҡалын толомло, икеһе лә айҙай тулы йөҙлө. Ынйылай ап-аҡ тештәрен йылтыратып йылмая сыҡынғырҙар… Үҫмергә унан көлгән, уны үсектергән төҫлө. Аҙаҡ Ғәтиәт менән Миңзада татыулашты. Яттарҙың күҙе ҡыҙырлыҡ ине икеһенә. Ғәтиәт армияла ла шул ҡыҙ хаҡында ғына хыялланды...

Әй ташҡан. Ажар тулҡындар борамды өйөрөп алып бара, шулай ҙа сая ҡыҙсыҡ бирешмәй: әле ҡойроҡҡа тотона, әле тимер сынйырға барып йәбешә — хәрәкәттәренә күҙ ҙә эйәрмәй. Күбәләктәй йоҡа кәүҙәһе әле борамдың башында, әле арт яғында пәйҙә, ә сығыр зырлап әйләнә генә — һис тынмай. Сығыр тынмағас, донъя ла алға бара, тормош та һүнмәгән тигән һүҙ. Шул бер үк күренеш күҙ алдына баҫа. Миңзада — ут бөрсәһе, саҡ ҡына ултырып хәл алсы! Борам ағымға ултырҙы бит инде, хәҙер сығыр үҙенән-үҙе өйөрөләсәк. Миңзада, саҡ ҡына тынсы!

## III

Ғәтиәт армиянан ҡайтҡанда Миңзифа еткән ҡыҙ ине. Тулышып бешкән алма. Йомролана ла төшкән. Ап-аҡ бите алһыуланып яна, был уны тағы ла сағыуыраҡ итә. Әйтерһең, ҡаршыңда теге елбәҙәк мыштым ҡыҙсыҡ түгел, ә хур ҡыҙы… Йылдар шулай ҙа үҙгәртә икән кешене. Элекке сибек кенә беләкле, оҙон сираҡлы ҡыҙсыҡ урынында йомро беләкле, тулы балтырлы һыу һөлөгө… Тик егеттең йөрәге яралы ине, ғәрлегенән күңеле таштай ҡатҡайны...

Яйлап йылдар иҫтән таныш һыҙаттарҙы юйҙы, ғәзиз йөҙҙәрҙе тоноҡландырҙы, башҡа бүтән уй-кисерештәр тулды, иңгә бүтән мәшәҡәттәр ятты. Бер аҙҙан Ғәтиәт Полинаға ғашиҡ булды. Мәғҙәнгә фельдшер итеп ебәрелгән был ҡыҙ бөтә булмышын биләне кеүек… Тик томандар артында ҡалҡҡан таң йондоҙо тиҙ үк офоҡтар ситендә батып ҡуйҙы, йөрәктә тағы бер йөй ҡалды.

Был йылдарҙа Ғәтиәт үҙе лә үҙгәрҙе, олпатланды. Миңзифаны осратһа, Миңзаданы иҫләй. Гүйә Миңзада йөрәктән хыял күктәренә ашты ла Миңзифа һынында йәшәүен дауам итте… Яралы йөрәк һулҡылдап тик торҙо. Миңзада әллә ҡайҙа, ә Миңзифа йәнәшәлә генә бит. Ауылда йәшәй, һаман кейәүгә сыҡмаған.

Ғәтиәт — монтер, һирәк-һаяҡ ҡыҙсыҡты күрә. Бағана башында торғанда теге йылп итеп уҙа, йөҙ-башын йәшерә. Бәлки, ҡыҙсыҡ был кеше минең еҙнәм булаһы зат ине бит, тип уйлайҙыр? Улар туғанлашырға тейеш ине лә — яҙмаған! Ошо тойғо икәүһен бәйләй кеүек… Миңзифа хәҙер алсаҡ, асығыраҡ. Элеккесә ҡырағай түгел.

Ғәтиәт Күльяҡ урамында радио сымы һуҙҙы. Теге ҡыҙ күҙенә салынып ҡала, шунда әллә ниндәй уйҙар уйлата. Миңзифа сабыр холоҡло, Ғәтиәттең хәлен аңлайҙыр. Ул апаһы һымаҡ ҡаты бәғерле, алабарман түгел. Тотҡан ерҙән һындырып бармай. Миңзада апаһы иһә Ғәтиәтте хаҡһыҙ рәнйетте!

— Монтер егет, һауаға ашып, бағанаңды ҡосаҡла ла тор! Әллә ҡайҙарҙан килгән өндәрҙе от! Һин — бағанасы, һин — мәхрүм…

Монтер бағана башынан төшмәй. Ауылдан-ауылға йә телефон, йә радио сымы һуҙа — шулай ауылдаштарына һөйөнөс өләшә. Ҡайһы берҙә бағана осонда, бағанаһын ҡосоп, ойоп та китә. Ә осоп төшһә, башы әйләнеп, йәһәннәмгә ҡолаһа?

Әй төбәгенән берәү килә. Туҡта, ниңә бағана ҡосоп, йоҡомһорап тораһың, егет? Иңбашында — көйәнтәһе, нескә биле өҙөлә, һомғол һыны һығыла… Кем булыр? Алыҫтан шундай серле зат булып күренә — хәс тә фәрештә, аҡ елкәнен тартҡан аҡ карап… Оҙон аҡ күлдәк итәге, бөгәренә уралып, сихри һүрәттәргә инә, теге үҙе лә, еләҫ елгә бирешеп, алға эйелә биргән була, күлдәгенең, бөтә һынын белендереп, тәненә һылашып тороуынан оялған була.

Егеттең тәне тертләне, зиһене үткерләнде… Теге, әйтерһең, әкиәттән ысынға күскән, ауыл ҡыҙҙарына оҡшамаған да! Һыуын сайпылтмаҫҡа, кәүҙәһен тура тоторға тырыша. Миңзаданың игеҙәге түгелме? Ҡайһы арала үҫеп еткән?

— Миңзифа… — тип кенә әйтә алды егет.

— Ғәтиәт ағай… — Оялсан ҡыҙ ирәйеп йылмая. Егеткә хәс тә Миңзада йылмая төҫлө… Шундай ихлас йылмайыуы, алсаҡ сырайы; күҙҙәрендә өмөт тулы, моң, наҙ тулы йөрәге.

— Ғәтиәт ағай…

— Ә?..

— Осоп төшмә!

— Ә-ә…

— Бөгөн клубҡа сыҡмайһығыҙмы, Ғәтиәт ағай? ”Пастух и свинарка” фильмы…

— Саҡыраһыңмы?

— Эйе. — Ҡыҙ батырайҙы.

Кинонан һуң Ғәтиәт исем өсөн Миңзада тураһында ла белешкән булды.

— Миңзада апайым — Шиҙәлелә, райпотребсоюзда эшләй, бер ул үҫтерә.

— Кейәүҙәме?

— Әллә? Кейәүҙәме, айырылғанмы — белмәйем.

Миңзифаның апаһы тураһында һөйләгеһе килмәүе һиҙелеп тора. Иҫке күл буйына төштөләр.

Йәй уртаһы. Үлән ҡотороп үҫкән. Яр буйы торғаны бер тамаша: баҡалар баҡылдаша, сиңерткәләр сырылдаша, тартай тартылдай. Бигерәк тә баҡалар әрһеҙләшкән, тауыштары әллә ҡайҙарға яңғырай, күл буйы сихри ауаздарға күмелә. Күлдең көмөш тулҡындарында тулған ай йөҙә. Әйтерһең, был төн төн дә түгел, ә салт аяҙ көн: аръяҡтағы мөһабәт тирәктәр аяғүрә баҫҡан, ҡамыштар зифа һынлы, бәпкә үләне ҡаплаған төбәк йөҙө лә батмустай ялтырап ята.

Йәштәр тәбиғәт хозурлығына ғәжиз: һулыштары тыйылды, күҙҙәре ҡамашты… Ә йөрәк, күкрәк ситлеген йыртырҙай булып, тулай. Бөтә

тән ҡалтырай. Ахыр егет һаҡ ҡына ҡыҙыйҙы үҙенә һырыҡтырҙы; тегеһе ҡарышмағас, ҡыйыуланды. Ҡыҙыйҙың бармаҡтары дерелдәй, үҙе хәс тә ел үрендәге үлән кеүек сибек зат ыҡҡа ғына килеп тора лаһа! Икәү аяҡ аҫтындағы ҡатыны тойманы, барса хәүеф-хәтәрҙе онотто. Тирә-әйләнәләге донъя ла шунда юҡҡа сыҡҡандай итте. Ерҙән айырылдылар, тын күл дә, тау-урмандар ҙа аҫта ҡалды. Был илаһи мәл — ысынбарлыҡ менән әкиәттең ҡауышыуы ине. Икеһе лә кинәнес кисерҙе. Ниһайәт, Хоҙайҙың, тәбиғәттең көткәне — ғәҙеллектең тантана иткән мәле һуҡты.

Ярым-яртышар булып аҙашып йөрөгән йәндәр бер килеп табыштымы, ғаләмдең көйө-торошо иплэндеме?

— Миң-зи-фа…

— Ғәтиәт ағай…

— Миң-зи-фа… — тип бышылданы елдәр.

— Ғәтиәт ағай… — тип ҡабатланы тағы йөрәге ҡошсоҡтай тибрәнеүсе.

Инде бүтән һүҙҙәр, бүтәнсә аңлашыуҙар ҙа кәрәкмәй ине. Күл аръяғында тағы баҡалар тауыш итте — ул киске концерт өҙөлмәне. Зифа ҡамыштар бәүелеште, еректәр, тирәктәр шәүләләрен һондо, көмөш күл бите нығыраҡ йылтыраны. Ике йән йәшел сымылдыҡ эсендә бикләнде. Илаһи бер тантана ине күл буйында: баҡалар концерты тынманы, тирәктәр ирәйешеп бәүелеште, еректәр толомдарын һыуға мансып-мансып алды. Егеттең бындай төндө күргәне лә булмағандыр әле, ниһайәт, күңеле урынына ултырҙы. Ул мораҙына иреште бит: һөйөклөһө — ҡосағында, Миңзаданың үҙе булмаһа ла — игеҙәктең һыңары бит, ҡан ише.

Йәштәр ижап уҡытыу көнөн артыҡ һуҙмаҫҡа тип килеште. Һуңынан Ғәтиәт йыш ҡына өнөндә кисергәндәрҙе төшөмдә күрәм, имеш, тип һандыраны.

— Ғәтиәт ағай… — Ҡыҙ башын эйә. — Инәйем: "Һәр кешенең ерҙә үҙ ише була. Шул ишеңде табырға ғына кәрәк. Ул йә күктә осоп йөрөй, йә ерҙә аҙаша… Күктә оҙаҡ осһа, оҙаҡ ҡауыша алмайһың, шуға көтөп йәнең сыға… Сәйфетдингә сыҡ та ҡуй", — ти.

Егет иһә тағы ла нығыраҡ хыялға бирелә: имеш, ҡосағында — ул. Ул, ул! Миңзада риза булған! Хәҙер, йыуашайып, башын иңенә һалған… Тыны — ыҫмала.

Егет күкрәгендә ҡыҙҙың түштәрен туп шикелле тәгәрләтә, хистәре — ташҡын. Ул, ниһайәт, теләгенә өлгәште: был — Миңзада! Берәү ҙә уға бармаҡ төртөп күрһәтә алмаҫ! Йомро кәүҙә — шул уҡ Миңзада һыны, шул уҡ тығыҙ түштәр — Миңзада түштәре… Шул уҡ күҙҙәр, ирендәр, ҡаштар!

Был бәхетле кис — уларҙың кисе, был айлы төбәк — уларҙың йомшаҡ түшәге! Хатта бәрхәт үлән өҫтөндә лә егет Миңзаданы күрҙе, уның үткер ҡарашы йөҙөнә ҡаҙалды… Бәрхәт түшәктә лә ғашиҡтар — йәнәш, Миңзада уның сәстәрен һыйпай. Бөгөн бигерәк илгәҙәкләнгән — ҡырыҫлығы, саялығы ҡайҙа булған? Үҙе наҙлай, үҙе Ғәтиәтте үбә… Бөгөн — уның бәхет таңы! Аҡ сабаҡтай тулай — бәхетле, Әй тулҡындарында ҡондоҙҙай ҡойона ҡыҙ бала. Бар донъяһын асып ятҡан, бар серҙәрен бер юлы сисергә әҙер…

— Һөйөклөм, һағындым…

— Мин дә һине бик-бик оҙаҡ көттөм! — Ҡолаҡ төбөндә — уның өнө, устарында — уның устарының йылыһы, ҡаршыһында — уның осҡонло күҙҙәре... Миңзада, ниһайәт...

Егет үҙен хыялына ышандыра яҙып та бөттө бит.

## IV

Ижапҡа ике яҡ та ныҡлап әҙерләнде. Сатан Мөхәмәтйән йортонда, шулай ҙурҙан ҡубып ҡыҙ биреп өйрәнмәгәнлектән, ҡаушап та ҡалдылар, буғай. Ҡотлоярҙар ише затлы, тармаҡлы нәҫел менән ҡатышалар бит! Мөхәмәтйән ғүмере баҡый борамдан, малдан башҡаны белмәне. Иң хәтәре — һуғыштан һыңар аяҡ менән ҡайтты. Сатан Хатипты идараға хисапсы итеп ултырттылар, сатан Сәғиҙулланы ҡарауылға ҡуйҙылар, ә Мөхәмәтйән өлөшөнә борам тейҙе. Яуаплы эш: колхоз шул борамға, Мөхәмәтйән сатанға ҡарап тора. Уға хәҙер күп кәрәкмәй — шул мәхшәрҙән тере сыҡҡас, тыныс көнөнә, булғанына риза булып йәшәп ята. Колхоз үлтермәҫ әле, йән биргәнгә йүн бирер! Ҡыҙҙары ла бар: үткерҙәр, саялар... Сатанға артығы кәрәкмәй, ҡотлоярҙар менән дә ярышмай ул.

Урҙаларға арыуыраҡ таҫтамалдар эленде, төпкө бүлмәгә затлыраҡзиннәтлерәк шаршауҙар тартылды — шартына килерлек булһын. Тәғәйен көнгә ашы боҫрап, балы әсеп, күбеп ултырыр. Балығы ла, ҡаҙылығы ла, бүтәне лә булыр. Мөхәмәтйәндең балыҡсы тигән даны ла бар...

Ҡарсығы Ғилминурҙың да бит алмалары алһыуланған: йәш саҡтағыса йылмая, элекке сибәрлеген хәтергә төшөрә. Ҡарт менән ярты һүҙҙән бер-береһен аңлап торалар. Әйтерлекме, әсә кешенең дә күңеле кинәнес менән тулы: төпсөгөн кейәүгә бирә!

Ҡотлоярҙар яғынан Зөлҡәрнәйҙәр, Әсләмдәр ҡатышасаҡ. Ҡустылары өйләнә, никахы ҡотло булһын, никахы шартына килһен — улар ҙа йола үтәй. Аҙаҡ ағайҙарға үпкәләштән булмаһын! Кәләш йәрәшәләр, ҡалғаны йәштәрҙең үҙенә бәйле. Улар сирек ултыртасаҡ. Сирек тигәне бер йәшник араҡы! Хәҙер халыҡ әсе балыңа ғына мөрхәтһенмәй, һуғыштан һуң араҡыға әүәҫләнделәр. Мөхәмәтйән дә Зөлҡәрнәй һымаҡ фронтовик — улар рәтен белә инде.

Ғәтиәт, күңеле тулышып, Зөлҡәрнәй ағаһына инде. Бер һауыт араҡыһы ла бар ине. Нәкиә еңгәһе эштән ҡайтмаған... туғандар эс бүҫкәртеп һөйләшеп ултырыр.

— Да, өйләнәм, тиһең инде, энекәш... — Зөлҡәрнәй етдиләнде.

— Ваҡыт бит, абзый.

— Өйлән, үҙаллы донъя көтә башла! — Зөлҡәрнәй ғәҙәтенсә аҡыл өйрәтте. Ҡусты кешегә лә атаһы урынында ҡалыусының нотоғон тыңлау фәһемле ине. Туған туғанға һыйынмай булмай. Зөлҡәрнәйҙең дә хәле ауыр сағы — яңыраҡ эшенән бушаттылар.

— Полина шәп ҡыҙ ине, абзый, — тине Ғәтиәт, ауыҙын ҡыйшайтып. Ултыра торғас, тағы эсендәге ҡорто баш ҡалҡытты; Ғәтиәт Ғәтиәт буламы инде, әгәр берәйһенә бәйләнеп алмаһа...

— Шәп ине шул, — тип килеште Зөлҡәрнәй. Әллә сер бирмәне, әллә мырҙаһы йөнөн буйға һыпырып маташты. — Бөтә ауыл, сырхауҙар күҙенә ҡарап торҙо.

— Мин дә уға табына инем, абзый… Ә һин шаярып ҡына йөрөнөң. Рәйес булғас, бөтәһе лә миңә буйһонорға, бөтә сибәр бисәләр ҙә минеке булырға тейеш, тип һананың…

— Ғәтиәт, һин иҫерә башланың, шай.

— Абзый, мин иҫермәнем, бары дөрөҫлөктө йөҙөңә бәреп әйтәм.

— Ә кемгә кәрәк ул һинең дөрөҫлөгөң?

— Шулай: кем көслө, шуның ҡулы тирмән тарта, кемдең ҡулында власть — шул хаҡлы. Шулаймы?

— Шулай, энем. — Зөлҡәрнәй ҙә үҙен ҡулға алып өлгөрҙө.

— Хәҙер, абзый, урыныңдан төшөргәс, ни эшләрһең? Һин бит ни теләйһең, шуны ҡылып өйрәнгәнһең…

— Ғәтиәт, туҡтәле, нишләп һин бер мәрйә өсөн ағайың менән талашып ултыраһың?

— Һин, абзый, гел минең юлыма арҡыры төштөң. Полина, "Ҡоҙаса"ға завферма итеп ҡуйғас… Йәнәһе, Зөлҡәрнәй баш булған колхозда туғандары аяҡ аҫтында сыуала, Зөлҡәрнәй ағаларына ҡамасаулай! Колхозда бер Ҡотлояр баш булғас, еткән! Шул булды һинең политикаң, абзый, ә әтейем ни тигәйне? Туғандар, бер-берегеҙгә уҡмашып йәшәгеҙ, илгә баш булығыҙ, Мәғҙәндә власты ҡулдан ысҡындырмағыҙ! Һин, абзый, туғандарҙы ситкә типтең, иң тәүләп атай васыятына хыянат иттең!

— Ә кем һеҙгә өй һалдырҙы? — Зөлҡәрнәй ғәҙәтенсә ҡатлы-ҡатлы һүгенде. — Әсләм ағас ташырға тракторҙы ҡайҙан алды, һин Берҙемдән нисек ағас апҡайттың? Колхозда трактор етмәй, уға һыу буйы сират, кемгә өй һалырға, утын ташырға кәрәк. Халыҡ миңә "Ташҡотлояр ташбаштарына өй һалып бөттө" тип бәйләнә. — Зөлҡәрнәй ярһыны. — Ит изгелек, көт яуызлыҡ.

— Ярай, абзый, онотайыҡ үпкәләрҙе. Мин асыу килгәндән генә…

— Һин әйтәһең дә әйтәһең, гел тәнҡитләйһең. Критик нашелся! Ә кем эшләй?

— Теге ваҡытта, колхозды ташлап, почтаға барҙым — хәҙер йөрөйөм бағана башында сөңкә һанап.

— Мәрйә, тиһең… Ул ғүмерҙә һиңә бармаҫ ине. Ят дин, сит ғөрөф-ғәҙәт! Полина миңә лә шуны тылҡыны.

— Ярай, абзый, мин йән көйгәндән генә…

— Һиңә нисек тә абзыйың менән талашырға кәрәк.

— Абзый, мин атай васыятын ғына әйтәм — беҙ уға хыянат иттек.

— Тағы шул бер балыҡ башы!

— Әтейем: "Бергә булығыҙ, бер-берегеҙгә таянығыҙ", — тине, ә мин… ябай монтер, кеше табаны аҫтында йөрөйөм. Әбхалиҡ донъяға хужа булды, Мәғҙәнгә — солтан, ә беҙ — уның олторағы…

Әңгәмәнең иң ҡыҙған мәлендә Нәҡиә ҡайтып керҙе.

— Бәй, был ниндәй тантана? — тип сәрелдәне ул.

— Энем кергәйне лә… — тип мығырҙаны Зөлҡәрнәй; колхозда ғәм халыҡҡа баш булһа ла, өйҙә бисәһе алдында алдашып тора.

— Хәҙер, эштән ҡыуылғас, эсергә тотондоңмо? Мин бер үҙем бил бөгәм, эш ауыр, аҡса менән бәйле… Һин кеше жыйып ултыраһың!

— Нәҡиә!

— Тыйма мине, башым магазинда ватылып ҡайта, ишу һин… — Ул шешәне эләктерә. — Етте һиңә, ҡарт нәкәҫ!

— Еңгә… — Ғәтиәт тә, сәсрәп, урынынан ҡалҡына.
— Ә һиңә нимә?
— Еңгә, ипләберәк…
— Ишу бында берәү — указчик табылғанмы? Кеше өйөнә килеп!.. Абзыһын эсереп ултыра… Бар, ҡайт! Ана, бисә йәрәш тә йәшә! Кеше донъяһын боҙма!
— Еңгә, мин… һиңә килмәгәм, ағайыма килгәм!
— Ә һин шулаймы? Яҡшылап әйткәнде… — Ҡатын айҙанып тәҙрәгә табан уҡталды — бар көсөнә һелтәнде. Тәҙрә өлгөһө сылтырлап аҫҡа ҡойолдо.
Ул милиционерға, ҡәйнешем өйөмә баҫышты, ишекте асмаға, тәҙрәмде ярҙы, тип башырасаҡ. Шунан ни участковый Ғәниев ҡыйырһытылғандарҙы закон һағына аласаҡ: Ғәтиәт даусыны ун биш көнгә ултыртып ҡуясаҡтар.

## V

Был ваҡытта Мөхәмәтйән борамсы өйөндә лә шау-шыу ҡупты. Дөрөҫөрәге, Шиҙәленән бала йөкмәп атай йортона Миңзада ҡайтып төштө.
— Һин кейәүгә йыйынаһыңмы? — тип белеште Миңзада игеҙәгенән.
— Эйе, — тине Миңзифа, бурлыҡ өҫтөндә тотолғандай, башын эйеп.
— Ғәтиәткә бараһыңмы?
— Эйе, — тине баҫымса ҡыҙ. — Вәғәҙәләштек инде…
— Нисек? — Ярһып ҡысҡырҙы Миңзада. — Һинең башың эшләйме ул, телең ни һөйләгәнде ҡолағың ишетәме?
— Нимә булған, апай?
— Нимә булған, имеш? Аңламамышҡа һалыша… Һин кем өлөшөнә ҡул һуҙғаныңды беләһеңме?
— Минең үҙ өлөшөм, апай…
— Һинең өлөшөң, ана — Сәйфетдин; һин, шаҡай, минең өлөшкә ҡул һуҙаһың! Ғәтиәтте армияға мин оҙатып ҡалдым!
— …Ә ҡаршы алманың!
— Һин араға төштөң!
— Ә һин ризалаштың!
Туғандар яраша алманы.
— Һин апайыңа хыянат иттең!
— Юҡ!
— Ул мине ярата…
— Юҡ!
— Миңзифа!..
— Һин уға инәү һалып ҡуйғайныңмы?
— Эйе!
— Ошо көнгәсә ҡайтып күренмәнең, һин Ғәтиәтте бүтәнгә алмаштырҙың! Һин үҙең хыянатсы!
— Ғәтиәт мине ярата…
— Һинең балаң бар!
— Ул барыбер ”мин”, ти…
Әҙәр баҫылманы, игеҙәктәр яраша алманы.
Ҡыҙ бала түшәгенә йөҙтүбән ҡаплана, бисура затты әсәһе лә ҡыуып ҡарай, ә Мөхәмәтйән үҙе бисәләр эшенә ҡыҫылмай.

Ул арала ауылда ”Ғәтиәт Нәҡиә еңгәһен туҡмап, төрмәгә ултырған” тигән хәбәр таралды. Район үҙәге Шиҙәлелә райпотребсоюзда бухгалтер булып эшләп йөрөгән еренән Мәғҙәнгә ҡайтып төшкән Миңзада иһә сельпоға экономист булып урынлашты.

Һуңынан Миңзифа, Сәйфетдингә ризалыҡ биргәс, игеҙәге Миңзадаға төбәп һамаҡлап илай була:

— Апаҡайым, тәнем киҫәге, бары һинең хаҡыңа баш тартам һөйгәнемдән — әйҙә, мин түгел, һин бәхетле бул! Мин түҙермен, өлөшөмә шул яҙғас… Апаҡайым, һинең бәхетең хаҡына үҙемдекен ҡорбан итәм — ҡабул ҡыл! Бәхетле бул, ҡорбанымды ҡабул ҡыл — һөйөклөмдө һиңә ҡалдырам. Ярат уны, игеҙәгең өсөн дә һөй! Шул һиңә һуңғы теләгем! Апаҡайым, һинең хаҡыңа өлөшөмдән ваз кисәм, бел! Ярлыҡаһа, әйҙә, бер Хоҙай ярлыҡаһын үҙеңде!

Миңзифа һылыу шунда түгелеп-түгелеп илаған, имеш, ә Миңзада иһә тамсы ла күҙ йәше күрһәтмәгән.

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

### I

Мәғҙән клубы — ауылда иң күркәм йорт, тирә-йүнгә балҡып ултыра. Күкрәктәре лә ҡалҡыуыраҡ, һыны ла олпатыраҡ. Ҡанаттарын йәйгән ҡоштай, бына талпыныр ҙа һауаға ашыр… Буй-һыны, ынтылышы зиһенде биләр, барсаһын хайран итер. Эре-эре ҡарағайҙарҙан — сайыры ағып торған ағастан буралған, башы ҡалай менән ҡапланған, бейек таш нигеҙгә ултыртылған — йөҙ йыл торһа ла, ыһ та итмәҫ. Был клуб Зөлҡәрнәйҙең түрәлегенә бер һәйкәл кеүек. Хәҙер, вазифаһынан төшөрөлһә лә, клубы ҡалды, яңы быуындарға аманат.

Ғәтиәттең күҙ алдында үтте Зөлҡәрнәй ағаһының рәйеслеге. Ғәтиәт һис шикһеҙ ағаһы менән ғорурлана ине: Мәғҙән дилбегәһе Ҡотлояр балалары ҡулында, улар үҙ илдәрендә олтан булып түгел, ә солтан булып йәшәй… Ҡайҙа ҡалды хәҙер шул дәүерҙәр? Ауыл — оло, колхоз — берҙән-бер таяныс. Хәҙер халыҡ Әбхалиҡҡа баш эйергә мәжбүр.

Ғәтиәт шулай ҙа һуңғы көндәрҙә елкенеп йәшәй, көн дә кис етеү менән клубҡа ашыға. Зөлҡәрнәй ағаһы клубында улар ҡабат осрашасаҡ! Ғәтиәт тағы хыялый затҡа әүерелде. Ҡабат әүәлге хистәр яңырҙы ла ҡуйҙысы. Хәс тә был йылдар, айырылышыуҙар-аймылышыуҙар булмаған да кеүек. Әйтерһең дә, Миңзада ла шул уҡ ҡыҙсыҡ… Ут бөрсәһе. Ул күрешеү, ул күҙҙәр, ул һын… Ғәтиәт был кис йөрәгемде шулай ҙа яндырыр, тип уйламағайны. Үткәндәр үткәндә ҡалған, ул хистәр һүрелгәндер тигәйне; ә ул инде ипкә килгән донъяһына ут йомғаҡылай ҡабат атылып керҙе лә барыһын да пыран-зыран итте, баштүбән ҡуйҙы. Ул — хакимә, яу яланын ташлап ҡайтҡан…

Мәғҙән йәштәре, өйрәнгәнсә, кинонан һуң уйынға ҡала. Клуб эсе ялан кеүек — кинәнеп бейе, артҡы яҡта — оло майҙан. Йәштәр күмәк, күңелдәр иләҫ-миләҫ, бәғзеләр ҡыҙыҡ йә булмаһа кәмит күтә. Йөрәкте елкендереп баян моңо ағыла. Миңдеғәли баянсы, клуб баянына хужа, йәнде аҡтара моңо менән. Һәүетемсә генә башланып киткәндәй тойолған уйын ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы; Ғәтиәт үҙен инде ҡарт егеткә һанай.

Ул инде күререн күргән, татырын татыған, тигәндәй. Бисә лә йәрәшеп ҡараны, сәсе ағара башлаһа ла, тағы клубҡа ҡыҙ күҙләп килгән. Әйҙә, бейегән йәш-елкенсәк бейеһен, саң-туҙан ҡуптарһын!

Гүйә, диңгеҙ өҫтө лә тын, донъялар һил… Шунда йәшен ҡылысы ялтланымы: ҡапыл түңәрәк уртаһында Миңзада пәйҙә булды! Ҡайҙан?.. Егет иҫәңгерәне. Уң донъяһы былай тиҙ үҙгәрер, тормошо баштүбән түңкәрелер, тип уйламағайны. Ә аҡ битле, йомро беләкле хакимә уртала аҡ ҡоштай йөҙә, һил тулҡындарҙы дулата, буйҙан-буйға үҙ әмерен һала: иштәрем, теҙелешегеҙ! Мин — һеҙҙең хакимә, кире үҙ биләмәмә ҡайттым! Һил дарья иңендә һылыуҡай дауыл ҡуптара, барыһының күҙе — шул текә һында.

Дарья айҡала-сайҡала, аҡҡоштарҙы ҡосағына бер йола, бер ысҡындыра. Күрегеҙ уны, танығыҙ батшабикәне: был — Мәғҙән сихырсыһы! Сатан Мөхәмәтйән ҡыҙы ғынамы, бөтөн Мәғҙән иле хакимәһе!

Сибәр Миңзада барса халыҡтың һушын алып өйөрөлә, киңлектәрҙә дау ҡуптара. Етмәһә, аяҡта — ауыл ҡыҙҙары төшөндә лә күрмәгән осло башлы һары туфли, өҫтөнә ауыл ҡыҙҙары өсөн ят оҙон йөн буҫтау күлдәк кейгән, яғаһы — бәрхәт. Шул кейеме һынын тағы ла ныҒыраҡ белендерә, был затты тирә-әйләнәһендәгеләрҙән айырып дәрәжәле ханым яһай.

Шаңҡытты был һауалы ханым Мәғҙәнде — әллә ҡайҙан ҡайтып төшкән… Берәүҙе лә күрмәй, берәүгә лә күҙ һирпмәй, берәү менән иҫәпләшмәй, бары иңдәргә бойороҡтарын яуҙыра ғына.

Ғәтиәткә лә баш-күҙ алырға ирек бирмәне: бер мәл ҡаршыһына барҙы ла баҫты.

— Ғәтиәт, бейейбеҙ!

— Миң-за-да!

— Әйҙә!

Улар вальс өйөрөлә, һүҙҙәр, өндәр һауала аҫылынып ҡала, ә һындары өйөрмә ыңғайына эйәрә, ел-дауыл көйөнә көйләнә… Яңаҡтар яна, һулыштар өҙөлә; ҡайҙа ул өндәр, бары ҡараштар ғына аңлаша, улар ғына һөйләшә; ел тағы уйҙарҙы, теләктәрҙе күмеп китә, һүҙ әйтергә, һорау ҡуйырға ирек бирмәй. Был мәл ниңә ул һүҙҙәр, ниңә ул яза? Бейе, бейеүсе, башың әйләнһен, телең көрмәлһен! Юҡ, юҡ, һүҙҙәр — һуңынан…

Улар аяҡтан йығылғансы, һушһыҙ булғансы вальс өйөрөлә. Көй тынғас та, һулыштарын тигеҙләй, ике һүҙҙе бергә бәйләй алмай хитланалар.

— Ғәтиәт…

— Һин… — Бүтән һүҙ ҡата алмай: теле көрмәлгән, күҙҙәре ҡамашҡан был тамашанан; өндәре — сысҡан сыйылдауы…

— Мин был, йәнем — Миң-за-да! — Тишеп ҡарай суҡынсыҡ бисә, әрһеҙ итеп көлә, ҡысҡырып һөйләнә — әйҙә, сәсрәп кит.

Ғәтиәт айный алмай, был сихырҙан ҡотола алмай һаман. Аңы менән тоя, тик тороп китмәй, теле тотлоға, быуындары тыңламай, ҡашы тарта.

— Һин…

— Был мин, мин — Миңзада! — Көлә суҡынғыр бисә.

— Ҡайһы елдәр ташланы?

— Һин, тип ҡайттым, Ғәтиәт, Мәғҙәнгә, бар донъямды тырымтырағай иттем дә… — Сая бисә тирәһендәгеләрҙән тартынып та тор-

маны. Хәс тә сәхнәлә үҙенә тәғәйен ролен генә башҡара. — Әйҙә, бейейбеҙ!

— Тағы?

Тағы тулҡындар ҡупты, моң ағылды — даръя өҫтөндә Дауылбикә шашты. Әллә ниндәй асырғаныу, сәм менән Миңзада өйөрмә уртаһына ташланды. Парҙарҙы барлап сыҡты, шулай үҙенә, ишенә юл ярҙы. Бер ни менән дә иҫәпләшмәне, ярһыуын баҫа алманы. Ул шулай Диңгеҙ батырҙы шаңҡытты, шулай уға ла ут йоҡторҙо. Сәсә, әйҙә, йә саяға иш бул! Улар тулҡындар ыңғайына эйәрҙе. Парҙар өйөрөлөштө, әйтерһең дә, былар — көтөүсе, тегеләр — ҡаҙ бәпкәләре — түңәрәк яһап теҙелделәр.

Миңзада әллә ниндәй ашҡыныу, ғәм менән бейене был кистә, Ғәтиәтте үҙенән һис ысҡындырманы. Көй алмашынды, иштәр алмашынды, ә улар һаман бергә… Булмыш уртаһында даръя кейек тәнеләй йәйелеп ятты, шул кейек тәнендә икәү ағалашты.

Көй туҡтағас та, хистәр ташҡыны баҫылмағайны әле, алыҫтарҙан ҡайтып табышҡан, оҙаҡ йылдарҙан һуң ҡабат осрашҡан заттар һаман айырылыша алманы: клубтан бергә сыҡтылар, йәнәш атланылар. Кисерештәр алҡымдан алып бара ине, уларҙы сайпылтмаҫ өсөн Ғәтиәт тешен ҡыҫты, Миңзада ғына, был тынлыҡты еңергә теләп, һөйләнә — шулай бушлыҡты тултыра. Үҙе һорау ҡуя, үҙе үк яуап ҡайтара, һүҙен башлай, ташлай. Ә бушлыҡта август төнө тантана итә. Бары августа ғына күктәр аяҙ, төпһөҙ, йондоҙҙар эре, һулыш алыуҙары еңел. Август — ғашиҡтар айы, күктәрҙең иң таҙа, иң хозурлы мәле. Ирәйеп баҫып йөрө лә йөрө, йәндәрең иҙрәгәнсе һула август һауаһын! Бары августа ғына һөйгө, һөйөлгө килә, августа ғына ғашиҡ булыу фарыз һымаҡ.

Бына магазин янынан үттеләр. Иҫке күл ярындағы сельпо келәттәре лә артта ҡалды, Ғәтиәт һаман иҫен йыя алмай. Нәҡ ошо күл буйында Миңзаданың игеҙәге Миңзифа менән осраштылар. Хәтәр сере бар егеттең. Шул сер хәҙер күкрәген бәреп сыға. Бәреп сыҡһа, бөтә Мәғҙәнде баҫа, Миңзада ла, Ғәтиәт тә ошо ташҡында тонсоға… Ә Миңзада, бер ни булмағандай, тәтелдәй. Егет ике ут араһында… Бөгөн Миңзадаһы менән маңлайға-маңлай… Әкәмәт! Һулыштар өҙөлә, бар күл буйы яңғырап тора төҫлө йөрәк тибешенән. Бер ни ҙә үҙгәрмәгән дә кеүек. Сүкәйешеп ултырҙылар. Һүҙҙәр ойоно, теҙҙәр талды. Миңзада тағы һынын турайтты. Ай нурына ҡойонғас, буйы оторо нәфис, дәрәжәле булып күренде. Буй етмәҫ был зат егетте тағы үҙенә иш итте. Күльяҡ урамына сыҡтылар. Яҙмыш шул тарафтарға тартып тик торасы!

Миңзада ҡапылдан егеттең түшенә ҡапланды.

— Ғәфү ит, Ғәтиәт, кисерә алһаң, кисер!

Егеттең тамағы ҡарлыҡты.

— Мин барыбер һине онота алманым. Тормошом тормош булманы. — Бисара йәшен йотто. — Һуңлап аңланым, кисер! Мин — һинеке, һин — минеке, ишетәһеңме, беҙ бергә булырға тейешбеҙ! Һин дә ошо көнгәсә…

— Ә Миңзифа?

— Мин бер нимә лә белмәйем, юҡ, һөйләмә лә!

— Ә үткәндәр? Армия, армиянан һуң…

— Онотайыҡ, йәнем, үткәндәрҙе! Аҙаҡ һөйләрмен... Аҙаҡ, аҙаҡ! — Бисара асырғанды.

Егет ирекһеҙҙән ҡыҙҙың сәсен һыйпаны. Хакимә уның алдында кәмһенеп ялбарасы!

— Тынысла н.

— Мин үҙ-үҙемде ғәфү итә алмайым, Ғәтиәт... Аҙаҡ аңлатырмын... — Бисара йәшенә төйөлә.

— Шулай ҙа, Ғәтиәт, һин миһырбанлы кеше, беләм... Һин бөтә ағайҙарың араһында иң мәрхәмәтлеһе бит!

Хәйләкәр маҡтауын йәлләмәне, күҙ йәшен дә ағыҙҙы. Ул бөгөн, ысынлап та, Мәғҙәнгә саҡ килеп төшкән театр артисткаһы ине — бөтә һәләтен һалды шул ролгә.

Ғәтиәт, ахырыһы, тағы баш һалды. Ирҙәр ғүмерҙәре буйы тәүге хистән, тәүге йәрҙәр наҙынан айный алмай шул, тиҙәр — дөрөҫтөр. Ғәтиәт тә Миңзадаһын күреү менән ҡабат ҡойолоп төштө бит. Әйтерһең дә, арала йылдар ҙа ятмай, бер ниндәй мәсхәрәләр ҙә булмаған. Шул тәүге кистә үк сихырсы бисә егет йоратын яңынан сихырлап ҡуйҙысы.

## II

Хәҙер Әсләм Ҡуянсыҡ урамына һирәк юллана. Ҡотлояр ҡарт үлгәнгә, ун йыл ғүмер уҙҙы, шул дәүерҙә атай нигеҙенән һыуына ла яҙҙы. Әсәһе ҡаты бәғерле, ә атаһы уға өлгө булды. Әсләм ҡарттан ҡурҡа ла, уны ярата ла ине.

Әсләм 43-сө йылда ФЗО-нан ҡасып ҡайтҡайны. Ас, яланғас... Эсе эскә йәбешеп бөткән, аяғында саҡ-саҡ тора. Өйгә инергә, йылы аш ашарға, ҡайнар сәй эсергә ине — большевик атаһынан ҡурҡа, тәүҙә лапаҫта ҡунды. Дезертир, имеш! Әсәһе уны шулай аҙна-ун көн, атаһынан йәшереп, әле лапаҫ башында, әле баҙҙа тотто, ҡарттан йәшереп ашатты, Ҡотлояр өйҙә юҡ саҡта ғына өйгә индерҙе. Теге ҡарт, һәтәү, улын үҙе тотоп бирер властарға! Шунда әсәһе уны нисек ҡараны, ҡайһылай ҡурсаланы! Ә атаһы?.. Белгәс, тота һалып армияға оҙатты!

Әсәһе, бәлки, хәҙер үпкәләп тә ултыралыр: балалары үҫте, кеше булды — килеп тә баҫмайҙар. Әсә йөрәгенә еңелме? Ҡарсыҡ ныҡ үпкәләйҙер. Әсләм гел әсәһен әҙер донъяла йәшәй, атайыма тейешле ҡәҙер-хөрмәтте күрә, тип һананы. Атаһының ғүмере ауыр йылдарға тура килде. Ҡотлояр ҡарт ил өсөн, тип тырышты.

Хәмиҙә ҡарсыҡ Әсләмде бәләкәй саҡта бик осондороп барманы, шуға ир үҙен һаман мәхрүм күрә. Атаһы үлгәс, тыуған нигеҙҙән оторо екте. Төп йортҡа барһа ла, әсәһе менән һөйләшер һүҙ тапмай. Ҡарсыҡ кескәйҙән уға ят, ҡаты булды, уны ҡаҡты кеүек. Хәтерендә, Ҡуянсыҡтан Мотаһар урамына башҡа сыҡҡайнылар. Сабыйҙары илағас, бисәһе Баныубикә лә бик миктәп киткәс, Әсләм һөт һорап барҙы. Хәмиҙә ҡарсыҡ сепараттан айыртылған һөт биреп ҡайтарҙы.

Ҡуянсыҡ урамындағы Зөлҡәрнәй ағаһының өйөнә лә һуғылғаны юҡ — Нәкиә еңгәһе менән борсағы бешмәй. Шулай йәшәй туғандар — Ҡотлояр балалары. Хәмиҙә ҡарсыҡ, ғәҙәтенсә, уларҙы бер-береһенә һөйләп, ҡотортоп ултыра. Бары алыҫтан Камил ҡайтҡанда ғына төп йортҡа йыйылалар. Башта өлкәне Зөлҡәрнәй инеп, хәл белешеп сыға,

шунан Арттаҡы урамда йәшәгән Әсләм килә... Шунда һис һүҙһеҙ атай васыяты тураһында һүҙ сыға. Ағайҙар әсе бал эсеп шәпләнеп ала, Әбхаликтың эшен, ауыл хәл-әхүәлдәрен тикшерәләр. Яндырай Ғәтиәт туҙына, шул ут аҙаҡ Әсләмгә лә йоға. Оҙаҡламай был ҡор сәйәсәт усағына әүерелә. Усаҡ ләүкеп китеп, бар Мәғҙәнде ялмап алыр төҫлө. Әлбиттә, колхоздың яңы башлығын тетәләр, Күпкәк Әбхаликҡа нык эләгә; Зөлкәрнәй ағайҙы яҡлайҙар, ҡотлоярҙарҙың боронғо данын һағыналар.

Төп йорт шул саҡта аҙашҡан балаларын үҙенә тарта. Бүтән көндәрҙә бик-бик һирәк юлыға Әсләм атай нигеҙенә.

Был юлы ул Ҡуянсыҡ урамынан нык тулҡынланып ҡайтты.

Хәмиҙә ҡарсыҡ уртансыһы килеп инеү менән һалды хәбәрҙе:

— Әсләм, энең хәҙер сатан Мөхәмәтйәндең оло ҡыҙы артынан саба...

— Нисек? — Әсләм үҙ ҡолаҡтарына ышанманы.

— Шулай. Бер игеҙәге етмәгәйне лә беҙгә...

Әсләм йөҙәне.

— Миңзада исемлеһе Шиҙәленән уйнаштан бала табып апҡайтҡан!

— Шунан?

— Шунан ултырған да шыуған — сана төбө тишек булған... — Хәмиҙә нык асыуланғанда ғына шаярта. — Энеңдең хәлен дә белмәйһең — туғандар, имеш! Минең бында бер башыма — мең бәлә.

Хәмиҙә ах-вах орҙо, Хоҙайын да иҫләне.

— Энең хәҙер шул игеҙәктәрҙең Миңзадаһына эйәләшкән, кис клубтан ҡайтмай...

Әсләмдең пеләш башында ҡалған сәсе үрә торҙо.

— Береһенән ҡотолғайнык, хәйер ҙә биргәйнем... Шул Миңзадаһы энеңде армияға ла оҙатып ҡалған икән... Ә беҙ, шаҡайҙар, кесеһе — Миңзифаһын әйттереп йөрөгән булдыҡ. Уныһы, Ғәтиәтулла КПЗ-ға эләккәс, Сәйфетдингә эйәрҙе лә китте.

— Ғәтиәттең шул игеҙәктәргә кендеге йәбешкәнме?

— Әллә? Энеңдең игеҙәктәргә кендеге йәбешкәнме, әллә шул Сатан ихатаһына тары һибеп ҡуйғандармы?

Әсләм шаңҡыны, мырҙаһын нык ҡыҙғанды. Ғәҙәттә, беҙ үҙ туғандарыбыҙҙы башҡаларҙан өҫтөнөрәк күрәбеҙ, шуға уларҙы яттарҙан ҡыҙғанабыҙ. Туғаныбыҙ гонаһһыҙ, ул — матурыраҡ, булдыҡлыраҡ, ә дуҫы йүнһеҙерәк, ише хөртөрәк... Беҙ күңелебеҙҙән туғаныбыҙға арыуыраҡ эш, юғарыраҡ дәрәжә юрайбыҙ, уға лайыҡлыраҡ пар эҙләйбеҙ һәм... табабыҙ. Туғаныбыҙ иһә гел киреһен эшләй. Әлбиттә, ул хаталана, беҙҙе тыңламай. Һүҙебеҙгә ҡолаҡ һалмай, ярҙан ҡолай, ярҙамдан, иҫәр, баш тарта. Ни хәл итәһең? Әгәр тормошта туғаныбыҙ һайлаған шөғөл, тапҡан йәр беҙҙең идеалыбыҙға тап килмәһә, инде беҙ баш күтәрәбеҙ. Туғаныбыҙға үҙебеҙ үк яу асабыҙ, талап итәбеҙ! Шул саҡта беҙ ҡаяларҙы онтарға, даръяларҙы ҡороторға әҙер, тик беҙҙеңсә генә булһын! Эйе, беҙҙең туғаныбыҙ шәберәк, эйе, ул яңылыша, күҙе һуҡыр, ҡолағы ишетмәй... Был — ваҡытлыса, бер килеп аңлар, беҙгә рәхмәт уҡыр.

Әсләмдең ҡустыһы Ғәтиәт тә — ауылда беренсе егет, ҡойоп ҡуйған баһадир — шул балалы бисә тип ҡаплана! Йәп-йәш, сап-саф, ә нишләй? Хаталана! Күҙе тонған, башы әйләнгән... Һаташа. Бәлки, теге сихырлағандыр ҙа!

Әсләм Ҡуянсыҡ урамында ишетеп ҡайтҡанын түкмәй-сәсмәй бисәһенә еткерҙе. Баныубикә Миңзада тарихын әллә ҡасандан уҡ белә ине.

Миңзада Шиҙәлелә райпола эшләне. Шунда Баныубикәнең еҙнәһе — Раушания апаһының буласаҡ ире ревизор Тәлғәт менән сыуалған Миңзада ла ул. Ауырға ҡала… Тәлғәт еҙнә, Раушанияға өйләнеп, үҙҙәренә ҡайтып киткәс, Миңзада бала таба. (Был турала бәхтейәрҙәр бигүк һөйләп барманы, тик мәғҙәндәр хәбәрҙар ине). Хәҙер Миңзада шул балаһын йөкмәп ауылға ҡайтҡан...

— Шул Миңзада менән Ғәтиәт балдыҙ йөрөй, тиме? — Баныубикә ҡатлап белеште.

— Эйе, шул игеҙәктәрҙең олоһо менән! Береһе уға етмәгәйне…

— Миңзифаһы!

— Ижап уҡытабыҙ, тип бөттөк, уныһы икенсе берәүгә сығып китте…

— Өлгөрҙәр Мөхәмәтйән ағайҙың ҡыҙҙары! — тип көлдө Баныубикә. — Миңзадаһы сельпола, беҙҙә бухгалтерияла эшләй башланы. Бик үткер бисәгә оҡшаған…

— Тәлғәт бажанан балаһы бар, ти… Шул ҡатынмы ул Миңзада?

— Шул булмай!.. Кит, кит, әстәғәфирулла! — Баныубикә төкөрөндө, ире кеүек ул да, хәҙер үҙен был яңылыҡтан кәмһетелгән кеше тип хис итте.

— Әле Тәлғәт бажа, әле килеп Ғәтиәт энекәш!.. — Әсләм дә асырғанды.

Ире Әсләм өсөн генә түгел, Баныубикәнең үҙе өсөн дә был хәл башҡа һыймаҫлыҡ бер ғәмәл ине. Тәлғәт еҙнәһе менән ире Әсләм, тағы Ғәтиәт ҡәйнеше бажалар булып сыҡһа, Баныубикә менән Миңзада килендәштәр булып китә түгелме? Баныубикә быныһын кисерә алмаҫ! Шул ҡатын килендәше булып китһә, уның алдында ла хилафлыҡ ҡыла, уның да ниндәйҙер байлығын урлай! Баныубикә ни, Раушания ни. Баныубикә үҙен Раушания апаһы урынында тоя: Миңзада ла уның өсөн көндәш, уның бәхетенә ҡул һуҙыусы, уның алдында оло гонаһ ҡылыусы! Юҡ, улар зат та, татыу килендәштәр ҙә була алмаясаҡ! Миңзада ҡотлоярҙар нәҫеленән арыраҡ йөрөһөн, был иблислеккә ғүмерҙә лә юл ҡуйылмаһын! Миңзада — Баныубикәнең килендәше, имеш… Шул уҡ Миңзада — Раушанияның көндәше, Тәлғәт еҙнәнең элекке һөйәркәһе!

Баныубикә әллә ниҙәр уйлап бөттө. Әгәр ҡәйнеше, ысынлап та, шул уйнашсыға әүрәһә, уның сихырына тарыһа?.. Был көндә шул ғибрәт Миңзада килендәше урынын биләһә, ҡотлоярҙарҙың төп йортонда хужабикәгә әүерелһә?.. Ғәтиәт ҡәйнештең балалы бисә йәрәшмәҫкә башы етерме? Урау булһа ла, юл, һуҡыр булһа ла, ҡыҙ яҡшы, тиҙәр. Баныубикә яҙмышынан ваҡиғаларҙың уңай юҫыҡҡа ҡайырылыуын юраны. Ана, Әсләм дә нимә ишетеп ҡайтҡан! Хоҙай тыңлар ялбарыуҙарын, теләге ҡабул булыр, илаһым, яуыз заттар менән юлы аймылышыр, маңлайға-маңлай сәкәшмәҫ! Иблислеккә юл ҡуйылмаҫ! Амин! Баныубикә — ҡотлоярҙарҙың нисәнсе килене — белгән сүрәләрен уҡып, доғаларын ҡылып ҡуйҙы. Ҡотлоярҙар яҙмышындағы боролоштар еле уның тормошона ла килеп ҡаҡлыға, уның көнөнә лә төҫ бирә ине шул.

## III

Был бәхтейәрҙәр нәҫеле йөҙөндәге берҙән-бер һәм иң ҡара тап ине. Нәҫелдә Раушания баштан уҡ иң затлы һөйәк тип һаналды. Иң уҡымышлыһы, иң сибәре ул! Гонаһһыҙ бер зат, тиһәң дә була. Хатта бәхтейәрҙәр Раушанияны үҙ араларындағы илаһи бер йән һымағыраҡ та күрҙе. Уның һөнәре, ҡылыҡтары менән ғорурландылар. Шулай булғас, был фәрештәгә ҡағылышлы һәр зат изге, оло, гонаһһыҙ булырға тейеш ине.

Тәлғәт йәш, көс-ҡеүәте ташып тора. Оҙон буйлы, өлбөр сәсле. Уҡымышлы. Кооператив техникумын тамамлағас та, Мәғҙән районы үҙәге Шиҙәлегә ебәргәйнеләр. Яңы ерҙә өр-яңы дуҫтар, өр-яңы эш-шөғөл тапты. Башта Мәғҙән сельпоһы рәйесе Һибәтов менән дуҫлашып алды.

Ҡарт ҡартҡа тартыла, йәш йәшкә ылыға, ә яттың күҙе ҡыҙылға төшөүсән. Әмәлһеҙҙән, яңыраҡ бухгалтерҙар курсын тамамлап ҡайтҡан Мәғҙән ҡыҙы Миңзада ла сибәр зат, имеш — күҙгә кереп бара. Ят егеттең иғтибарын һылыуҡай шундуҡ үҙенә йәлеп итте. Быларҙы тәүләп Шиҙәлеләге һабантуйҙа бергә күрәләр: хыялыйҙар, ғәм халыҡ араһында һин дә мин йөрөп яталар. Йөҙ йәшереү ҡайҙа? Тәлғәт олораҡ булһа ла, Миңзада сая, ауылда ла гел үҙенән өлкәнерәктәргә ылыҡты. Миңзада, гүйә, бәхет даръяһында йөҙә: күрегеҙ, дуҫтар, ул Шиҙәленең күренекле заттары менән йәнәш! Егете — ят, уҡымышлы. Илгәҙәк тә, сибәр ҙә… Ә буй-һын, дәрәжә!

Улар һабантуй ахырынаса етәкләшеп йөрөнө. Хәс тә кинолағыса! Матур һүҙҙәр һөйләнеләр, ирәйеп көлдөләр… Мәғҙәндәр ҙә күрҙеме икән уларҙы? Ситтән һоҡланышып күҙәттеме икән? Дөрөҫө, көнләшкәндәрҙер! Көнсөлдөң көнсөлө бит ул мәғҙәндәр! Миңзаданың был уңышы, моғайын, уларҙың эсенә һыймағандыр.

Һабантуй һүрелә төштө. Йәштәрҙе лә битарафлыҡ тойғоһо солғап алды, шай: ваҡиғалар ҡайһы тарафҡа илтһә лә, ризалар, донъя тәртәһе ҡайһылайға борһа ла, хуп. Миңзада көнө буйы аяғөҫтө талсыҡҡайны. Көноҙоно ҡайнар ҡояштың рәхимһеҙ нурҙары аҫтында илерҙе — күләгә, күләгә ҡайҙа? Талған аяҡтарына ла саҡ ҡына ял алдырһасы! Бер йотом һыу эсһә лә, йә битен сылатһа, күҙе асылыр.

Етәкләшкән көйө Әй буйына төштөләр.

— Әйҙә, ултырып алайыҡ.

— Әйҙә!

Һүҙҙәр ялғанып тора, теләктәр теләккә иш килә. Ултырҙылар. Йылға өҫтөндә бихисап-биниһая мәрйендәр күҙҙе ҡыҙҙырып емелдәшә, ваҡ балыҡтар ҡарпый, һәр йән эҫелә һыуҙа кинәнә. Миңзада осло башлы туфлийын систе лә аяғын һыуға тыҡты. Әллә ниндәй ләззәт кисерҙе. Ә егет үҙе ниҙәр уйлап ултыра икән? Ҡояш, һыу йөҙөндә сағылып, күҙҙе ҡамаштыра, шаян нурҙар нәфис боттарҙы ялтырата. Ҡыҙ илереп көлдө, тулҡындар менән шаярҙы, Тәлғәткә һыу сәсрәтеп булашты. Ә егет етди ине — бер нөктәгә төбәлгән. Ул был көндө ғүмеренең бүтән көндәренән тамсы ла айырып ҡараманы, ҡыҙ кеүек күңеленән был көнгә айырым урын бирмәне. Ғәмһеҙ ине, ваҡиғалар ағышының ҡайһы юҫыҡҡа төшөп китерен дә уйламаны — бары яҙмыш ихтыярына буйһонд о. Шулай яйлыраҡ та ул: шул саҡта ғәйепле, аҙаҡҡыһы өсөн яуаплы булмайһың. Миңзада иһә тыштан ғына тыныс, ә күңелендә әллә ниндәй тартыш-көрәш башланды. Был көндә ул ниндәйҙер мөһим эш башҡарырға тейеш! Был көн мотлаҡ хәтергә

уйылыр! Ҡыҙ әлегә хыялындағыһының ахырын тоҫмаллай ҙа алмай. Быға тәжрибәһе етмәй.

Күләгәлә рәхәт ине. Тәндәр яҙылып, ойоп киткәндәй итте. Ары ни ҡылырға? Егет тә битараф кеүек, ҡыҙҙың башына ла йүнле бер уй кермәй. Йәш тән тиҙ көс йыйҙы, быуындар нығынды, ҡан шәберәк йүгерҙе. Әллә ниндәй ят һуҡмаҡҡа төштөләр. Ауылға туранан сыҡмаҡсы иткәйнеләр, аҙаштылар. Әллә эшһеҙлек, ҡыҙыҡһыныу ғәләмәте үҙҙәрен юрый төпкөлгәрәк әйҙәне, әллә сер үҙ артынан әүрәтте?

Иҫтәренә килгәндә бер-береһенең ҡосағында ирегәйнеләр. Сая ҡыҙ егетте башлап үҙе үпте — ары түҙер хәле ҡалмағандыр бисараның. Үҙе үрелеп, эйе, һары туфлийы остарына баҫып танһығы ҡанғансы үпте ят, әммә үтә лә илгәҙәк һәм яғымлы егетте. Егет тә ҡаршылашманы, ҡыҙҙың теләген кире һуҡманы. Тәндәр былай ҙа ҡыҙғайны, йөрәк тулай, аҡыл бәйҙән ысҡынғайны был мәлдә. Шундуҡ йомшаҡ үлән өҫтөнә ауып киттеләр. Көсөргәнешлектән, ныҡ тетрәнеүҙән быуындары тотмай башланымы әллә? Бәлки, егет тә был ғәмәлде тәүләп атҡарғандыр, бәлки, ҡыҙ ҙа беренсе тапҡыр татығандыр был емеште? Һәр хәлдә бөтәһе лә үҙенән-үҙе килеп сыҡты, йәштәр был эште гонаһ тип түгел, сауап тип һананы, ә аҙағын уйламаны. Тәүләп сикһеҙ наҙ, ләззәт татынылар. Шунда үҙ алдарына ғына был илаһи мәлде ғүмергә онотмаҫҡа ант иттеләр.

Шул бәхетле көндөң емеше булып яҡты донъяға сабый тыуҙы. Ул гонаһһыҙ бер йән эйәһе ине. Нимә, гонаһһыҙ заттар гонаһтарҙан яраламы әллә? Миңзада, сая Миңзада күренекле егеттән, яғымлы Тәлғәттән шулай бала тапты.

Бәхтейәрҙәр, эйе, ғәм халыҡҡа нәҫел серен сисә алмай. Өҫтәүенә, шул бихая бисә Мәғҙән сельпоһы бухгалтерияһына эшкә урынлашты. Хәҙер ул һатыусыларҙың, Баныубикәләрҙең башлығы кеүегерәк тә буласаҡ түгелме? Һибәтов та ни уйланы икән? Шул алабарман бисәне эшкә алып ултырмаһа… Хәҙер Баныубикә лә Тәлғәт еҙнәһенең элекке һөйәркәһе менән көн дә осрашып торорға мәжбүр. Нисек түҙер, быны нисек кисерер? Раушания апаһының көндәше — сельпола бухгалтер, Баныубикә уның менән бер коллективта эшләп йөрөй. Баныубикә үҙенекен уйланы, был төн күҙен йоҡо алманы. Алдағы көндәрҙә ни булыр? Был хәл ни менән генә барып бөтөр икән?

## IV

Хәмиҙә ҡарсыҡ башта был хәбәргә ышанманы. Ишеткәйне улының сатан Мөхәмәтйән игеҙәктәренең береһенән икенсеһенә әүрәп ҡаңғырыуын. Быны булыуы мөмкин түгел! Әле генә береһе тишек шоманға ултыртты, быныһын да тегенең һыңары тиҙәр, ситтән бала күтәреп ҡайтҡан. Ғәтиәт хәҙер шул бисә менән бәйләнә!

Ҡарсыҡ ҡаңғырып ултырҙы. Олоғара өйҙә бер үҙе. Бынан нәҡ ун йыл әүәл — 1953 йылда Ҡотлояр ҡарт үлеп китте. Был ваҡытта олоһо, Зөлҡәрнәйе, өйләнеп, башҡа сыҡҡайны, Камил институтта уҡып йөрөй, Әсләм дә шул йылды Баныубикә килен менән ҡауышты. Хәмиҙә ҡулында Ғәтиәт менән Мазһар улы ла, берҙән-бер бөртөк Рәшиҙә ҡыҙы ҡал-

ды… Оҙаҡламай йәше еткән ҡыҙын әпшәндәр һоратты. Төпсөгө Мазһары Өфө һөнәрселек училищеһына инде, Ғәтиәтте армияға алдылар.

Ғәтиәт ҡарсыҡтың төп таянысы ине. Уны әпәкәй-сөпәкәй итеп үҫтерҙе, ауыҙынан өҙөп тигәндәй ҡаптырҙы. Бөтә өмөтөн шул уғланға бағланы. Армияла йөрөгәндә өс йыл буйы көттө. Инде бар хәсрәттәрем онотолдо, тиһә…

Ҡуянсыҡ урамы үҙ яйына йәшәй. Ҡаршыла — Зөлҡәрнәйҙең дәү йорто. Хәмиҙә инеп йөрөмәй, Нәҡиә килене менән борсағы бешмәй. Түрә бисәһе булып алғас, килен танауын юғары сөйҙө: иренең туғандарын тупһаһына баҫтырмай.

Уң яҡта — Сабирйәндең оло улы Хажиғәлиҙәр, һул ҡулда — Һаҙыйҙың балалары — Вәрис улының йорто, ҡыҙы Латифаның тауыҡ кетәгендәй өйө. Һаҙыйҙың ҡарсығы Миңдеямал Вәрис улында йәшәй. Хәмиҙә менән Миңдеямал ҡарсыҡ татыу татыулыҡҡа. Ни тиһәң дә, ғүмерҙәре бергә үтте бит, аслығын да, туҡлығын да бергә кисерҙеләр. Һуғышта күрмәгәнде күрҙеләр, тағы Һаҙый менән Ҡотлояр ҡарт бер тамырҙан түгелме? Һаҙый һуғышҡа һыйырын һатып, шуның аҡсаһына пальто алып кейеп китте; оҙаҡ та тормай ике балаһы астан шешенде… Хәмиҙә имсе Файзада ҡарсыҡҡа ла керә. Уның ире уҡытыусы Аҙнабай ҙа һуңғы һуғыштан ҡайтманы. Уныһы ла ҡотлоярҙар затынан… Ҡотлоярға икеме, өсмө туған. Имсе Файзада ғүмере баҡый яңғыҙы. Балаһы булманы. Тыҡрыҡ яҡта һарун Фәтихтәр, арыраҡ боронғо Аллаһийәр бай балалары Сәғҙиҙәр йәшәй — Хәмиҙә улар менән бик ҡатышмай. Ә байғош Тәзейҙәр тоҡомо менән ҡороно.

Шул күршеләре менән һәүетемсә ғүмер һөрөп ята Хәмиҙә ҡарсыҡ — ҡотлоярҙарҙың төп нигеҙен һыуытмай. Шул Ҡуянсыҡ урамында ғүмере уҙҙы, хатта тыуған ауылы Өлкөндөгә лә барып урағаны юҡ, һирәкһаяҡ апалары килһә, килә… Тамам Мәғҙәнгә эйәләште, үҙ ауылын бөтөнләй онотто. Йәшерәктәр хәҙер унның ситтән төшкән килен икәнен дә белмәй, Ҡуянсыҡтың төп кешеһе тип һанай. Һирәк-һаяҡ ситкә һибелешкән уландары ҡайтып күренә, буш ихатаға шуларҙың баласағаһы тулып китә. Шул сабыйҙар шауы йәнен елкендерә, шул балалар менән йыуана ҡарсыҡ, тегеләргә ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә ашҡына. Ул — ҡотлоярҙар нәҫеленең инәһе, төп тармағы хәҙер. Ҡасандыр был тупраҡҡа тәрән тамыр ебәргән заттың үҙәге һымағыраҡ… Бөтә Ҡотлояр балаларын үҙенә тартып, тирәһенә туплап йәшәй. Ҡарт менән улар шулай килеште: Ҡотлоярҙың Алмагөлдән тыуған Сабирйәне лә, Әлфирә алабарманынан ҡалған Зөлҡәрнәй менән Әсләме лә — Хәмиҙәнең үҙ балалары, ҡарсыҡ уларҙың береһен дә ситкә типмәй, бөтәһен дә үҙ балаһы итеп күрә… Хатта балалар үҙҙәре лә был хаҡта белмәйәсәк! Шулай килеште теге ваҡытта ҡарт менән ҡарсыҡ. Ҡотлояр Әлфирәнән һуң Хәмиҙәне оло улы Камил менән Өлкөндөнән үҙе барып алды. Шунда һүҙ ҡуйыштылар. Был — уларҙың ғаиләһенең сере ине.

…Хәмиҙә ҡарсыҡ — тәҙрә алдында, тышта — Ҡуянсыҡ донъяһы. Ҡарсыҡтың башына төрлө уй килә. Тағы шул йәшкә еткәс, хәтерләмәй ҙә булмай.

Уҙған дәүер эсендә Хәмиҙә ҡарсыҡ үҙе лә был нәҫелдең айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелде. Улай ғынамы, ул — тоҡомдоң оло инәһе! Тоҡомдо үрсетеүсе! Әле төп йортта, төп тәхеттә батшабикә һымаҡ…

Ҡарт уға ошо урынды ышанып тапшырып китте, тәхетен васыят итте, усаҡты һыуытмаҫҡа, тамырҙы ҡоротмаҫҡа ҡушты.

Башына хәтәр уй һуға: киләсәктә был тәхет кем ҡулына күсер? Кем был усаҡты терелтәсәк? Өйҙә бисә — хужа, йортта ул ғаилә усағын дөрләтә… Ә Миңзада — алабарман бисә, уйнаштан бала тапҡан! Ҡотлоярҙар күсенең буласаҡ инә ҡорто, ғаилә тотҡаһы шулмы? Ата шайтан, уйнаш. Хәмиҙә йәшерәк сағында берәү менән йәшәп ҡараны бит инде… Ғәтиәт хәҙер шуның һыңарын таптымы? Бәлә. Хәмиҙәнең ҡарт күнөндә күрәһеләре бар икән: бәлә ҡабатлана, һаман артынан шул ирҙәүкә Әлфирә шәүләһе ҡалмай эҙәрлекләй!

Тәҡәте ҡороно Хәмиҙә ҡарсыҡтың, хәтәр асышынан аҙарынды: Миңзада — Әлфирәнең ише, ҡабат өйгә иблис ҡоһоро инә! Бәлә ҡабатлана, Хәмиҙә яңынан йән ғазаптарына тарый: Ғәтиәт улы ла теге ата шайтандың һыңарына юлыҡҡан — һис кисекмәй шул иблис затынан айырырға!

Хәмиҙә ҡарсыҡ тыныс ҡына ултырған еренән шундай хәтәр асыш яһаны.

***

Бер заман итек үксәһендәге Тишек салбар осаһындағы Йыртыҡтан эй көлә икән.

— Йыртыҡ, Йыртыҡ, күр, осаң ап-асыҡ! Кеше күрә, үҙеңде мәсхәрә итә!

— Ярай, Тишек, һин дә минән әллә ни ары китмәгәнһең… — тип сер бирмәгән була икән Йыртыҡ.

— Һин, Йыртыҡ, бөткән баш: кешегә хужаңдың оят ерен күрһәтеп йөрөйһөң — әҙәм мәсхәрәһе! Һинең арҡаңда хужаңа оят, ә салбарҙы хәҙер сүплеккә сығарып ташлаясаҡтар, ха-ха!

— Йә, Тишек, һин дә минән уҙмағанһың — көнө бер килер: һин дә Йыртыҡҡа әйләнерһең, һине лә кеше Йыртыҡ, тип көлөр, хужаң аяғына һыу үткәргәс, һине лә шул сүплеккә бырағытыр…

Тишек һаман тыйылмай, хихылдай ғына:

— Йыртыҡ, йыртыҡ, осаң ап-асыҡ… Ана, хужаң осаһы — яп-ярыҡ!

Бер заман, Йыртыҡтың юрауы юш килеп, итек тә туҙған, Тишек тә ҙурайып, Йыртыҡҡа әүерелгән… Хужаһы, үксәне ямауы яйһыҙ тип, итекте Тишеге-ние менән сүплеккә атҡан. Ә салбарындағы Йыртығын иһә ямап ҡуйған, үҙен дә, Йыртыҡ әфәндене лә әҙәм мәсхәрәһенән шулай ҡотҡарған.

***

...Сатан Мөхәмәтйән менән дә үҙ иҫәп-хисабы бар ине ҡарсыҡтың.

Ҡарсыҡ шулай яңғыҙ ҡалып төрләһен уйлай. Күпте кисергән бит инде ул, күп хәтәрҙәрҙе башынан үткәргән. Шаһитлығы самаларҙан ашҡан. Хәҙер, күп ғүмер уҙғас, ләүкеп һүнгән усаҡҡа оҡшап ҡуйған. Хәтер йомғағын һүтеп ултыра, быуындарҙы быуынға бәйләй, тәүарихты һаҡлай. Йыйырсыҡлы йөҙөндә, гүйә, тарих үҙе ҡатып ҡалған, моңһоу ҡараштарына, гүйә, алыҫ йылдар һағышы һеңгән. Сатан Мөхәмәтйән үҙе лә йәшерәк саҡта шуҡ бәндә ине, Хәмиҙә иҫләмәй буламы.

...Һуғыштың һуңғы йылы тыуыр саҡта таяҡҡа таянып ҡайтып төштө ул ауылға. Ышанып, үҙен келәт хужаһы итеп тәғәйенләнеләр. Аслыҡ

йыл, идарала сулаҡ Хәлил ҡотора. Колхоз идараһы рөхсәте менән генә бер муҡса он яҙҙырып ала алаһың… Алһаң алаһың, ала алмаһаң, юҡ! Закон ҡаты, уны рәйес тә, келәт хужаһы сатан Мөхәмәтйән дә ныҡ тота. Шул сатан ҡарға хәҙер — колхозға, уның бар байлығына баш. Хәтәр, шул хөрәсән келәткә ашлыҡ таҙартырға йөрөгән Хәмиҙәгә ҡаныҡты бит әй! Бүтән бисәләр шаран-яран, йылғыр сатанға ыҡҡа килергә тора, ә уныһының күҙе кемгә тона? Бешкән арыштай ҡалын толомдарына ҡыҙыҡтымы икән? Ғаиләһе астан миктәһә лә, ят irҙәргә ымһынғаны юҡ бит. Сатан ыңғайына торорға ла йыйынмай! Ил күргәнде ул да күрер, Хоҙай йән биргәнгә йүн биргән. Оҙаҡламай һуғыш осланыр. Донъялар рәтләнер.

Сатан яңғыҙ сағын тап итте лә һарайҙағы орлоҡ өйөмөнә йыҡты. Хәмиҙә оҙаҡ тартҡылашты, сатан ҡуйманы, әллә нимәләр вәғәҙә итеп бөттө. Шул йыл көҙөн ҡарты аслыҡтан шешенеп йығылғайны. Уны, Тирмәнтауҙағы һарыҡ фермаһынан туңып ятыуҙан саҡ ҡалғас, өйгә килтереп ташланылар. Үктәгән зат тартыша башлаған, һарыҡтарымды астан үлтермәйем, тип йүгергәнсе, үҙе күтәрткән. Коммунист, иң тәүҙә илгә, колхозға булһын, тип ҡыйыша… ”Бөтәһе лә фронт өсөн!” — тип оран һалған булды, йыйылыштарҙа сафсата һатты, ас халыҡты еңеүгә өндәне, ә үҙенең ауыҙын асһа, үпкәһе күренер, өйҙә бисәһе менән балалары бер телем икмәккә тилмереп ултырыр.

— Хәмиҙә, зинһар, тим, этмә ҡулымды. Ҡотлояр ҡарттың: ”Хәлил ҡорҙаш, теләһәң, әйҙә, бисәмде бирәм, кинән — йәп-йәш бит әле ул”, — тигәнен үҙең ишеттең дә, ниңә киреләнәһең? Әҙерәк он бирәм, балаларың ас ултыра…

Толкаһыҙ бисәнең башында мең төрлө уй ҡайнай. Икеләнеүгә оҡшаған тойғолар ҙа бар инде, бар. Иренең үҙен сулаҡ Хәлил әзмәүергә һатыуын Хәмиҙә үҙе лә ишетте ишетеүен, тик әллә ни әһәмиәт бирмәне. Ул ҡырылыш йылында, утыҙ етелә, Ҡотлояр, башын һаҡлап, әйтһә, әйткәндер ҙә… Хәҙер хөсөт шуны боғаҙына тыға. Үгеҙ шикелле дөрә генә, һис ысҡынырмын тимә, бармаҡтары ҡыпһыуыр һымаҡ. Сатандың бөтә көсө беләгенә күсә тигәнде лә ишеткәне бар Хәмиҙәнең. Ул һиңә сатанмын тип тормай, нәҫел үгеҙе, алҡымдан ала.

— Хәмиҙә, еңгә, тим! Хәмиҙә…

— Мө-хә-мәт-йән…

— Хәмиҙә, һин тип… Үҙәгем өҙөлә, берҙе генә…

— Мө-ө…

— Эх, татлы ул, ең…

Ахыр сиктә Хәмиҙә сигенде. Сатан уны орлоҡ өйөмөнә һырыҡтырҙы ла теләгән ҡылды, эй килештерҙе генә. Бигәләш, өнһөҙ Хәмиҙә үҙе лә ләззәт татыны: иҫһеҙ-һушһыҙ булды, хәлһерәне, ахыр тамам донъяһын онотто. Ә сатан кинәнде генә, хәс тә ғүмерҙә татымағанды татыны, ҡороғор.

Шунан һуң келәт хужаһы ныҡ йомартланды: онон да, һирәк-һаяҡ итен дә йәшереп кенә һала, ауыҙы йырыҡ, күҙҙәре майлы. Хәмиҙә шулай балаларын аслыҡтан йолоп ҡалды, ирен дә, шешенгән ерҙән, аяҡҡа баҫтырҙы.

Хәҙер, хәтерләһә, үкенгәндәй ҙә итә, тик ҡылғанды кире ҡайтарып, ғүмер йылғаһы ағышын бороп буламы? Бөтәһе лә яҙмыш иркендә, замана намыҫында, заманына күрә — ҡыланыштары… Йыш ҡына Әлфирә

көндәшен иҫләй, хәҙер күңеленән уның тормошон да аҡлап ҡуя. Әлфирә хаҡ эшләгән, үҙенсә дөрөҫ йәшәгән — Хәмиҙә уның урынында булһа... Көндәше хәҙер, ысынлап та, күҙ алдына матур, сая булып баҫа. Ысынлап та ул ваҡытта бик йәш, бик сибәр булған бит! Хәмиҙә көндәшен күңеленән кисерә, йылдар аша ғәфү итә, йылдар аша шаянды яҡшыға сығара, матур итеп күрә. Хатта үҙе унан ярлыҡау ҙа һораған һымаҡ. Тағы һуңлаған ялуарыуҙары үткәндәргә барып етәме икән, алыҫтарҙа тороп ҡалған сая күңелсәк көндәше — ирҙәүкә Әлфирә — уның өнөн ишетәме? Ғәфү итәме?

Ҡарсыҡ хәтирәләренә бирелеп ултыра. Уйы үткәндәрҙән бөгөнгөгә әйләнеп ҡайта. Улы ла Мөхәмәтйән игеҙәктәре араһында ҡаңғырып бер була. Хәмиҙә үҙе зат та шул нәҫелгә ҡатышмаясаҡ! Бер хур иттеләр бит инде, Хәмиҙә лә ризалашҡайны... Уныһы, исмаһам, кейәүҙә булмаған... Бынан кире Хәмиҙә сигенмәҫ, ҡотлоярҙар ҡорона тегеләрҙе яҡын йоғондормаҫ! Булғаны менән байрам!

Хәмиҙә ҡарсыҡ ҡотлоярҙар тоҡомоноң оло инәһе. Уға ошонда йәшәргә, ҡотлоярҙарҙың ҡото булырға яҙған. Ғүмере шунда уҙҙы... Ана, сабырлығын юйғас, ауылда тиңһеҙ бер сибәр Әлфирә лә был тупраҡҡа ерекмәне. Бөтәһе тураһында ла уйлай Хәмиҙә ҡарсыҡ. Хәҙер бәпкәләрен ян-яҡҡа тараткас, ата ҡаҙынан да яҙғас, йәтим инә ҡаҙ ише яңғыҙы ғына һанай ҡалған көндәрен.

## V

Нәҡиә менән Миңзада нығ дуҫлашып алды. Нәҡиә "Селмаг"та тауар һата. Һынсыл ҡарашлы, төҫкә-башҡа ла арыу ғына. Уҫал, түрә ҡатыны булараҡ, кешеләргә юғарынан ҡарай. Ире Зөлҡәрнәй урынынан төшөрөлһә лә, элекке ғәҙәтен ҡыуа. Холоҡ, ҡара һаҡалың кеүек, артыңдан эйәреп йөрөй.

Ғүмер баҡый Нәҡиә Баныубикә килендәше менән ярышып йәшәне, унан алдынараҡ, шәберәк булырға тырышты. Ҡәйнәһе өсөн, уға ярарҙан түгел, ә былай, кеше күҙе өсөн. Баныубикә тәжрибәле һатыусы ине, сельпола гел маҡтап һөйләнеләр. Һибәтов та йыйылыш һайын ауыҙ һыуын ҡорота: "Баныубикә Ҡотлоярова — уңған, халыҡты яҡшы хеҙмәтләндерә..."

"Продмаг" та, "Селмаг" та сельпола иң эре магазиндар, ауыл халҡы шуларға ҡарап тора. Баныубикә лә, Нәҡиә лә өлкән һатыусылар, алмашсылары ла бар. Магазиндар ике сменала, тәүлегенә ун дүрт сәғәт эшләй.

"Селмаг"та йылы, тыныс. "Продмаг"та ҡышын йылы тормай, шуға шәкәр, көнбағыш майы, диңгеҙ балығы һатыу үҙе бер яфа. Һыуыҡта прәник, ярмаһын үлсәп торорға кәрәк. Ә араҡы килтереп тултырһалар, башың ғына ҡайнай. Колхозсыларға аҡса тараткан көндә "Продмаг" тирәһе һабантуйҙы хәтерләтә: ир-ат магазинды һырып ала, бер керә, бер сыға. Бер нисә ҡуласа яһап, ысын оборона тота "Продмаг" тирәләй! Бындай ваҡытта Баныубикәләр икәүләп эшләй: ике ҡулдан араҡы һата, ал-ял белмәй. Араҡы ғали йәнәптәре хәҙер ауылға батша булып ала; магазинға ла табыш килтерә, планды тултырырға ярҙам итә. Прилавка артынан йәшник-йәшник араҡы ташып, аяҡтан йығылалар. Алмашсының ире лә килеп булыша, шәкәр, ярма тоҡтарын би-

рерәк һөйрәй. Тағы гел генә ярҙамсы көтөп ултыраһыңмы — үҙеңә әңкәндәргә кәрәк. Печенье, кәнфит ҡумталары, табаһы, кәстрюле — сауҙа өҙләкһеҙ дауам итә.

Ҡыш көндәрендә сей утын ни быҫлап тик ята. Ваҡлап, грамлап үлсә, әйҙә, ялан ҡул тотон! Кем бирсәткә кейеп һатыу итә? Ә "Селмаг"та бар әйберендә алаһың да бирәһең, бесәһең дә төрәһең — тоҡ ташыйһы юҡ, ярма үлсәп аҙапланаһы түгел. Бер заман "Продмаг"та ҡойоп араҡы эсерергә рөхсәт иттеләр — таптылар осһоҙ буфет. Мөлдөрәп тә, гөрөлөшөп тә ир-ат инә, йөҙ грамлап та, ике йөҙ грамлап та ҡыҙыл йә аҡ араҡы ҡойҙороп эсә. Мутыраҡтары: "Баныубикә ҡәрендәш, үҙең дә тәмлә, әтү өшөп тораһың", — тип шарята. Шаяртамы, йәнгә тейәме? Үтескә һораусылар ҙа етерлек, улар һарыуҙы ҡайнатҡаны етмәгән, ауыл советы исемлек менән он, ярма бүлергә фарман бирә.

Продмагтыҡылар селмагтағыларҙан көнләшә, ә тегеләре йыш ҡына пландарын тултыра алмай — тағы "Продмаг" ғәйепле... Социалистик ярышта тағы Баныубикә алға сыға, пландары айҙан-айға үтәлә, Баныубикә маҡтала. Һибәтов та, билгеле, тағы Баныубикә Ҡотлоярованы күтәрәсәк. Шуғалырмы, сельпо конторaһына эшкә килгән бер кешене Нәкиә үҙенә яҡынайтырға тырышты. Йәш экономист Миңзада ла шулай "Селмаг" һатыусыһы ауына ҡапты.

Нәкиә лә Ғәтиәт ҡәйнеше менән Миңзада араһындағы мөнәсәбәттәрҙе белә ине — шуға быныһы уға ҡулай ғына булды. Бер атыуҙа — ике ҡуян. Конторағa отчет менән керһә, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй.

— Ғәтиәт балдыҙ былай арыу ғына... — тип ебәрә еңгә кеше. — Төҫкә-башҡа ла... Минеңсә, ағайҙары араһында иң ярҙамсылы ул.

Нәкиә Ғәтиәт яғынан тороп һөйләй, йәнәһе, ул Миңзада өсөн — егеттең туғаны, яҡын ғына кешеһе.

— Әй, туғанҡайым, саҡ ҡына ҡалдыҡ та... Ижап уҡытырға, тип бөттөк, ағайҙары ашыҡтыра, мин быға төптө ҡаршы инем... Зөлҡәрнәйгә лә әйттем: "Мин ҡатышмаясаҡмын, бәләһе — үҙҙәренә!" Мин, Миңзада, икегеҙҙең арағыҙҙы электән беләм дә инде...

— Нәкиә апай...

— Иҫемдә, иҫемдә. Татыу инегеҙ... Ярай, ул хилаф эште ваҡытында өҙөп ҡуйҙыҡ.

— Нәкиә апай...

— Бел: был эштә Нәкиә апайыңдың да өлөшө ҙур! Әгәр ул шул кистә участковыйҙы саҡыртмаһа, Ғәтиәт балдыҙын юрый Миңзифанан КПЗ-ға йәшереп ҡуймаһа...

— И, апай...

— Сер, сер, икебеҙ генә беләбеҙ. Бер ҙә күңелем тартманы шул, йөрәгем менән тойҙом... Һинең ҡайтаһың булған икән.

— Нәкиә апай...

— Хоҙай, икегеҙҙе иш итеп, бер-берегеҙ өсөн яралтҡан! Ҡара, анау, убырлы ҡарсыҡ шәбәйеп алған: йәнәһе, ҡартайған көнөндә киленле була, түрбашта йомош йомошлап, бот салып ултыра! — ултырмай тор әле, мәйтәм. Баныубикә менән Әсләм дә — шунда! Баш-күҙ алғансы, уйламаҫ-үлсәмәҫ борон ике аңраны ҡушырға йөрөйҙәр! Ғәтиәт

көн дә кис — Күльяҡта, эй быларҙың эш көйлө бара… Мәйтәм, ен туйы була был. Зөлҡәрнәйгә лә әйттем.

Шунан Нәкиә ҡәйнешен өйҙән өтәҫләүен теҙҙе, хикәйәһенә ҡуйы-ҡуйы буяуҙар ҡушты.

— Ысын ен туйы була ине ул.

Бер атыуҙа ике ҡуян тигәне Нәкиәнең килендәше Баныубикә ине. Баныубикә менән Миңзада араһы ғүмергә яҡынаймаһын! Әйҙә, улар һис ярашмаһын! Миңзада Баныубикәнең еҙнәһенән бала тапҡан. Хәтерендә, Тәлғәт райпотребсоюзда ревизор булып эшләгәндә Мәғҙәнгә лә килгәйне… Эйе, Һибәтов менән дуҫтар ине… Теге ревизор йылғыр булған, Шиҙәлелә лә, Мәғҙәндә лә ауыҙ асып йөрөмәгән.

Нәкиәгә ҡулай: Мәғҙән сельпоһының яңы экономисы унын яҡлы буласаҡ! Һибәтов, әйҙә, Баныубикәне маҡтаһын. Ә Миңзада бынан кире отчеттарын тотҡарлыҡһыҙ үткәрер! Бер атҡанда — ике ҡуян! Баныубикә хәҙер — атылған ҡуян!

...Миңзада ла Баныубикә менән икеһе араһы ғүмерҙә лә яҡынаймаҫын тоя ине. Ул — Баныубикәнең еҙнәһе һөйәркәһе, балаһы шул яғымлы ирҙән. Был кемгәлер сер булһа ла, Ғәтиәттең башына инеп сыҡмаһа ла, бәхтейәрҙәргә яңылыҡ түгел.

## VI

Ҡотлоярҙар тағы Ҡуянсыҡ урамындағы төп йортҡа йыйылды. Биләндән ҙур совхоз директоры Камил Ҡотлояров ҡайтып төштө. Ғәҙәттәгесә, башта Зөлҡәрнәй инеп сыҡты. Ул — иң олоһо, арала башлыҡ кеүегерәк. Тағы өлкәнерәге — тирмәнсе Сабирйән бар ҙа… Хәҙер ситтә, тирмән утарында йәшәй. 1926 йылда, атаһы кәләш йәрәшеп башҡа сығарғас, ғаиләнән айырылды. Ә Зөлҡәрнәй — йөҙөк ҡашы, гел күҙ алдында булды. Мырҙалар ағайҙы күреп, уға оҡшарға тырышып үҫте. Зөлҡәрнәй һуғыштан алда ғына Дыуан техникумын тамамлағайны, шунан егерме йәшендә фронтҡа китте.

Хәмиҙә ҡарсыҡ ул заманды бик яҡшы хәтерләй. Олоһо — Сабирйән эйәрсәне һуғышта ине инде. Ҡотлояр ҡарт Дыуанға барып Зөлҡәрнәй улын фронтҡа үҙе оҙатып ҡайтты.

Ҡарты Дыуанға колхоздың һарыҡ йөнөн тапшырырға йөрөй торғайны. Һирәк-мирәк малайҙары тотҡан балыҡты ла тейәй. Дыуан урыҫтары балыҡ, тип үлә, ә Ҡотлоярҙар үҙҙәре балыҡ яратмаймы?.. Хәмиҙәнең йәне әрней: Камил, Әсләм, Ғәтиәт көноҙоно Әйҙә балыҡ тота, малайҙар һыу буйынан өшөп-туңып ҡайта… Ә ҡарты аяуһыҙ: барлыҡ балыҡты һыпырып, арбаһындағы сапсаҡҡа тултыра ла, өҫтөнә һыу ҡойоп, кесерткән менән баҫтырып, таң һарыһынан Дыуанға юл тота. Балығын баҙарҙа һата, аҡсаһына тауар ала, бер сикүшкә лә эләктерә… Шуны эсеп, юл буйы Мәғҙәнгә йырлап ҡайта. Ҡайһы берҙә үҙе менән Камилды йә Әсләмде ала. Ғәтиәте, бәләкәйерәге, ағайҙары артынан илап ҡала.

Ҡарты иһә был юлы, Зөлҡәрнәйен һуғышҡа оҙатып, Дыуандан үҙе илап ҡайтты. Күҙ төбө шешенгән.

— Ниңә күҙ йәше түгәһең?

— Халыҡ һабантуй кеүек, ҡарсыҡ, унда һинең ҡайғыңмы, командирҙары ҡысҡыра, некруттарҙың туғандары илаша, мин ҡатып тик тор-

ҙом. Шул бала алдында, күңелен шомландырып, нисек илап торайым, юлда әҙерәк булды…

Ҡарты ғәфү үтенгәндәй һөйләнде. Хәмиҙә эстән ҡыуанып торҙо — таш йөрәк была кем? Йәнәһе, Зөлҡәрнәй барыбер үҙ балаһы түгел, ә йәтимгә бер нимә лә булмаҫ. Ошо тойғо уны йыуатты, Зөлҡәрнәй өсөн һис көймәне, һуғыш буйы офицер аттестатына аҡса ашап кинәнделәр. Малайҙарға дан: ағай — офицер, ай һайын аҡсаһы килеп тора. Шуны Шиҙәленән йә Камил, йә Әсләм барып ала. Ағай — батыр, һуғышта йөрөй, өйҙә лә уның тураһында ғына һөйләйҙәр.

Зөлҡәрнәй, һуғыштан ҡайтҡас та, күҙҙән төшмәне. Шиҙәле МТС-ында директор, Мәғҙән райкомы секретары, Мәғҙән колхозы рәйесе… Шулай егерме йыл үтеп тә киткән. Егерме йыл — түрҙә, егерме йыл — халыҡ алдында. Ҡустылары өсөн дә әүәл ағай һүҙе һүҙ ине. Ағай — атай урынында, илдә бер солтан. Бәғзе берәүҙәр шикелле ситтә түрә түгел, ә үҙ ерендә хужа.

Мәғҙән ауыл советы рәйесе Әсләм Ҡотлояров төп йортҡа килеп ингәндә Ғәтиәт ҡустыһы ”туғарылғайны” инде.

— Камил абзый, Зөлҡәрнәй абзыйым һиңә йәтеш урын тапты: Биләндә йәшә, Мәғҙәндән арыраҡ йөрө! Шуға ауылға онотҡанда бер ҡайтаһың.

— Ғәтиәт, кеселәр өлкәндәр ҡылығын хөкөм итмәй. Ағай ни эшләһә лә, дөрөҫ.

— Абзыйымдың политикаһы шулай: бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай, Камил ситтә йөрөһә, миңә ҡамасауламаҫ!

Ҡунаҡ ҡул иҙәй.

— Ул нисек тә һине районға ҡайтармаҫҡа тырышты, Камил уҡыған кеше, миңә ҡамасау була. Хәҙер кинәнһен: үҙе лә осто, артынан берәү ҙә ҡалманы. Кем ғәйепле? Ул! Ул үҙе браттарын тарҡатты!

— Был — үткән эш. Үткән эштән төш яҡшы, тиҙәр.

— Шулай ҙа абзыйым беҙҙе кәкре ҡайынға терәтте. — Ҡусты ағаларына һораулы ҡараш атты.

— Минеңсә, власть алмашыныуында бер абзыйым ғына ғәйепле түгел, бында ниндәйҙер башҡа тенденциялар ҙа бар. — Камил аҡыллы һүҙҙәр һөйләне. Уның тел төбөн аңлап бөтөүе лә мөмкин түгел ине.

— Бында эш тәрәндәрәк ята… — Әсләм дә Камилды яҡлап һүҙ ҡыҫтырҙы.

— Ниндәй эш, ниндәй тенденция? — Ғәтиәт күнмәне. — Нишләп Мәғҙәндә власть ҡотлоярҙар ҡулынан китә, нишләп беҙ, браттар, атай васыятын үтәмәйбеҙ?

— Мин хәҙер ситтәге кешемен. Ситтә — солтан! — тип көлдө Камил.

— Ә Мәғҙән кемдәр ҡулына ҡала?

— Бына Әсләм бар, ул — ауыл советы рәйесе…

— Яҡшы, — тине Ғәтиәт, килешеп. — Әсләм абзыйым әле эшләп йөрөй, ярай, ә Әбхалиҡ бик аҫтыртын әҙәм, хәйләкәр төлкө. Ул абзыйым аҫтынан соҡор ҡаҙымай тиһегеҙме?

Әсләм ҡыҙарынды.

— Әбхалиҡ — мәкерле әҙәм. Ул ҡотлоярҙарҙан үс алыуын дауам итәсәк. Абзый, һиңә абай булырға кәрәк.

Ауыл советы рәйесе, килешеп, баш ҡаҡты. Шунда Хәмиҙә ҡарсыҡ күренде.

— Камил, ҡайҙәле, ашыңды яңыртайым — һыуынғандыр. Ғәтиәтулла, шул саҡлы шауҙамасы — тауыш алыштырмайһың. Абзыйыңдар — юлдан, арығандар, ял итһендәр, баштан-аяҡ үҙең генә таҡылдап тик ултыраһың. Бәләкәс сабыр ит. — Күрәһең, әсә уландарының хәбәрен шаршау артынан тыңлап торған.

— Инәй, абзыйым йылына бер ҡайта — һөйләшеп ултырабыҙ. Эш боҙмайбыҙ ҙа…

— Һөйләшеп кенә ултырабыҙ, инәй, — тине ҡунаҡ та, йылмайып.

Хәмиҙә Камилына һүҙ тейҙерә алмай, бөтә ғәйепте Ғәтиәтенә япһара.

— Бер һүҙем дә юҡ, һөйләшегеҙ, уландар, мәгәр, Ғәтиәтулла, һин әҙерәк кешегә покуй бир. Камил, ятып алмайһыңмы, Әсләмдең дә силсәүиттә эше…

— Инәй, — тине Камил, һәр өнөнә баҫым яһап, — мин туғандарым менән һөйләшеп ултырырға, тип ҡайтҡам…

— Беҙ тәртипле ултырабыҙ! — Ғәтиәт тә хупланы.

— Ярар, ярар, ултырығыҙ! Хәҙер мунса яғам…

— Киленең һыу ташыр! — Был Камилдың һүҙе булды.

Дөрөҫлөк эҙләүсе тағы осоп-ҡунды.

— Шулай ҙа, браттар, әйтегеҙ: ҡотлоярҙарҙың слабосы нимәлә? Ниңә улар аҙым һайын абына, хата яһай?

Ғәтиәттең өнө бер өҙөлөп ҡала, бер ҡабат ялғана.

— Ниңә тигеҙ генә түгел беҙҙең юлыбыҙ — артыҡ ҡыҙыубыҙмы, кем ғәйепле?

— Ҡотлоярҙарҙың серен белеп бөтөп булмай инде ул, энем, — тип көлдө Камил. — Уны ғүмер буйы асаһың, барыбер төбөнә төшә, тоҙ ҡоя алмайһың.

— Әле генә тау үрендә инек: Мәғҙәндә — власть беҙҙең ҡулда, бөтәһе лә беҙгә буйһона! Зөлҡәрнәй абзыйым — колхоз рәйесе, Әсләм абзыйым — ауыл советы башлығы. Беҙ — солтан, бүтәндәр — олтан, Мәғҙән — ҡотлоярҙарҙың аяҡ табаны аҫтында…

— Уйлап ҡараһаң, беҙҙең зат ауылда иң фәҡире булған… — тип һалды кинәт Әсләм.

— Башта!

— Эйе, революцияға тиклем ҡотлоярҙар осон-осҡа ялғап йәшәгән, Игентауҙа таш соҡоған… — тип элеп алды Камил Әсләм һүҙен.

— Шул кәсеп менән ғүмер һөргәндәр, Игентауҙан ҡайтып кермәгәндәр: таш ҡаҙып, шуны ташып, тирә-йүн ауылдарға һатып йәшәгәндәр.

— Ташҡотлоярҙар! — Быны Ғәтиәт әйтте.

Ҡотлояр балалары тағы тарихҡа төшөп китте, үткәндәге данды яңыртты, нәҫел хәтирәһен тергеҙҙе.

— Ҡотлоярҙар бер күтәрелгән, бер түбән тәгәрәгән, — тине Камил, етдиләнеп. — Революциянан һуң ғына ҡарт аяҡҡа баҫа. Нәҡ революция уны кеше итә, ҡулына ниндәйҙер власть та тоттора.

— Әтейем, Австриянан пленден ҡайтҡас, волисполкомда милиционер була, коммуна төҙөп маташа, шунан баҫмасыларға ҡаршы һуғышҡа ебәрәләр. Шунан ҡайтҡас, Ҡуянсыҡ урамында артель төҙөй, волисполком башлығы була.

— Ул хәтәр кеше булған, беҙҙең ише генә түгел… — Ғәтиәт елкенде. — Ғүмер буйы ауылда власты ҡулынан ысҡындырмаған. Үлгәнсе. Ә беҙ? Әтейем үлгәс, ун йыл үтеп өлгөрмәне…

Ҡусты ярһыны, ағайҙар өндәшмәне.

— Эх, ташбаштар беҙ, атай васыятын аяҡ аҫтына һалдыҡ…

— Ғәтиәтулла! — Ҡашығаяҡтан әсәй киҫәтеүе ишетелде.

— Эх, инәй, һин нимә аңлайһың?

— Ыҫта!

— Ғәтиәт… — Камил туғанын тыйҙы. Әсләм ағалары алдында шыртлай: тегеләр үҙен, етте һиңә, тел биҫтәһе, тип киҫәтеп кенә тора. Ә Ғәтиәткә — ярай.

— Инәй, минең шуны белгем килә: ҡотлоярҙар слабосы нимәлә?

— Шунан ни була? — Тағы ҡарсыҡ ҡыҫыла.

— Браттар, мин шуға төшөнә алмайым: ниңә ҡотлоярҙар донъяһы тигеҙ генә бармай, эштәре гел уңып тормай?

— Урталыҡты белмәйҙәр… Йә тау үрендәләр, йә упҡында… — Камил да йөпләне.

— Нимә етмәй уларға?

— Уларға бер стакан етмәй. — Камил көлдө.

— Абзый…

— Бер стакан артыҡ булды, тиң! — Тағы Хәмиҙә ҡарсыҡ. — Йә, ашығыҙ һыуына…

— Көлөгөҙ! — Дөрөҫлөк юллаусы үпкәләне.

— Беҙҙең генә баш етмәҫ был эшкә, — тип һүҙҙе осланы Камил. — Әйҙә, ашайыҡ та, төштән һуң — мунсаға! Әсләм, Баныубикә килен эштәме, балалар?..

Ҡусты шымды, ағайҙар үҙ-ара ғәп ҡорҙо. Тағы аш яңырттылар, ҡайнар сәй килтерҙеләр табынға. Һүҙ ниңәлер үткәндәргә барып төштө тағы. Байҙар, ярлылар хаҡында бәхәс ҡорҙолар, революция, капиталистар тураһында ла һөйләп алдылар. Хәмиҙә ҡарсыҡтан граждандар һуғышы тураһында һораштылар.

— Беҙҙең яҡта ла булған бит ул һуғыш, инәй, һөйләле. Мәғҙәндә һуғыш булдымы? Күрҙеңме?

— Ҡыҙылдар ауылға Дыуан яғынан керҙе, — тип башланы ҡарсыҡ хикәйәтен. — Бурансы яғынан, Ҡаштаҡ буйлап оло яу булып төштөләр. Был мәлдә ауылда аҡтар юҡ ине инде, ҡыҙылдар шуларҙы ҡыуалап бара бит… Аҡтар Мәғҙән халҡына үсле, сөнки уларға икмәк бирмәнеләр. Шуға ашыҡ-бошоҡ сигенгән ғәскәрҙәре, Әйҙе кисеп, Һарыса һыртына, Ҡалатау битләүенә нығынды, ә Төлкөнтау, Нәҙелбилтауында торғандары Мәғҙәнгә төҙәп туптан атты. Ярты ауыл янды. Күльяҡ урамдан егерме туғыҙ йорттан көл-торомбаш өйөмө генә ятып ҡалды, күп кеше ҡырылды… Нәҡ шунан һуң ҡаза күргән халыҡтың күпләп Һатыйға күсенеүе башланды.

Ваҡыт ойоно. Әсләм дә ҡунаҡтарға ял кәрәклеген аңлай, әсәһе лә әйләнгән һайын шуны туҡып тора. Тағы табындан йәһәт кенә тороп, хушлашһаң да, уңайһыҙ. Күргәндәй, күрешкәндәй булһын туғандар, нисә йылға бер осрашалар. Әсләм икеләнде. Хәҙер донъяның йәме ҡайҙа? Әлбиттә, төп йортта. Әсе бал ғына әүрәтмәй күңелен, бөгөн туғандарҙың осрашҡан, табышҡан мәле… Камил ағаһы ла бында, төп йортта — байрам. Ағаһын үҙенә саҡырыр ине лә, бисәһе ни тиер? Оҙаҡлап ултырһа, килешмәй.

## VII

Тәлғәт, Баныубикәнең апаһы Раушанияға өйләнеп, тыуған яғына ҡайтып киткәндә, Миңзада ауырлы ине, йөрәге аҫтында мөхәббәте емешен йөрөттө. Ҡурҡманы ла, әркмәне лә, бер ниндәй ғәйбәткә, ҡырын һүҙгә ҡарамай балаһын табырға булды. Хоҙайҙыҡы шул, яҙғандыр, тине. Илгәҙәк егеткә барып ялбарыу ҙа, сер сисеү ҙә фәтүә бирмәне, йәш кеше үҙ хәсрәте менән япа-яңғыҙы тороп ҡалды.

Мөхәббәт емешен бергә тиргәйнеләр, әсе һутын бер үҙе генә һемерҙе. Үҙенең сәғәте һуғыуын көттө.

...Әле шул мәл етте түгелме? Был юлы инде үҙенекен ҡулынан ысҡындырмаҫ! Бүтән берәүгә лә өлөш ашатмаҫ!

Ҡабат Ғәтиәттең башын әйләндерәсәгенә ышана ине. Армияға китер алдынан да егет артынан ҡалманы. Уны ғына өнәне! Ә Миңзифа — уға һөйөклөһөнөң шәүләһе генә, игеҙәгенең һыңары... Иҫәрләнеп йөрөй егет, уға булған ғишҡынан һаташып бара: игеҙәкте, йәнәһе, һыңарына алмаштыра... Алйотто ваҡытында хаҡ юлға баҫтырырға!

Шуның өсөн ул Мәғҙәнгә ҡайтты. Ситтә эҙләгәне аяҡ аҫтында аунаған!

— Ғәтиәт һине яратмай, игеҙәк, һаташып ҡына йөрөй!..

— Юҡ!

— Һуҡыр, ул һиңә минең игеҙәгем тип кенә ҡарай... Ул Миңзаданы ярата!

— Ә һин уны яратмайһың?

— Я-ра-там!

— Улайһа, быға саҡлы ник ҡайтманың?

— Һеҙҙе көттөм — эшегеҙ уңманы! Килешеүҙе оноттоңмо, кәзә хәтер?

— Юҡ!

— Мин килешеүҙе үтәнем — хәҙер һин...

— Мин риза түгел! Ғәтиәт, туй...

— Бөтәһе лә буш нәжәғәй уйыны! Күн яҙмышыңа!

— Ә һине балаң менән кем ала?

— Ғәтиәт!

— Мин уға саф көйө...

— Һин минең өлөшөмә керҙең, Миңзифа!

— Миңзада апай, мин унһыҙ йәшәй алмайым!

— Ә Ғәтиәт минһеҙ йәшәй алмай!

Күрше бүлмәлә әсә балауыҙ һыҡты, йөрәген усына баҫты, ә Мөхәмәтйән ҡарт ғүмерҙә лә бисәләр эшенә ҡыҫылып йөрөмәй.

Тағы хыялыйҙар иткән айлы төн тыуҙы. Ғәтиәт был юлы ла Әй төбәгенә әйҙәне, Миңзада ҡарышманы. Ул ер сигенә китергә лә риза. Ғәтиәт тә көслө беләкле, киң яурынлы. Ул да яғымлы, йомшаҡ күңелле. Ҡотлоярҙарҙың иң арыу заты. Эйәге урталайға уйылған һымаҡ, күҙҙәре зәп-зәңгәр.

Бисәләр ҙә ирҙәр кеүек. Улар ҙа наҙ танһыҡ итә, уларға ла хәләле, законлыһы кәрәк, улар ҙа һуңғы сиктә һуңғы һалам остоғона тотона. Миңзада иргә тоғро иш булыр. Йомшаҡ һөйләшә, ыҡҡа килеп тора, егет ҡосағына һыйынып-һырлығып бара.

Төбәктә айлы төн ирәйә. Ғәләмәт әкәмәт икән ул ай, көндөҙгөләй күҙҙе ҡамаштыра. Гүйә, илгәҙәк бала — төбәктә һин дә мин йөрөп

ята. Шаян, төн ауышҡас ҡына, ергә төшә... Ҡаҙаяҡ үләндәр гөлтләп тоҡанған, һуҡмаҡтар ҙа ялтлап ята. Төбәк иңе хас даръя бите: эреле-ваҡлы түңгәктәр бер ҡалҡына, бер төшә. Яй ғына атлаған ыңғайға шул түңгәктәр бәүелгән-тулҡынланған һымаҡ. Ә хыялыйҙар әҫәрләнгән. Уларға был даръяның иге лә, сиге лә юҡ! Ваҡыт ағышын оноттолар, маяҡтарынан яҙҙылар. Төн менән көн алмашынды. Сабый ай артынан эйәргән. Был әкиәт иленә ҡайҙан, баштары етеп, килеп сыҡтылар?

— Ғәтиәт, һин мине ҡарғайһыңмы?

— Миңзада...

— Һин мине ике араға төшөүсе тиһеңме?

— Миңзифа үҙе минән баш тартты...

— Ә-ә... — Миңзада телен тешләне.

— Армияға саҡлы уҡ һинең менән дуҫлаштым... Хатта... — Егет тынын тотто. — ...Уны ҡосаҡлағанда ла һине ҡосаҡлайым тип һанды-райым...

— Ғәтиәт...

— Ысын! Ул, ә һин ҡаршымдаһың...

— Ғәтиәт, һин мине аптыраттың бит — быңдайҙы ишеткәнем дә юҡ...

— Һеҙ игеҙәктәр бит... Һеҙ, беләһеңме, бер үк!

— Шулаймы? Мин уҫал бит, Ғәтиәт, ә Миңзифа — мәмәй. Ул минән аҡыллыраҡ!

— Һин барыбер һин инде.

Миңзада баҫылманы, Ғәтиәт кисерештәрен, уйындағыһын әйтеп бирә алманы.

— Ғәтиәт, мин бүтән һине юғалтырға теләмәйем. — Һулышы өҙөлдө. — Дөрөҫөн әйткәндә, бөтәһе өсөн үҙем ғәйепле. Мин һине алданым — сәбәбен һөйләйемме?

— Бүтән ваҡыт...

— Ғәфү ит, Ғәтиәт!

— Әйҙә, бүтән был хаҡта һөйләшмәйек!

Ғәтиәт шымды. Миңзадаға әле шуныһы ла етте. Ул әле үк күбенә өмөт итмәй. Кем хыянатсыға бәйләнә? Мәғҙәндә тағын шундай берәү бармы? Муйынына аҫылыныусы балалы бисәне кем хуплай? Кешеләр әүәл-әүәлдән Миңзада ишеләрҙе ғәфү итмәгән... Ғәтиәттең туғандары ла Миңзаданы үҙҙәренә яҡын йоғондормаясаҡ! Ғүмерҙә лә балалы ҡатынды ҡабул итмәҫтәр!

Был сихри төбәктә мөғжизәләр, серҙәр бихисаптыр әле, асылып та бөтмәгәндер... Ошо мәл өҙөлмәһә, берәйһе ошо әкиәт илен туҙҙырмаһа ине. Әй төбәгендә әкиәт менән ысынбарлыҡ ҡауышҡан, даръя уртаһын-да — ана, хыялыйҙар... Етәкләшеп алғандар. Хәсрәт-хәстәрҙәре онотолған, йөрәктәре елкенгән, ерҙәге мөғжизәгә улар ҙа ышана, буғай.

## VIII

Нәкиә бухгалтерияға отчет тапшырырға инһә лә, бүтән йомошо төшһә лә, тура әхирәте янына үтә. Аралары бик тә яҡынайҙы, былар бер-береһенә ныҡ эҫенеште. Эс серҙәре бөтмәй, һүҙе табылып тора.

— Ике яҡ та олонан ҡупҡан... Һинекеләр ҙә шәбәйгән...

— И, апай, ҡарт менән ҡарсыҡ һаташҡан...

— Шулай иманын уҡыттым мин Ғәтиәт балдыҙҙың!

— Рәхмәт, апай.
— Ярай, Миңзадаҡай, күрерһең: Ғәтиәт һинеке булыр…
Бушҡа ялланған пүнәтәйҙең дә баҙары ҡапыл күтәрелеп, экономист алдында дәрәжәһе уғата үҫеп китте түгелме?
— Бер һүҙҙән булайыҡ! — Хәйләкәр ялт-йолт ҡаранды. — Бер төптән торайыҡ!
— Нәкиә апай…
— Киләсәктә килендәштәр булырға яҙһын! Дошмандарға — анау Баныубикәләргә бирешмәйек! Эштә лә бер-беребеҙгә ярҙам итешеп йәшәйек!
Нәкиә менән Миңзада бик тә яҡын әхирәттәргә әүерелде, эс серҙәре уртаҡ булды. Күрешһәләр, хәбәрҙәре бөтмәй; бер-береһенә кереп баралар, бер-береһен ярты һүҙҙән аңлайҙар.

— Ғәтиәт, ғәйебем ҙур, аңлайым. — Бисара тағы йәшенә төйөлдө. — Шулай ҙа килдем, теләһәң нишләт! Мин — табаның аҫтында, теләһәң, типкелә, теләһәң… Һине генә үҙ итәм. Оҙаҡ йылдар ауылға ҡайтмауымдың сәбәбе лә һинең күҙеңә күренә алмай йөрөүҙән… Ситкә типһәң дә, хоҡуғың бар…
— Миңзада, тыныслан! Зинһар, үҙеңде яҙалама!
— Нисек? Түҙер хәлем ҡалманы, Ғәтиәт, минең яҙмышым хәл ителә! Был уйын түгел… Әллә һинең һөйләшкең дә килмәйме? — Сая яҫҡынып ҡараны. Хәҙер ҡыйғыр инә ҡош атаһының күҙен соҡоп ала.
— Миңзада, минең дә яҙмышым хәл ителә. Тик мин һине бик-бик оҙаҡ көттөм, тәҡәтем ҡороно. Ауыҙым, инәйем әйтмешләй, күп беште, хәҙер һыуыҡ сәйҙе лә өрөп ҡабырға мәжбүрмен. Дөрөҫөн әйткәндә, мин…
— Әйт! — Хакимәнең бойороусан тауышы тынлыҡты яңғыратты.
— Дөрөҫөн әйткәндә, Миңзада, һин мине тағы төпһөҙ кәмәгә ултыртмаҫһың микән?
— Ғәтиәт, асыҡ булыуың өсөн рәхмәт. Ышанып бөтмәүең дә хаҡ. Бер алдаған кеше тағы алдай, тип тә әйтәләр. Шулай ҙа бел: ауылға һине уйлап ҡына ҡайттым, йәшермәйем, һиңә иҫәп тоттом. Йәшлек йылдарын, ҡайнар хистәребеҙҙе бер ҡасан да онотманым, шунан көс алып йәшәнем. Ышан: бынан кире мин һине генә… Һөйләйемме? Үткәндә әйткәйнем дә…
— Үҙең ҡара. — Егет ҡашын төйҙө.
— Һөйләйем. Барыбер йөрәктә таш булып торасаҡ… Һин армияға китерҙән алда әле ул. Миңзифа ҡайта ла ҡайғыһын һөйләй: ”Сәйфи мәүеш, туңбаш быҙау, яратмайым; ә һинең Ғәтиәтең…” Йәнемә тейә, минән һинең хаҡта, осрашыуыбыҙ хаҡында һораша. Үҙе осрашыуҙан ҡайтҡан! Уға беҙҙекенең ни ҡыҙығы барҙыр? Таңғаса төпсөнә… Хатта нисек ҡосаҡлауың, үбеүеңде белешә. Һине әллә кем күрә, ә ишен әҙәмгә лә һанамай; һин сибәр ҙә, һин — ҡарағай… Оҙон сәстәрең, һалыңҡы ирендәрең… Аптыратты, ике һүҙенең береһе — һин, теленән төшөрмәй. Ахыр аңғарҙым: ул һиңә ғашиҡ! Һинең хаҡта ғына уйлай. Шулай итеп игеҙәгем көндәшемә әүерелде, хәҙер ул мине эҙәрлекләне, һәр аҙымымды күҙәтте. Юҡ, ул һине аңдыны, һине күҙәтте, һәр өнөң, ҡылығыңды танһыҡ итте. Бер тоттом да һораным.
— Игеҙәк, әллә Ғәтиәткә ғашиҡ булдыңмы?
— Нейә?

— Әйт!
Игеҙәгем башын һәлендерә.
Сәсрәп киттем.
— Һин, игеҙәк, миңә хыянат иттең!
— Апай, ниндәй хыянат, ти…
— Был… Һин көн дә Ғәтиәт хаҡында… көн дә минең ҡанымда уйнайһың, арттан шымсылыҡ итәһең! Әйҙә, арттан эйәреп йөрө, беҙҙең свиданиеға ла бар! Ғәтиәт икебеҙҙе лә бисәһе итһен!
— Апай…
— Апай, имеш! Кеше өлөшөнә яҫҡына!
Был яза өс көн, өс төн дауам итә.
— Сәйфетдин көн дә ҡапҡа төбөндә…
— Яратмайым! Аңла, апай…
— Нимә?
— Һин табырһың, һин үткер… Әйҙә, уны миңә бир!
— Уф, аллаҡайым! Һин иблистер ул! Нисек телең әйләнә?
— Апай, һин шәп… Сиб-бәр…
Бисара ысын ялуара. Шунда тәндәрем семерҙәп китә. Беҙ татыу булдыҡ, Миңзифа мине ”апай” тип кенә торҙо… Хәҙер килеп… Инәйем әйберҙе бер иштән текте, бер төрлө ризыҡ ейҙерҙе, бер төрлө эш эшләтте.
— Апай! — Тегенең күҙҙәрендә ят уттар баҙлап китте. Был хәҙер көнсөллөгөнән шартлай, тим; шунда хатта туғаным хаҡына өлөшөмдән дә ваз кисер сиккә еттем.
— Ярай, — тинем, — игеҙәк, саҡ ҡына сабырлыҡ ҡылайыҡ, һин аҡыллы ҡыҙ бит. Мин дә әле үк Ғәтиәткә сығырға йыйынмайым — алда уның армия хеҙмәте тора. Һуңынан күҙ күрер, донъя үҙ урынына ултырыр.
Өндәшмәй.
— Ғәтиәт, армиянан ҡайтҡас, һиңә ҡараһа, һинеке…
Өндәшмәү — ризалыҡ билгеһе.
— Армиянан ҡайтҡас, әүрәтеп ҡара, мин ҡыҫылмайым… Әйҙә, Ғәтиәт үҙе хәл итһен!
— …Ах, һеҙ мине шулай кәрткә һалдығыҙмы? — Егет асырғанып көлдө.
— Юҡ, беҙ игеҙәгем менән шыбаға тотоштоҡ ул саҡта…
— Ә һин?..
Миңзада тотлоҡто:
— Мин ни… Мин ни ул саҡта үҙемә бик ныҡ ышана инем. Үҙемдең көсөмә лә, һинең тоғролоғоңа ла ышандым!
— Ә үҙеңдең тоғролоғоңа?..
— Үҙемдең тоғролоғома ла ышанам. Бер ни хаҡында ла, һинән башҡа бер кем тураһында ла уйламайым. Ә тормош беҙ уйлағандан күпкә ҡатмарлыраҡ булып сыҡты, күрәһең, мин дә үҙемә артыҡ ышанғанмын, самаларҙы онотҡанмын… Имеш, берәү игеҙәген дә бәхетле итә, уға үҙенең өлөшөн бүләк итә — хәҙер шунан ни килеп сыҡты?
Ғәтиәт, мин барыбер күңелемдән һинән биҙмәнем бит, барыбер йөрәгемдә һин генә булдың… Игеҙәгемә һатһам ни, туғанлыҡ хаҡына ғына, игеҙәгемде аяп, уның инәлеүҙәренә әүрәп!.. Кисер мине! Мин

барыбер, Миңзифа менән шундай мәғәнәһеҙ килешеү төҙөгәс тә, күңелемдән һиңә хыянат итмәнем. Күҙем йомһам, һин — ҡаршымда… Арала игеҙәгем тора, беҙҙе айырырға маташа.

— Ғәтиәт барыбер мине ярата! — Үҙ алдыма тәүбәләр итәм, шуны күңелемдән булһа ла һеңлемә һеңдерергә итәм, ә һине минең шәүләм итеп кенә күрә…

— Күрһен!

— Иҫәр! Һин, байғош, шул өлөшөңә лә ризамы?

Теге баш ҡаға.

— Туғаным, тим, һуңғы ҡат үтенәм: баш тарт был ахмаҡ уйыңдан! Былай ҙа башың-тояғың менән гонаһҡа баттың: апайың хәләленә орондоң, унан хәтәр вәғәҙә тартып алдың… Был иблис ҡотҡоһо, оло гонаһ таһа!

— Юҡ, апай, мин үлеп яратам! — Миңзифа һалам осона йәбеште.

— Ә мин?

— Һиңә ир кәрәк (эйе, шулай ти). Һин унан биҙерһең…

— Иблис һин, иблис! Көфөр һүҙ һөйләйһең, игеҙәк!

— …Ғәтиәт, мин һиңә барыһын да һөйләнем, ә… Шиҙәлеләгене…

— Миңзада!

— Кәрәкмәйме? Саҡ ҡына… Ул бүлмәнең дә шаршауын тарта бireп ҡуяйыҡ… Эйе, мин игеҙәгемә биргән һүҙемде боҙманым — килешеүҙе үтәнем һәм… яндым! Мин, һин армиянан ҡайтҡас та, һеңлемә вәғәҙәмә тоғро булып, Мәғҙәнгә ҡайтманым, һинең менән осрашманым — игеҙәгем иркенә ҡуйҙым. Ә үҙем… Һеңлем хаҡына һинән баш тартҡас, әүрәп ҡараным һәм… алдандым! Ул кеше мине тиңһенмәне, балаһы — ҡулымда. Уйындан — киммаҡ. Ары һөйләйемме?

— Ә?..

— Шиҙәлеләге тормошом тураһында…

— Етте!

Шунда төбәк тә, төбәктәге ай ҙа, үлән ҡыяҡтары ла еңел һулағандай итте; гүйә, улар ҙа тын да алмай йәш ҡатындың хикәйәһен тыңланы.

— Мин һиңә барыһын да һөйләнем, Ғәтиәт, ары үҙең хәл ит. Хәҙер яҙмышым һинең ҡулыңда.

— Миңзада… — Ғәтиәттең дә тауышы ҡалтыранды. — Һин минең уйымды, йөрәгемде беләһең. Ул бынан ун йыл элек тә шулай ине, хәҙер ҙә шул уҡ: мин һин тип йән аттым, күңелемдә һин генә… Армияла ла, ҡайтҡас та, көттөм. Был йылдар буйы мин һин тип…

— Рәхмәт.

Ирендәр бергә ҡушылды, һулыштар өҙөлдө. Инде ярһыуҙар баҫылғандай, ыҙалар юйылғандай итте. Ике яралы йөрәк бер иштән типте, ишкә ҡуш булып, ваҡыт арауығын ары һанарға тотондо… Шулай бергә еңелерәк, тынысыраҡ, хәүефһеҙерәк кеүек ине. Шулай мәңге айырылышмаҫ, бер-береһенән яҙмаҫ һымаҡ тойолдо улар. Ишкә ҡуш булып төбәк ысығын кисте ғашиҡтар, бер-береһенән һис айырыла алманылар был кистә. Ай һаман шул йәшел даръя уртаһынан йөҙҙө, алтын нурҙарын йәлләмәйенсә ҡойҙо ҡыяҡтар өҫтөнә. Тирә-йүн хәс тә көндөҙгөсә балҡый, һуҡмаҡтар ялтырай.

Әй төбәге — ғашиҡтар биләмәһе. Йәнәштә оло йылға алҡына, бәхетләләр, эйе, уның һулышын, һалҡынса тынын тоялар. Улар өсөн был әкиәт һис осланмаҫ, был илаһи мәл ғүмерҙә өҙөлмәҫ төҫлө. Хыялдары

менән ысынбарлыҡ бергә ҡатышҡан, булмыш менән әкиәт айырып алғыһыҙ... Ғүмерҙәре буйы ошолай дауам итер кеүек; ары тормошта һис бер үҙгәреш булмаç, ошолай тигеҙ ағылыр донъялар. Ошо сихри кис һуҙылыр ҙа һуҙылыр, әкиәт иле һис ҡасан да емерелмәç. Мөғжизәләр айырылмаç юлдаштары булыр, һис ташлап, юлдарын аймылыштырып китмәç. Әй төбәгендәге ул әкиәт һуҙыла ла һуҙыла. Һәр хәлдә таң атҡансы өҙөлмәç әле, юлы киçелмәç... Был айлы төн аяҙ көндәреңә биргеһеҙ бит. Кешеләр ҙә мөғжизәгә ышанып, яҡтыға табынып йәшәһен ине. Хаслыҡ, өмөтһөҙлөк, мөхәббәттән ситкә тайшаныу был илдән өркөп ҡасһын.

## ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

### I

Мәргәнгә тағы Камил ҡайтып төштө. Ҡотлоярҙар, ғәҙәтенсә, түп йортҡа тартылды. Башта Зөлҡәрнәй хәл белеште. Кәйефе хөрт ине, оҙаҡ ултырманы.

Ҡашығаяҡта ҡәйнә менән килен сөкөрҙәште.

— Эй, Рәйсә килен, ир кешегә яңғыҙ килешмәй. Яңғыҙ ир — ишкәкһеҙ кәмә! Киленем булһа, өйөбөҙ яҡты, түшәмебеҙ бейегерәк, иҙәнебеҙ ялтырыраҡ булыр ине... Тәҙрәләребеҙ ҙә көлөп торор ине.

— Былай ҙа...

— Нәҡиә киленде лә әйтер инем... Шул ҡыçылды!

— Яҙмағандыр...

— Кеше яҙмышы менән уйнай, икәү араһына керә.

— Ҡәйнәм, мир бөтмәһә, ҡыҙ бөтмәç — табырбыҙ!

— Килен, әллә берәй уйың бармы? Димләргә кешең, тим дә? Биләндә? — Ҡарсыҡ тағы өҙә һуға: — Ярар, үҙебеҙҙең Өлкөндөнән ҡарарбыҙ.

Шунда ишек асылды, Әсләмдең башы күренде.

— Абзый! — Ғәтиәт ҡыуанды. Ниһайәт, ҡотлоярҙар ҡоро түңәрәкләнде.

Камил Әсләмде өнәп тә бөтмәй. Эсеп алһа, Әсләм күп һөйләй, тауыш алыштырмай... Ғәтиәт яндырай, Зөлҡәрнәй эре, Камил үҙе йомоҡ, ә Әсләм тел биçтәһе... Бер үк хәбәрҙе ҡат-ҡат сурыта, кешене ялҡыта. Ваҡытында тыйып ҡуймаһаң...

Камил буш хәбәрҙе лә, буш кешене лә йәне һөймәй. Ялҡау ғына күп һөйләй, хәбәре менән алдай, эште һүҙ менән алмаштыра. Ул кешегә ышаныуы, таяныуы ҡыйын.

— Камил абзыйым мунсала.

”Уныһы ла уңай”, — тип уйланы Әсләм эсенән.

— Ғәтиәт, тыңла... — Сер, тоҡтағы беҙ ише, эсен тишеп бара.

— Туҡта, абзый, башта берҙе түңкәр, шунан ”тыңла” булыр!

— Ғәтиәт, беләһеңме, уның улы кемдән?

— Белмәйем, абзый, и белергә лә теләмәйем! Мин...

— Тыңлап бөт! Балаһы минең родной бажа Тәл-ғәт-тән!

— Кемдән?!

— Баныубикә еңгәндең бер туған апаһы Раушаниямы? Шунын ире — Тәлғәт! Шул Тәлғәт Миңзаданың элекке һөйәркәһе була, Миңзаданың балаһы шул Тәлғәттән!

Әсләм тантана итте. Шул яңылығы менән батырайҙы, мырҙаһынан юғарыраҡ күтәрелде.

— Тәлғәт, Тәл-ғәт... — тип бер үк һүҙҙе ҡабатлауын белде Ғәтиәт.

Шунда Камил да ҡайтты, туғанының ыңғырашыуын ул да ишетте.

— Кем тиһең, Ғәтиәт?

— Абзый, һаумы! Һин уны белмәйһең. — Ҡустыһы өсөн Әсләм яуапланы.

Ғәтиәт, Әсләм ағаһына күҙ ҡыҫты ла, "мин — мунсаға", тип сығып китте.

Камил, икәүҙән-икәү ҡалғас, өҙмәне лә ҡуйманы:

— Кем тураһында һөйләнегеҙ ул, Әсләм?

— Ә, шунда берәү... — Ир кеше, үҙ-ара серҙе сисмәҫкә була, ҡойроҡто һыртҡа һалды.

— Ҡолағым яңылыш ишеттеме, тип кенә һорауым — һеҙ Тәлғәт тураһында һөйләштегеҙ түгелме?

— Эйе, минең бажа тураһында...

— Да, Тәлғәт хәҙер һинең бажаң бит әле, ә заманында... — Ҡунаҡ хәтирәләргә тарыны. — Заманында беҙ дуҫтар инек...

— Тәлғәт бажа менәнме?

— Һин "белмәйһең" тиһең... Тәлғәтте? Как белмәй? Дуҫтар инек, бергә һунарға йөрөнөк! Һибәтов, ул, мин! — Камил тантана итте. — Ул да хәҙер шәбәйҙе, шул белем менән юғарыраҡ күтәрелде, ә Әсләм уның һайын сүгә барҙы. Әсләм шымды, бер Камил һөйләне.

— Сельхоздың зоотехния факультетына инеп, бер йылдан ташлап ҡайттым да. Бер ҡыш ауылда ҡышланым, Һибәтов менән һунарға йөрөнөк. Ҡуянға. Йәш саҡтар, шәп саҡтар — диңгеҙ тубыҡтан... — Камил ирәйҙе. — Көндәр буйы аръяҡтан ҡайтмайбыҙ. Тәхиәт һаҙында, Оҙонталда йөрөйбөҙ, Сүптекүлдә өйрәк атабыҙ... Ҡырпаҡ ҡар яуғас, ҡуянға, төлкөгә һунар башлана...

Хәмиҙә ҡарсыҡ улының һәр өнөн ота, бер үтенесен дә кире ҡаҡмай. Камил — ҙур кеше, алыҫтан ҡайтҡан. Алыҫтағы ҡояш нығыраҡ яҡтырта шул. Әле лә, бар эшен ташлап, ҡолағын ҡарпайтты.

— Кемде һөйләйһең, Камил?

— Һибәтов менән һунарға йөрөгән ҡышты әйтәм дә... Ҡуян ата торғайныҡ.

— Һибәтов менән дуҫ инегеҙ шул. — Ҡарсыҡ улын йөпләне. — Уның ни сельпо башлығы булып башлаған ғына сағы...

— Арҡаға патронташ аҫабыҙ ҙа таң һарыһынан сығып китәбеҙ.

— Һибәтов килеп тәҙрә сиртә, һине шунан һуң ғына уятам...

— Һибәтовтың Шиҙәлелә шәп танышы бар икән. Райпола ревизор. Шул — Тәлғәт. Беҙҙең сельпоға ла ревизияға килә — Һибәтов менән дуҫлашып бөткәндәр. Тәлғәт ревизор, суҡынғыр, шәп ата! Миңә лә, Һибәтовҡа ҡарағанда ла мәргәнерәк. Өйрәкте сәпәй генә — беләм Тәлғәтте, как белмәй! Шул ҡыш уның менән дә ныҡ дуҫлашҡайныҡ. Аҙаҡ ишетәм, Әсләм энекәш, шул Тәлғәт дуҫ һинең бажаң булып киткән икән — Баныубикә килендең уҡытыусы апаһына өйләнгән! Күптән күрешкән юҡ.

Камил шауланы, ниһайәт, йомоҡтоң да теле сиселде. Хәҙер ул һөйләнсеккә әүерелгәс, Әсләмдең ауыҙы йомолдо.

— Как хәтерләмәй — хәтерләйем Тәлғәт дуҫты… Ул Тәлғәт менән ни булған?

— Былай ғына… — тине Әсләм. — Һибәтов та һорашып торғайны.

— Улар Тәлғәт менән ныҡ дуҫтар ине. Ҡыҙҙар артынан да йүгерҙеләр, мәгәр Раушания ҡоҙаса артынан барғанын хәтерләмәйем. Бына, хет үлтер!

...Котлояр балаларының ҡоро һүрелде. Тәмәке көйрәтеп инделәр. Төртһәң — күҙ, һөйләһәң — һүҙ тигәндәй, хәбәр гел шул бер тирәләрәк өйөрөлдө.

Рәйсә еңгә лә һүҙгә ҡушылды:

— Ғәтиәт, ҡәйнеш, өйлән, шул Миңзифанан башҡа ҡыҙ бөткәнме? Бел: ҡыҙҙар бөтәһе лә бер иштән ул, бер ниндәй айырмаһы ла юҡ. Бары шуныһы, халыҡ әйтмешләй: урау булһа ла, юл яҡшы, һуҡыр булһа ла, ҡыҙ яҡшы. Ҡыҙ бала балауыҙ һымаҡ, ҡалай кәрәк, уны шулай йәмшәйтеп-яһап алаһың; ә ир күргән ҡатын — яуыз, үтеп сыҡҡан була. Күҙе сығып бара, алдан һикереп төшә. Уны, бөгәм тиһәң дә, бөгөлмәй, көсәнһәң — һына.

Күрәһең, ҡәйнә менән килен араһында ла балалы ҡатын Миңзада тураһында һүҙ булған. Ҡәйнә серен йәшерә алмаған. Сер бит ул… Бисәләр йыйылһа, ниндәй серең дә сер көйө һаҡланмай. Шпион сыҡмай бисәләрҙән.

— Өлкөндөлә күҙ төбәгән кешеләрем бар барын… Ошо арала Фатима апайым да килергә тейеш…

Ҡарт егетте оҙаҡ өгөтләнеләр. Рәйсә еңгәһе хатта: ”Икенсе килеүемә штуб килендәшем булһын йә Мәғҙәнгә икенсе туйға, тип кенә юл төшәм!” — тип ебәрҙе.

## II

Хәмиҙәнең ”Өлкөндөлә күҙ төбәгән кешеләре” элекке күршеләре ине. Тәүфиҡлы, иплe заттар. Фатима апаһы белешер, эште ҡыҫҡа тотор, тимерҙе ҡыҙыуында һуғыр. Өлкөндө — ҡотлоярҙар эйәләшеп алған ауыл ул. Ҡотлояр ҡарт үҙе лә шунан бисә йәрәште, Әсләменең дә тәүге ҡатыны Өлкөндөнән ине. Ҡотлоярҙар бәхете — Өлкөндөлә, шунда йәбешеп яталар, Хәмиҙәнең ҡул арты еңел булды…

Камилы — Хәмиҙәнең тәүге мөхәббәт емеше, ә Ғәтиәте — ғүмере ахырына яҙған өлөшө. Хәҙер ҡарсыҡ йомшаҡ яғына — Ғәтиәте тарафына ятырға мәжбүр. Яҡшымы-яманмы, иплеме-ипһеҙме, икеһенә бергә ғүмер һөрөргә, бер ҡыйыҡ аҫтында усаҡ дөрләтергә! Хоҙай ирке шулдыр, Ғәтиәте ҡарай уны, ҡарсыҡ Ғәтиәттең хәләле — буласаҡ килене ҡулына ҡаласаҡ. Шул килен ҡулында — яҙмышы! Шуға Хәмиҙә ҡарсыҡ та киленде (донъяһының буласаҡ хужабикәһен) үҙе һайлап алырға тейеш!

***

Итек үксәһендәге Тишек салбар осаһындағы Йыртыҡтан эй көлә икән.

— Йыртыҡ, Йыртыҡ, осаң ап-асыҡ! Кеше күрә, мәсхәрә!

— Ярай, Тишек, һин дә минән уҙмағанһың… — тип сер бирмәҫкә тырыша, ти Йыртыҡ.

Бер заман, Йыртыҡтың юрауы юш килеп, итек тә туҙған, Тишек, ҙурайып, Йыртыҡҡа әүерелгән, ти. Ә хужа шунан нишләргә мәжбүр булған?

***

Ғәтиәттең дә башы буталды. Был көндәрҙә клубҡа ла сыҡмай, үҙен томанда аҙашып йөрөгәндәй хис итә. Бигерәк тә Әсләм ағаһының хәбәре аптыратты. Әкәмәт: Миңзада, уның һөйөклөһө — ағаһының бажаһы һөйәркәһе икән! Балаһы ла — шунан! Башы тубал булды. Хәтәр. Бының булыуы мөмкин түгел, юҡ, юҡ — Миңзада шул кеше менән буталмаҫ, Әсләм ағаһы яңылышалыр… Ҡаңғырҙы. Ҡаршылыҡлы уйҙар йәнен талай, йөрәген өҙгөсләй. Был хәл ысын булһа, көлкөгә ҡала. Миңзада менән Баныубикә еңгәһе килендәш булып китәсәк, ә Баныубикә еңгәһенең апаһы Раушания — шул Тәлғәттең бисәһе! Миңзаданың һөйәркәһе булған шул Тәлғәт — Баныубикә еңгәнең еҙнәһе! Тәлғәт менән Әсләм — бажалар, Тәлғәт менән Ғәтиәт тә бажалар булып сығамы? Ағаһының бажаһы — уға бажа!

Ғәтиәт үҙенә урын тапманы. Ул быны кисермәҫ, был хурлыҡты күтәрмәҫ! Аралары яҡынайҙы тигәндә… Ғәтиәт — Тәлғәт — Әсләм — бажалар, ә Миңзада Баныубикә килендәшенең апаһы Раушания менән көндәштәр булып сығамы?

Клубҡа ла йөрөмәй башланы. Кешеләргә күтәрелеп ҡарай алмай. Донъяһы — зил-зәлә… Ҡотлоярҙарҙың бәләһе нимәлә? Нимә уларҙы аяҡтан йыға? Нишләп улар тигеҙ ерҙә һөрлөгә?

Ғәтиәт әүәл Мәғҙәндәге властан яҙыу хаҡында баш ватты. Ҡайҙа яҙа баҫты ҡотлоярҙар, ниндәй тәңгәлдә хата ебәрҙеләр? Был һорауҙар тик ағайҙарға ғына төбәлә, ә ҡусты үҙе улар өсөн яуап тотмай, йәнәһе… Ҡотлоярҙар аҙым һайын абына, хаталар хаттиндан ашты. Мәғҙәндә власты ла ҡулдан ысҡындырҙылар, атай васыятына тоғро була алманылар. Ғәтиәт тә боронғо данды ҡайтарманы, өмөттө аҡламаны түгелме? Ғәтиәт ҡотлоярҙар нәҫеленә икенсе яҡтан ҡара яҡты.

Ҡотлоярҙар ҡасан да бер һынын турайтырмы, донъяға тура ҡарап, ил, ғәләм алдында, ниһайәт, үҙҙәрен танытырмы, Мәғҙәндәге хоҡуҡтарын тағы бер ҡат иҫбатлармы? Ағайҙар, ярай, ил йомошо менән йөрөгән, шул юлда һөрлөккән (мейес башында ятҡан ғына абынмай), ә Ғәтиәт — бисә ҡоло, ике ҡайын, бер ҡарағай араһында аҙашты. Ағайҙар — политик, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ә ул үҙенең шәхси тормошон да яйға һала алмай. Бөркөт һауала үлә, ирҙәр яуҙа баш һала, ә ул — бисәләр итәге аҫтында…

Ағайҙар аптырап тормаған — тотҡан да өйләнгән, берәһен алған, икенсеһен айырған. Ҡотлояр ҡарттың ғына нисә бисәһе булған? Мәғҙәндә ғаиләһе, Австрияла бай усадьбаһы! Ағайҙар илап тормаған, күҙ йәше түкмәгән, берәүгә кәңәш һорап бармаған — улар тормош ҡора белгән. Ә ғаилә ҡороу, кем әйтмешләй, дәүләт ҡороуға бәрәбәр бит. Дәүләтте халыҡ ҡора, ә ғаиләне — берәү үҙе… ”Беҙ, ҡотлоярҙар, үҙебеҙҙең Мәғҙән дәүләтен ҡорҙоҡ!”, тип уйынлы-ысынлы ҡабатлай торғайны атай ҡарт. Хаҡ һүҙ һөйләгән. Төптән уйлап әйткән. Ул — шул дәүләттең нигеҙ ташын һалыусы!

Ҡотлояр ҡарт, ана, ниндәй дәүләт ҡора, Зөлҡәрнәй ағаһы, Әсләм ағаһы донъяһы… Нәҡиә еңгә, Баныубикә еңгә. Ут баҫтыра, кәрәкһә,

ул еңгәләр! Ҡотлоярҙар тоҡомо ишәйә... Билләһи, ҡарт, күрһә, һөйөнөр ине, ”минең инә арыҫландарым”, тип тапап һөйөр ине килендәре арҡаһын. Ә Ғәтиәт улы — уңмаған...

— Улым, яуап таптыңмы: ҡотлоярҙарҙың бәләһе нимәлә? — Мөғжизә булып, әгәр атай уғланына үҙе әйләндереп бирһә шул хәтәр һорауҙы?

Баҫымсаҡ Хәмиҙә сатната әйтте:

— Етте, Өлкөндөнән деүләтеп килен килтерәбеҙ ҙә төшөрәбеҙ! Атайың да, Әсләм ағайың да шулай иткән...

— Ул заманда...

— Үткән заман, улым, яңынан әйләнеп ҡайтҡан заман!

Ҡаты торҙо бынан кире ҡарсыҡ. Өҙөп әйтте, телеп кенә һалды, Ғәтиәттең бөтә икеләнеүҙәрен тиреһе-ние менән һыҙырып ташланы. Томан таралды, көн асылды, күк бите ап-аяҙ булып ҡалды. Етте, Ғәтиәт өйләнә! Рәйсә еңгәһе әйтмешләй, һуҡыр булһа ла, ҡыҙ яҡшы! Ғәтиәт хәл итте, икеләнеү һаҙлығынан ҡотолдо: ул Өлкөндө ҡыҙына өйләнә! Әсәһенең элекке күршеләре менән туғанлашалар!

Ғәтиәт Миңзада тураһында уйламаҫҡа тырышты. Миңзаданы шулай юҡ итте, юҡҡа сығарҙы! Бынан кире ул — Өлкөндө кейәүе! Йәп-йәш ҡыҙ менән ҡушыла, өп-өр яңы кешеләр менән ҡатыша. Сатан йортона ҡабат ҡыҙ һорап бара алмай бит ул, бара алмай. Сатандың уға тиң бүтән ҡыҙы ла юҡ. Хәл ителде! Ай, ҡайһылай ауыр яҙмыштарҙы хәл итеүе, тауарҙы бесеү генәме... Ете юл сатында торғанда... Әгәр яҙа баҫһаң, әгәр аҙаҡ үкенергә тура килһә? Ғәтиәт һарыға һабышмаҫмы?

Еңел түгел яҙмыштарҙы һайлауы. Кеше тормош юлдашын мәңгегә һайлай, шул уҡ тормош юлын, йәшәү рәүешен һайлай. Кәләш һайлауҙы ла кешеләр борон-борондан яҙмыш һайлауға тиңләгән... Данға ирешергә, дәрәжәләр яуларға, хатта байырға мөмкин, хатта хаким булырһың, әммә бәхетең булмаҫ, йәнәшеңдә йән киҫәгең тормаҫ.

Кәләш — бәхет, имеш, кеше бәхете кәләшендә икән. Ҡыҙыҡмы? Өйләнеү — кеше тормошондағы иң мөһим ҡылыҡ, ғаилә кешенең эшенән дә, йәмәғәт алдындағы абруйы, дәрәжәһе, бүтән бурыстарынан да өҫтөн торған ғәмәле икән. Һөйгән йәрең менән ҡауышыу — кешенең бөтә тормошондағы иң оло еңеүе, имеш. Хатта дан-мәртәбәләргә ирешмәһәң дә, нам, нан йыйып, сереп байымаһаң да, затлы ниғмәттәр ейеп, олуғ дәрәжәләргә өлгәшмәһәң дә, аҙаҡ, бәндә, йәнең тыныс булыр, эргәңдә йән һөйгәнең, ишең булыр — күңелең дә, тормошоң да урынында булыр. Кешеләрҙең, бәндәнең иң ысын бәхете ғаиләһендә, һөйгәне менән икән!

Ғәтиәт был көндәрҙә, йәне үртәлһә лә, Миңзада менән күрешмәне, эше күпкә һылтанды; үҙ-үҙен киләсәгенә ышандырҙы, үҙен бер Миңзада менән генә донъя бөтмәгән, илдә бер ул ғынамы, тип йыуатты.

Өлкөндө кәләше, өнһөҙ мишәр ҡыҙы, тотош ҡыҙылдан кейенгән. Аҙаҡ бөтә туй ҙа Ғәтиәттең аңында ҡыҙыл төҫтә һынланасаҡ. Ҡыҙыл туй: ҡыҙыл шаршауҙар, ҡыҙыл ығырмауҙар, биҙәкләп сигелгән ҡыҙыл таҫтамалдар... Хатта килен артынан килгән һандыҡ та ҡыҙыл-көрән төҫтә, аттары ҡыҙыл ерән — бөтә донъя, өй эсе шау ҡыҙылдан ҡаймалған. Ҡыҙыл йөҙҙәр, ал ирендәр, кәләштең ҡыҙыл күлдәге, үҙе теккән ҡып-ҡыҙыл алъяпҡысы...

Донъя ҡыҙыл төҫкә сумды, кешеләр ҡыҙылға әйләнде, йырҙар ҙа, һүҙҙәр ҙә ҡыҙарған... Ғәтиәт ниндәйҙер ҡыҙыл яу, ҡыҙыл өйөрмә эсендә ҡалды. Өй эсендә — ҡыҙыл һөлгөләр, ҡыҙыл яғалар, килен яғы ла шау ҡыҙылдан кейенгән... Гөлбәҙәр үҙе әллә бешкән еләк, әллә һутҡа тулышҡан сейә? Эҫеләүҙәнме, оялыуҙанмы, ҡып-ҡыҙыл булған, бите яна, оҙон бал итәкле күлдәге осона ла, гүйә, ялҡын ҡапҡан.

Ғәтиәт үҙе был тәүге туйында иланы, әллә артыҡ эсеп иҫерҙе, ә Гөлбәҙәр көлмәне лә, иламаны ла — таш ҡурсаҡтай ҡатып торҙо; Ғәтиәт кенә түгел, ул да тирә-әйләнәлә ни ҡубыуын, кешеләрҙең ни өсөн туҙынышыуын аңғарманы. Ҡыҙған-ҡыҙарған ҡунаҡтар ни өсөн ҡысҡырыша, шаулаша? Ҡыҙып-ҡыҙып хәбәр һөйләй, бер-береһен уҙҙырып йыр һуҙа, һыйларға ҡыҫташа.

Кәләш бик йоҡа ла, үтә тәпәшәк тә түгел — ҡалҡыу Ғәтиәткә таман. Эшләп үҫкәндер — бармаҡтары ла сибек кенә түгел, күҙҙәре лә моңһоу-төҫһөҙ түгел. Бары тирәһендәге хәлгә төшөнмәй, кейәүен танымай: хәс тә күҙенә яулыҡ бәйләнеләр ҙә был илгә килтереп ташланылар, тура һуҡыр тәкә уйынына ҡуштылар... Барыбер был уйынға ҡатнашып китә алмай, был кешеләргә генә түгел, кейәүенә лә күнегә алмай: күҙҙәрен тултырып ҡарап ҡатҡан, йоҡламауҙан күҙҙәре лә ҡыҙарып бөткән. Ғәтиәт, хәленә инеп, йылмайған була: "Гөлбәҙәр, Гөлбәҙәр, тим". — Беләгенән тотҡан була. Йәнәһе, шулай сабыйҙы йыуата, шулай күңелен күрә. Гөлбәҙәр: "Ә-ә", — ти, бүтән һүҙ тапмай. Ғәтиәт илай. Ниңә илай икән был кейәү? Ҡыҙ бала аңламай. Ул иламай ҙа, көлмәй ҙә. Таш һын, таш ҡурсаҡ. Әллә бер ни ҙә тоймаймы? Тирәһендә ниндәй шау-шыу ҡуптарғандар? Был ағай ниңә илай? Ғифриттәй — бәләкәс бала һымаҡ йәш ҡоя.

— Гөлбәҙәр...

Туй ҡыҙа, кешеләр бейергә төшә; йыр ҙа һуҙалар, ә кейәү менән кәләш — ҡашығаяҡта. Кейәү иҙәнгә сүккән, өҫтөндә ҡара костюм, ап-аҡ күлдәк. Салбарын кисә күмер үтек менән үтекләгәйнеләр.

— Гөлбәҙәр, әйт бер һүҙ!

— Нимә? — Ул әллә бер ни ҙә уйламаймы? Был йорт та, кешеләр ҙә — серле йомаҡ, был ауыл да ят. Өйрәнеп-күнегеп китерме?

Ҡыҙыл шаршауҙар елпенә, ҡыҙыл таҫтамалдар һалалар — ҡыҙ яғы бай икән... Ҡотлоярҙар ҡоҙаларға һыр бирерме?

Туй һуҙыла, ҡыҙыл ҡулъяулыҡтар, бүтән ҡыҙыл буҫтау күҙ яуын ала. Кейәү өҫтәл артына сүкмәне лә... Шатлығынан әллә иҫерҙеме, бәхетенән илаймы? Баш әйләнә, донъя сайҡала, ҡоҙаларҙы ла сырамытмай кейәү, бары тотош ҡыҙыл донъя, ҡыҙыл шаршауҙар... Кәләшенең беләгенә аҫылынып, үҙ хәленә төшөнөргә тырыша. Ҡыҙыл донъя кешеләренең ауыҙы ҡып-ҡыҙыл, күҙҙәре ҡыҙарған, биттәре буҙарған... Бөтәһе лә шат, шай, ауыҙҙары йырыҡ, ә кейәүгә ни етмәй? Кәләше ҡайҙа? Ул да әллә шул ҡыҙыл донъя, ҡыҙыл кешеләр менән уҡмаштымы?

Ғәтиәт япа-яңғыҙы ҡалды. Бәй, күҙен асһа, ҡыҙыл һындар өндәшмәй, ә туй дауам итә. Бейеү ҡыҙа, йырҙар көсәйә — туған-тыумаса ҡыуаныша. Туй шаулай, туй шашына. Бал көйөнә тағы түңәрәккә төштөләр, етәкләшеп алды ҡоҙа, ҡоҙағый... Улар ҙа бәхетле, улар ҙа был көн, тип йән атты бит, ниһайәт, мораҙҙарына ирештеләр.

Эй ҡоҙағый, төшсәле,
Үҙеңде күрһәтсәле;

Йәш кешеләр ҡатып торһон —
Ҡыйып, әйҙә, баҫсәле.

Ҡунаҡтар бейештеләр, гармун тынһа, һоҙғаҡ-тәртешкәне эшкә ектеләр, өйҙө күтәреп алып барҙылар. Туй шауы ҡотлоярҙар йортона һыймай Ҡуянсыҡ урамына ташып сыҡты. Күрше-күлән һоҡланды: ҡотлоярҙар әйттерә түгелме, Фәтиәттәре барса донъяны шаҡ ҡатыра түгелме?

## III

Миңзада ҡара янған. Туй иғлан ителгәс тә, Фәтиәтте үҙе юллап килде.

— Ысын икән, ышанмағайным…

— Шулай килеп сыҡты, Миңзада…

— Ә ант һүҙҙәрең, яратам, тип ҡабатлауҙарың?..

— Их Миңзада… Яратам да ул, тик донъя мин тигәнсә генә бармай икән шул.

— Ағайыңдар, инәйең ҡаршымы?

— Бөтә туған-тыумаса! — Фәтиәт өҙләктө. — Бөтәһе лә ҡаршы!

Ир ҙә иланы.

— Һөйөклөм, кәрәкмәй…

— Миңзада, мин һине онота алмам…

— Кәләшең ҡыҙҙан, минең ише балалы бисә түгел — һин бәхетле булырһың, Фәтиәт. Мин дә һиңә бәхет кенә теләйем!

— Һинһеҙ мин нишләрмен?

— Күнегерһең, Фәтиәт, кеше барыһына ла өйрәнә бит ул.

— Нимәгә йәнем яралы, күҙ алдымда — томан шаршауы…

— Онотторһоң.

Ике бисара иңрәне.

— Ташлама! — тип ялбарҙы береһе.

— Мин һине әрләргә, кәләшеңдән баш тарт, тиергә килгәйнем — йөрәгем етмәй. — Тегеһе үртәлде. — Мин бәхетеңә аяҡ сала алмайым, һин хаҡлы… Һин — егет кеше, бер ҡасан да өйләнеп ҡарамағанһың — әйҙә, иркең, үҙ бәхетеңде тап, үҙ көнөңдө күр, ә мин…

— Һин нишләрһең, Миңзада? Йөрәгем яна. Юҡ, кисерә алмам! Әйҙә, ауылдан сығып китәйек, төкөрәйек донъяһына!

— Аҡыллым, килешмәҫ! Ул тырмаға бер тапҡыр баҫтым бит инде мин…

— Миңзада!

— Юҡ, беҙгә икәү булырға яҙмағандыр, Саҡ менән Суҡ ише икебеҙ — ике ярҙа… — Тағы һулышын тигеҙләй. — Һине тегендә, Шиҙәлелә үк юғалтҡайным бит, Фәтиәт.

— Юҡ!

— Шунда уҡ яҙмышҡа ҡаршы баҫтым: һинән баш тарттым, игеҙәгем хаҡына тип, хыянат ҡылдым… Хәҙер мине Хоҙай үҙе язалай, хаҡ! Ә һин… — Ул егеттең сәсенән һыпырҙы. — …үҙ юлың менән кит! Һин бәхетле бул, яҡыным, мин һине бер ҡасан да онотмам.

— Миңзада… — Сабыйҙай үрһәләнде егет.

— Фәтиәт, хуш!

— Юҡ!

— Ҡурҡма, йәш кәләшең ҡосағынан айырырға теләмәйем, һинең дә хоҡуғың бар. Мин инде — бисә, берәү ҡалдығы! Егеттәргә ҡыҙ те-

йеш, мин һиңә тиң түгел, әммә онота алмаçһың; бел — ул ҡыҙ ҙа иртәгә бисә булыр!

— Миңзада!

— Танауыңа алҡалай кертеп ҡуй шуны, ҡолағыңа һырға итеп таҡ: ул — ул, мин мин булырмын.

Тирә-йүн, тау сусаҡтары һандырап торҙо, аяҡ аçтындағы сал ҡылған яланғас ботҡа уралды, ел сабырһыҙланды: бисара, әмәлһеҙҙә ҡуйынға тулып килә, сәстәрҙе йәлләмәйенсә туҙҙыра. Саяның йөҙө асырғанған, үртәлеп, алыçҡа төбәлгән, бите буйлап субырҙап йәше аға, иçе лә китмәй. Ел сәс остарын сыбалта, бары йөрәктәге һағышты ғына ҡыуып ебәрә алмай. Әленән-әле күҙ йәшен киптерә, йәндәге ыҙаны ғына ала алмай.

Ҡаштаҡ битләүе лә илай, ауыл сүккән, урамда бер йән эйәһе ҡалмаған, унда-бында һерәйешкән тирәктәр ҙә шымтайған. Ел аяуһыҙ. Икәү Ҡаштаҡ үрендә ҡатҡан. Инде ни ҡылырға, нисек хәл итергә? Нисек еңергә был ел ябырылыуын? Бер сараһын да тапманылар, ваҡыт ағышын, ваҡиғалар яйын үҙҙәренсә бора алманылар.

— Хуш, Ғәтиәтем, мине барыбер онота алмаçһың...

— Миңзада!

— Барыбер ҡасан да күҙ алдыңда торормон — һин минән ҡотола алмаçһың, мин әйтте, тиерһең. Сихырсы тигән даным да бар, Хәмиҙә ҡарсыҡ онотмаһын! Ҡайҙа ла, ҡасан да иçеңә төшөрмөн, алдыңа баçырмын, минән барыбер айырыла алмаçһың! Миңзада киçәткәйне, тиерһең.

— Миң-за-да!

— Был донъяларҙа ҡауышмаһаҡ та, әхирәттә лә, беҙҙең урын, беҙҙең көн бар, Ғәтиәт! Хәмиҙә ҡарсыҡ әле айырһа ла, был көн һуңғыһы түгел! Ел ҡыҙы шулай тине лә һауалар битенә һеңде. Йүләр артынан ташланды, тотам, тағы әҙерәк булһа ла бергә булам, тип ымһынды — тапманы бер тарафта ла һөйөклөһө эҙҙәрен.

— Миң-за-да! — Һауаларға ашты ауазы, йыһандарҙы айҡап ҡайтҡас, ҡая түштәренә бәрелеп-ҡаҡлығып, кире килде ул ҡайтауаз: — Миң-за-да! Был бәндә төнө буйы эҙләне күҙенә күренгәнен, төнө буйы баçыуҙарҙы ҡыҙырҙы; күҙ йәше кипмәне, йәне баçылманы.

Иртән ул ямғырҙа күшеккән быҙауҡайға оҡшап ҡалғайны. Уны туй мәшәҡәтенә әллә ни ҡатыштырманылар — ваҡиғалар үҙ ыңғайына ағылды, гүйә, кейәү егеттең ихтыярына буйһонмайынса һаман алға тәгәрәне яҙмыш тәгәрмәсе. Шул арбаға ултырғас, шул хәлгә бер тарығас, ни ҡылаһың, тағы нисек төшөп ҡалаһың?

## IV

Ғәтиәт тағы берҙе түңкәрҙе, күҙҙәре быялаланды, әсе бал башҡа сыҡты. Бите сирышты, уйҙары сыуалды. Был ҡыҙ баланы алда ниндәй яҙмыш көтә, ҡайҙан килеп юлыҡты ул бында? Аҙаштырып килтереп ҡуштылармы был өйөргә? Ян-яғына ҡарана, иштәрен дә, таныштарын да тапмай — бөтәһе лә ят, ә иң яҡын булырға тейешлеһе ҡайҙа?

Ир шымый кәләшенә мыçҡыллы йылмайҙы, тегеһе һаман бер ни аңғармай, баҙнатһыҙ. Ирҙәр бөтә ерҙә лә бер, бөтәһе лә түңкәрелгәнсе эсә, тип яҙғанына күндеме? Ғәтиәт үҙен һауалыраҡ, өçтөнөрәк тотто. Йәнәһе, ул затлы нәçелдән, Мәғҙән солтаны улы — уға ниндәй кәләш тә тиң, кемгә

бармаҡ күрһәтһә лә, йүгереп килә. Ғәтиәт, хискә бирелеп, шул арала илап та алды — йәнәһе, ихлас кеше. Ниңә иланы икән, ниңә ир башына йәш түкте? Бер иланы, бер йәш аралаш йылмайҙы, ә сит зат ни уйларға тейеш? Кейәүен нисәнсе ҡат күрә, был ят донъяла ҡайҙа сүгергә, ни ҡылырға? Ни һөйләһә, килешер... йә килешмәç? Энә өçтөндә гонаһһыҙ. Ул өйҙә тейешлеһен атҡара, бала саҡтан шулай өйрәнгән. Тыйнаҡ. Хәмиҙә ҡарсыҡ яңылышмаған, Фатима апаһы тәрбиәле бала димләгән... Аш-һыуҙы ла ҡайғырта, өй эсендә лә ҡәйнәһенә эш тейҙермәй, ә тышта... Мал ҡарай, ҡуралағы бар хәстәрҙе елкәһенә ауҙарҙы. Күрше-күлән дә уны гел арбаҙҙа, мал араһында күрә. Киленсәк һаман ҡыҙыл кейемдә, нескә билен дә шул ал алъяпҡысы менән быуған; шатмы, бәхетлеме, әллә эсендәгеһен тышҡа сығармаймы?

Киленсәкте кейәү йортонда иң һөйөндөргәне ҡәйнәһе менән яҡынлыҡ булды. Хәмиҙә үҙенең бар таныш-белешен, килендең туған-тыумаcаһын һорашып сыҡты. Икәү араһында хәҙер иң күңелле хәбәр Өлкөндө ауылы тураһында ине. Хәмиҙә ҡарсыҡ кәйефе ҡырылғанда йә килене көйһөҙләнеп киткәндә һүҙҙе Өлкөндөгә бора.

— Син минең апамды беләсеңме, — тип мишәрсә теленә төшөп киткән була, йәнәһе, килене күңелен күтәрә.

— Юк, — тип бер һүҙ менән яуаплай теге.

— Юктыр, — тип килешә ҡарсыҡ. — Күп гомер узды. Мин дә Өлкөндөнө онотоп бөткәм, йәшләрне белмәйем. Мына сине, күршене, алып, уңай иттек, Фатима апама рәхмәт... Хәс тә үз ауылыма кайткам... Исән-сау, татыулыкта, бәрәкәттә йәшәргә язсын, улым белән арагыз суынмасын!

Шуны ғына теләп ултыра хәҙер ҡарсыҡ көноҙоно. Ниһайәт, йәне тартҡан килен тап булды. Теләге бер — ғүмерле булһындар, ҡотлоярҙар нәçеленә иш янына ҡуш!

Хәмиҙә һөйөнөсөн килененән дә йәшермәне.

— Балалар шатлығына мин дә шат.

— Рәхмәт, кәйнәм. — Был килендең был йортта тәүге йөрәк һүҙе ине.

Хәмиҙә ҡарсыҡ Зөлҡәрнәй менән Әсләмдең ҡатындарын яратманы. Тегеләр үҙҙәре лә уғата уçал, кире булды — ҡәйнәне ҡәйнәгә һанаманы. Нәҡиә килене менән бөтөнләй бер өйҙә йәшәмәнеләр, Баныубикә килен менән бер ҡыйыҡ аçтындағы ғүмерҙәре йылдан аштымы икән? Шунда ҡарсыҡ бар байлығын Әпшәнгә ташыны, Әпшәнгә төшкән берҙәнбер ҡыҙы Рәшиҙәне ҡараштьı. Үҙе ҡапмаһа ҡапманы, Баныубикә килененән йәшерһә йәшерҙе, тегендәге Фазылетдин кейәүенә, берҙән-бер бөртөк ҡыҙына ярарға тырышты.

Бер балаһын икенсеһенә һөйләне, ниндәйҙер бер килешмәгән яғын тапты. Шулай берен-беренә һөйләп, балаларының араһын бутаны, хәс тә шулай тегеләрҙе юрый дошманлаштырырға атлыҡты. Алдына шуны маҡсат итеп ҡуйҙымы, әллә башы эшләмәнеме — шул яйлап ғәҙәтенә керҙе. Береһенең яманатын икенсеһенә һатып, йәм таптымы? Әллә шулай икенсеһе алдында яҡшатландымы — аңламаçһың. Шунда үҙе лә буталып бөттө; шул сиренән, шул сәйер ҡылығынан һис ҡотола алманы.

Был онотолоп бөтөп барған бер тарих ине. Хәмиҙәнең үҙенең генә сере... Көндәшлек, көнсөллөк теге заманда шул көнгә төшөрҙө, шул

юлға баҫтырҙы. Уйлап ҡараһаң, быны берәү ҙә белмәй бит. Хатта хәҙер был хәл төш кенә, хатта булмаған да кеүек! Шулай ҙа ул оҙон йылдар буйы ҡарсыҡтың йәнендә йәшәй, бына шунда, күкрәгендә тамға, ҡара мөһөр булып тора. Тамға, ҡара мөһөр, муйынына эленгән ҡара таҡта… Ул уны үҙе генә күрә, үҙе генә белә. Эйе, хатта төндәрен уянып китһә, асырғанып ҡапшап ҡарай һала. Түшендә инде нисә йылдар буйы шул тамға ялтырап, ҡара мөһөр һерәйеп, шул ҡара таҡта тибрәлеп тора!

…Мәлғүн Ҡотлояр ҡарт, түлһеҙ бисә тип, өҫтөнән йәш кәләш алып ҡайтҡас, Хәмиҙәнең ҡояшы һүнгәндәй, бар донъяһы селпәрәмә килгәндәй булды. Әллә нисә аҙна үҙ-үҙен белешмәй йөрөнө. Башы әйләнде, быуыны тотманы, аяғы аҫтындағыны тойманы, баш осондағыны шәйләмәне.

Берҙән, боронғо йоланы аңлап та тора… Ҡатындың Хоҙай ҡушҡан яҙмышына күнерлеге лә бар. Илдә бер ул ғына көндәш менән йәшәйме? Әүәл-әүәлдән ҡалған ғәҙәт: ир, хәленән килһә, бигерәк тә тәүге бисәһе тыу булһа, ҡабат өйләнә… Хәмиҙә үҙ хәлен белмәйме, уғамы инде дау ҡуптарырға, яу һалырға? Юҡ, Хәмиҙә дау ҡуптарманы. Уныһына ғына башы етте. Эш менән баҫты ғәрлеген, яҙмышыма яҙғаны шулдыр, тип күнде. Әлфирә бигерәк сибәр ине шул. Ул йоҡа кәүҙә, зифа һын, ул һылыулыҡ, ул сәгер күҙҙәр… Ә суҡынмыштың урам яңғыратып көлөп ебәреүҙәре! Бар донъя һиҫкәнә, күктәр ҙә, хатта өйҙәр ҙә, бар күрше-күлән шул саҡта бары Ҡотлояр ҡарттың шул сибәркәйен генә күҙәтә төҫлө.

Әлфирә тағы бисә лә кеүек түгел, ә Ҡотлоярҙың ҡыҙы, оло улы Сабирйәндең тиҫтере… Улар — Сабирйән менән Әлфирә — эҙерҙә өй тирәләй баҫтырышып уйнайҙар ҙа… Икеһенең араһында бер айырма юҡ. Ҡотлояр — ата, Хәмиҙә — инә, ә балалары — тышта. Бары кисен генә, мал ябылғас, тышта Сабирйән эйәрсәне-тиңдәше менән уйнап туйғас, шул ҡыҙ бала ҡарт түшәгенә үтеп ята. Хәмиҙәнең ғәрләнеүҙәре, төн буйы күҙен таҫырайтып, ут йотоп ятыуҙары! Ул йәш бит әле, хатта утыҙы ла тулмаған, ә ҡарты, йәнен аямай, саҡ ҡына көтмәй, сабырлыҡ ҡылмай йәш кәләш йәрәшкән булды. Бисә өҫтөнә бисә! Өҫтәүенә, хәҙер шул матурҡайынан айырылмай, Хәмиҙәһен бөтөнләй онотто: оҙон төндәрҙә йомшаҡ түшәктә — йәш көндәше, ә Хәмиҙә — уҡаһы ҡойолған, буяуы уңған күлдәк.

Теләгенә иреште, моражына етте ҡарт — ярты йыл тигәндә ҡыҙы һынында йөрөгән кәләшен ауырлы ла итеп ҡуйҙы. Көндәшенең эсен күреп тағы әрнене Хәмиҙә, ҡара янды. Эсе тулы ағыу, ҡарғыш ине — бары ауыҙындағы ҡанды тышҡа түкөрмәне, эсендә ут янғанды яттарға һиҙҙермәне. Уны йыуаш, баҫымса ҡатын, тип уйланылар, ҡарт шул күндәмлеге өсөн үҙ итте.

Шаталаҡ бала аҫырағанда Хәмиҙә үҙе булышып йөрөнө. Ҡарт тағы һөйөндө: бисәләрем татыу, Хәмиҙәм — оло балтыр — тәртибен белә, урынын белә, ғаиләне нығыта, көндәшен дә ҡыҙы кеүек күрә, тип ҡыуанды. Өйө ныҡ булғас, ғаиләһендә татыулыҡ тантана иткәс, ниңә иргә кикереп, ҡыя баҫып йөрөмәҫкә, ил йомошо менән булмаҫҡа? Ҡотлоярҙың башы, уйы шулай ил эшенән бушаманы. Ә өйҙә бисәләрҙең үҙ ҡанундары, үҙ яйҙары бар бит. Әлфирә генә, ирҙәүкә, оло ҡатындың тәртиптәренә күнмәне, бойороҡтарын үтәмәне, үҙенсә йөрөнө. Берәү, хәҙер бала тапҡас, үҙен хан кәләше тип хис итәме? Ул —

түрҙә, ә ҡыҫыр бисә Хәмиҙә — ишек төбөндә, кесе киленгә хеҙмәт итә! Хәмиҙә, аҡылы етеп, өндәшмәне, тешен ҡыҫты, асыуын төпкәрәк йәшерҙе.

Эйе, эстә хәтәр вулкандар урғыла, тын ғына ятҡан күл төбө мыжғып тора. Кешеләр, тымыҡ күл буйы шундай йәмле йәйге эңерҙә, тип һоҡланып үтә. Күҙҙе иркәләй шул был хозурлыҡ! Хәмиҙә лә ире алдында йылтырап торҙо: башын нығыраҡ эйҙе, ир һүҙенән сыҡманы, ҡаршы әйтмәне. Өйҙә тәртип, мал ҡаралған, донъялар имен, бер тигеҙ ағыла тормош… Ғаилә башлығына тағы ни кәрәк?

Шартлап торорлоҡ итеп мунса яҡҡайнылар. Ғәҙәттә бәпәйле өйҙә йылы көндәрҙә, көн аша мунса яғыла — бәләкәсте шулай йыш-йыш ҡойондороп торалар. Хәмиҙә лә көндәше игеҙәктәрен ҡараша, мунсала ла шуларҙы үҙе йыуыштырыша… Әлфирә — үҙе бала, өҫтәүенә, игеҙәктәр тапты, өлгөрә алмай. Ҡотлояр — атай, Хәмиҙә — инәй. Оло көндәше, әсә урынындағы Хәмиҙәнән башҡа ул был көндә нишләр ине?

Башта уттай ҡыҙыу мунсаға Ҡотлояр үҙе инеп сыҡты. Ғәҙәте шул. Уның менән берәү ҙә бармай мунсаға: ҡарт башына кәләпүшен, ҡулына бейәләйен кейеп ала, мунса ташына һыу ҡоя, Әйҙеҙ йомро мунса ташы шартлап китә. Шунан тотона ҡарт сабынырға — мунса шартлап, миндек сыртлап тора! Шулай сәғәт, сәғәт ярым сабына ҡарт… Уның артынан ғына бисәләре тартыла мунсаға. Башта Хәмиҙә — оло балтыр… Хәҙер Әлфирә менән икәү баралар, игеҙәктәрҙе йыуындыралар; Хәмиҙә алмаш-тилмәш тегеләрҙе өйгә ташып тора.

Хәмиҙә был юлы әллә нимәгә туҙҙы, әллә ниндәй сәбәптән ене ҡупты? Эсендәге иблисе, ахырыһы, бәйҙән ысҡынып тышҡа атлыҡты. Яһил бер юлы ике бәпестән дә — үҙенең бәхетһеҙлеге билдәләренән ҡотолорға яҫҡынды. Әллә, ысынлап та, уны ен ҡоторттомо?

Хәмиҙә был сара хаҡында ишеткәне бар ине. Ике бәпес тә, фельдшер алдындағы пациенттар һымаҡ, аҡ йүргәккә төрөлгән көйө ҡаршыһында ята. Ауыҙҙарын асҡандар, тамшанып бер булалар, эй, сырылдап ҡына илайҙар. Һыуһағандар асарбаҡтар! Ҡарға балалары! Сәүкә бәпкәләре! Хәмиҙә һыуға тип үрелде. Йәлләнеме әллә бисараларҙы? Башта, ысынлап та, һыуҙы йылымыслатып бирҙе. Аҙаҡ, бәпестәр һаман тынмағас, тауыш алыштырмағас, ҡайнар һыу ҡойҙо… Шуны балғалаҡлап олоһоноң тамағына ҡойҙо. Бәпес оторо аҡырырға тотондо — тымыҙып ҡына алып булмай. Хәмиҙә икенсеһенә лә шул аҡ ағыу — аҡ ҡайнар һыуҙы бирергә тамшанғайны, олоһоноң бигерәк үрле-ҡырлы ырғылыуы, янъяҡҡа сараһыҙ баш ташлауы албырғатты… Оло инәй шып туҡтап ҡалды. Саҡ башына барып етте ни ҡылыуы, ҡурҡты. Ян-яғына ҡаранды: Ҡотлояр төпкө бүлмәлә ята, ә Әлфирә бына-бына мунсанан ҡайтырға тейеш.

Оло ҡатын бер юлы икеһенән дә ҡотолайым да ҡуяйыммы тигән уйынан кире ҡайттымы? Икеләндеме? Әллә үҙ ҡылығынан үҙе баҙап ҡалдымы? Башына ут ҡапты, хәтәр ҡылығын саҡ баһаланы!.. Шул арала кесе инәй ҙә ҡайтып керҙе. Йөҙө айҙай балҡый. Таҙарынған. Ҡояштай бәхетле йылмая.

— Тымыҙа алмайһыңмы, апай? Хәҙер имеҙәм!

Олоһон төнө буйы тымыҙа алманылар. Таңға ул әсәһе ҡулында йән бирҙе.

Был ваҡытта сабыйҙарға ай тирәһе генә ине. Айлыҡ игеҙәктәрҙең береһе шулай уйламаҫ-иҫкәрмәҫ ерҙән был донъянан зым-зыя булды. Сәбәбен белмәнеләр, юллап та йөрөмәнеләр. Сабый ауырымай торамы, балалар үлмәй буламы? Игеҙәктәрҙең кесеһе — Зөлкәрнәйе генә шулай тере ҡалды, ә олоһо хаҡында тиҙҙән онотоп та бөттөләр...

Хәҙер, Әлфирә үҙе лә был фани донъянан уҙғас, Хәмиҙә хәтәр сере менән үҙе генә ҡалды. Берәүгә лә һөйләгәне юҡ, берәү ҙә белмәй был тарихты. Ул хәл хатта булмаған да һымаҡ. Инде төшкә әйләнеп бөткән. Шулай ҙа был оҙон йылдар буйы һаман ҡарсыҡтың йәнендә йәшәй. Бына шунда, күкрәгендә тамға, ҡара мөһөр, ҡара таҡта булып уйылған.

Хәмиҙә ҡарсыҡ, инә бөркөттәй, иңһеҙ ҡанаттарын йыйып, төҫһөҙ ҡараштарын тышҡа атып ултыра. Эре, хәс тә батшабикә ҡотлоярҙар нигеҙе тәхетендә… Шунан бар тирә-йүн, бар Мәғҙән ус төбөндәгеләй. Ғорур. Ниндәй балалар үҫтерҙе! Сабыр булғас, моратына етте, ә сабырһыҙ Әлфирә көндәше, ана, үҙ-үҙен һәләк итте… Түҙеме еткәс, йыуаш тиһәләр ҙә, ана, ниндәй тоҡомға түл йәйҙе — танауын сөйһә лә, ҡанаттарын елпенһә лә, хаҡы бар! Ҡотлоярҙар нәҫелен ишәйтте, тағы ла ҡеүәтләндерҙе түгелме? Алмагөл дә, Әлфирә лә түгел — нәҡ ул ҡотлоярҙар затының инәһе булды… Күпте башынан кисергән бит инде ул.

Хәмиҙә ҡарсыҡ йыш ҡына күңеленән бөтә ғүмерен байҡап сыға. Төп йортта ул хужабикә булып ҡалды. Бына тағы килен төшөрҙөләр — үҙенә алмаш. Иш янына ҡуш. Ҡотлоярҙар заты тағы ишәйер, нәҫел ҡото ҡотайыр! Хәмиҙә ҡарсыҡтан һуң төп йорттоң инә ҡорто Гөлбәҙәр атлы булыр, ул ары дауам итер нәҫел ебен… Ҡотло булһын килен, төклө аяғың менән! Лайыҡлы алмаш! Түлле булһын, түле киң булһын, нәҫел ырыҫын ҡотайтһын, тоҡомдо тағы ла нығыраҡ тармаҡландырһын был килен!

Хәмиҙә ҡарсыҡ тоҡом тармағының ҡайһы еп осон һурып сығарһа ла, уйы ҡартының үҙенә барып тоташа. Уныһы дан ир булды, ишле нәҫел ҡалдырҙы. Хәмиҙә ҡарсыҡ хәҙер инә бөркөттәй, уғландарын ҡурсалай, изгелектәр яуҙыра күңеленән… Теләктәре ҡайһы ҡайҙарға таралышҡан уландарына барып етерме, уларҙың яҙмыш йөгөн еңеләйтерме, юлдарын таҡырайтырмы?

## V

Миңзада Нәҡиә аша ҡотлоярҙар өйөндәге бөтә хәл-әхүәлдәрҙе белеп торҙо. Әхирәттәрҙең серҙәре — уртаҡ, ҡара-ҡаршы ултырып алалар ҙа шыш-быш хәбәр аға, хәбәр түгелә. Бөтә ауылды айҡап сығалар, энәһенән-ебенәсә тикшерәләр ҡотлоярҙарҙы. Хәмиҙә ҡарсыҡ — убырлы әбей, Ғәтиәт — шыйыҡ, ҡарсыҡ һүҙенән сыҡмай. Зөлкәрнәй, өлкәне буларак, был эшкә ҡыҫылмай, ситтә йөрөй — аҙаҡ туғандар уға бәлә япһармаҫ, уны ғәйеплегә һапламаҫ, ә ауыл советындағы Әсләме — хәбәр тоҡсайы, ағай-энеләре бисәһен тикшерә, ауылда ниндәй ғәйбәт ишетә, шуны бисәһенә еткерә… Баныубикә уҫал, теле әсе, ауыҙы осло, бер һүҙеңә биш һүҙ ҡайтара. Баныубикә — икәүҙең яратып сәйнәгән сүбәге!

Нәҡиә лә башта Баныубикә килендәшен тиңһенмәне бит, үҙенән түбән күрҙе. Бигерәк тә тегенең магазинда эшләүен өнәмәне. Ауылда аҡсалы урындар иҫәпле генә. Уҡытыусылар аҡса ала ла, сельпола ғына алалар; почтаға түрә-ғара бисәһе оялаған. Баныубикә — шуларҙың береһе. Әсләмдең ауыл советы башлығы булыуынан файҙалана. Нәҡиә оҙаҡ йылдар, бала үҫтерәм тип, өйҙә ятты, ә килендәше күптән һатыу итә; Һибәтов маҡтай, бүтән һатыусыларға өлгө итеп ҡуя. Баныубикә магазинын ваҡытында аса, ваҡытында яба, ҡояштай балҡып тора. Нишләп Нәҡиә, оло килен була тороп, кесеһенән артта? Баныубикә менән Һибәтовтың аралары ла бик-бик яҡын, тип һөйләйҙәр.

Нәҡиә килендәше менән ярышып йәшәне, унан алдын, маҡтаулыраҡ булырға тырышты. Ире, колхозда баш булғас, сельпоға тауар ташырға машина йәлләмәне. Зөлҡәрнәй менән сельпо рәйесе Һибәтов — борон-ғо дуҫтар, шулай ҙа Баныубикәнең планы айҙан-айға тулып бара, ә Нәҡиә барыбер артта һөйрәлә, сельпо рәйесе принципиаль етәксе булып ҡылана. Нәҡиә килендәшенең данына күнә алмай, йәнтәслимгә алышып, уны уҙырға маташа. Был йәшерен ярыш тынмай.

Миңзада тумалаҡ, һөйкөмлө сибәркәй. Мәрҙән сельпоһы рәйесе Һибәтовтың да күҙенә йөн үҫмәгән. Ул һылыуҡай экономистың тарихын белә; Тәлғәт дуҫы тыуған яҡтарына ҡайтып киткәс, Миңзада ”буш” тора. Бына шуныһы ымһындыра ла Һибәтовты, сейәләй һутлы иренле, ап-аҡ битле һылыуҡай күптән һушын алғайны, тик яйы сыҡмай, сибәркәй ҡапҡанына баҫмай.

Һибәтов райпоға килеп йөрөй, ауылдашы Миңзаданы гел генә шаярта: ”Матурҡай, нишләп һарғаяһың, ҡайт үҙебеҙгә!” Миңзада, бите ҡыҙарып, мыштым йылмая ла шыма, башына ул уй кергәне юҡ, рәйес һүҙен шаяртыу тип кенә ҡабул итә. Ә Һибәтов шаяртмай бит, ағайың бер һүҙен дә бушҡа ысҡындырмай — күптән ымһына, төлкө шикелле күҙҙәрен майландыра, буйы ғына етмәй. ”Ауылдаш”, ти ҙә хәбәр башлай, ”яҡташ”, ти ҙә күҙен аларта. Көтә.

Сибәр һаман кейәүгә бармай, хәҙер — иректә. Һаман ултыра, баш баҫып, счет төймәләрен тартып. Ни уйлай, ни кисерә икән был бәндә — ағаһы уйын һиҙәме? Бәлки, ирҙәрҙең бөтәһенең дә бер төҫлө булыуын, бер сыбыҡтан ҡыуылғанын белмәйҙер? Һибәтов ағай ғына түгел бит… Ҡыҙҙар ”ағайым”, ”еҙнәкәйем”, ”ҡоҙам” тип торғанда, ”ауылдашым”, ”яҡташым” тип һайрағанда, тегеләр икенсене уйлай, үҙенекен самалай. Бөтә ирҙәр ҙә яҡташта, һеңлекәштә, ҡоҙасала, балдыҙҙа бисә затын күрә бит, бөтә оҙон сәслеләр улар өсөн бисә енесенән, ә эштәге хеҙмәттәшлек, рәсми мөнәсәбәттәр, хатта бисәнең түрә йә депутат булыуы уға сүп кенә, ул уны бисә булараҡ ҡына, сибәр йә ямаҡ булараҡ ҡына ҡыҙыҡһындыра. Бисә заты шул сифаты менән бөйөк тә! Был — тәбиғәт ауазы.

Миңзада һаман тулышты, тамам бешеп етеште — был Мәрҙән сельпоһы рәйесе өмөтөн арттырҙы, нәфсеһен үҫтерҙе генә. Кемгә ни-сектер, үҙе тураһында арыу фекерҙә ине. Шәп оратор, башлы кеше, сельпо халҡын сәғәттәр буйы ауыҙына ҡаратып ултыра. Һонтор буйлы, ҡуйы ҡара ҡашлы, тар текә маңлайлы, ҡуйы тырпай сәсле. Күҙ өҫтөндәге ҡаш, һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ. Аяҡ аҫтында аунап ятҡан тутыҡ ҡаҙаҡ түгел Һибәтов. Коллектив менән оҫта етәкселек итә, кешеләр менән һөйләшә, түрә-ғара, юғары органдар менән аралаша белә.

Өҫтәүенә... шағир. Шиғри күңелле кеше, шиғырҙар яҙа. Шиғыр — бик, бик һирәктәр өлөшөнә төшкән көмөш. Шағир — бик нескә күңелле кеше! Кем, кем, ул ҡыҙҙар күңелен аңлай инде, мөхәббәт тураһында күп яҙа.

Миңзада һәм шағир Һибәтов. Нисек яңғырай? Иш булырлыҡмы, тиң булырлыҡмы шағир менән сибәр? Бер заман, Һибәтов юрауы юш килеп, Миңзада Мәрҙән сельпоһына эшкә ҡайтты. Һибәтовтың һөйөнөсөн күрһәгеҙ, Шиҙәлелә сибәр ауылдашына бик баҙнат итмәне, хәҙер аҫыл ҡош ҡулында ине — үҙе осоп керҙе ситлеккә! Шиҙәлелә юғарынан тороборак ҡараған төҫлө ине: янына яҡын юлатманы, һүҙҙе оҙонайтып барманы, әрһеҙ иргә сиселеп китмәне... Хәҙер Һибәтов атҡа атланғандай йөрөнө, балалы йәш ҡатын теләгемә ҡаршы төшмәҫ, тип өмөтләнде. Бығаса йән атҡаны, тән тартҡаны осраһа, кире һуғыусылар булманы ла — үҙ көсөнә, үҙ һәләтенә инанды. Эшкә ашҡынып барҙы, ғәҙәти көндәре тотош байрамға әйләнде. Шундай сибәр менән бергә эшләүе лә дан, тағы ул — ҡул аҫтында, һинең һәр өнөңдө оторға, бойроғоңдо үтәргә әҙер. Һибәтов боронғо рыцарҙарҙан һис тә кәм түгел. Һибәтов Юлий Цезарь кеүек теләгәнен ҡыла, еңеү артынан еңеү яулай, ҡалалар, илдәр буйһондора!

Миңзада ла хәҙер яғымлы һөйләште, ағаһы күңелен яуларға тырышты, шай. Һәр хәлдә Һибәтовтың үҙенә шулай тойолдо. Миңзада һылыу ҙа ыҡҡа килергә генә тора. Әлегәсә Һибәтовтың быңдай ҙа һөймәлекле бисә күргәне юҡ ине. Ул түҙемлегенең сигенә етте. Түҙер әмәлдәре ҡалманы, тулышып йөрөй, дәрте аша-таша. Миңзада ла, хәлен аңлап, сельпо рәйесенә ихлас булды, Баныубикәнең нәфрәтенән, дошманлығынан ҡотолоу өсөн арҡаланыр терәк эҙләне, ахырыһы. Нәкиә апай ҙа аҙым һайын шуны туҡып торҙо. Уларҙы Һибәтов яҡлаһа, эштәре уңа! Әгәр Нәкиә апаһы менән ишкә ҡуш булһа, таймаҫ, теләге лә бойомға ашыр: бер заман ул да ҡотлоярҙар араһына керер! Нәкиә апаһы менән булһа, уның теләктәрен үтәшһә...

Миңзада хәҙер шаярғанда ла ҡырт киҫеп барманы, райполағыса төҫөн боҙманы. Яғымлы ҡараш, наҙлы йылмайыуҙы ул әллә аҡсаға һатып алғанмы?

...Район үҙәгенән һуң ғына ҡайтып төштөләр. Һибәтов, конторала йомошом бар, тине, Миңзада ла папкаларын өйөнә йөкмәп йөрөмәҫкә булды. Индереп һалыр ҙа буш ҡул менән ҡайтыр. Бынау бысраҡта — тубыҡтан кире батҡаҡта, артҡы урамға төртәләнеп үткәнсе... Ниңә шулай хәл иткәндер? Ә Һибәтовтың башына ут ҡапты: инде ул үҙен тыйыр, аҡылын ауыҙлыҡлар хәлдә түгел ине. Хистәре ярынан ташты, йөрәге туланы. Уңай мәл, меңдән бер генә була торған мәл. Ҡыҙ күбәләктәй елпеп кенә өҫтәленә үтте лә, папкаларынан — оло йөгөнән ҡотолоп ишеккә атылды. Шунда Һибәтов та: ”Миңзада, бында бер расписка бар ине — кил әле!” — тип мығырҙаны. ”Юҡ, иртәгә!” — тип юлайҡан ғына бәрҙе үткер ҡыҙ. Шунда Һибәтов юлына арҡыры төштө:

— Миңзада, тим...

— Нимә, Һибәтов ағай? — Күҙҙәре ҙур асылып киткән бисараҡайҙың, ә түрә ағай өҫтөнә килә.

— Миңзада, мин бит, һин тип...

Һибәтов әллә ниндәй йылғырлыҡ менән ”күбәләк”те биленән ҡармап та алды, тыпырсынып маташҡан затты диванға этте.

— Һибб... — тип ҡысҡырҙы тегеһе.
— Миңзада...
— ...аҒҒ!.. — Йәш ҡатын яғалашты.
— Һин дә бисә бит, Миң...
— Булһа, ебб!.. — Йәш ҡатын айҡашты: күҙҙәре осҡон һибә, ҡулдары өҙөшә, тырнаҡтары сыйыша.
— Миң... күн!
— Юҡ! — Теге тынманы: тибеште, сыйышты, тешләргә яҫҡынды. Ахыр ниндәйҙер ҡөҙрәт менән дивандан осоп төштө: жакеты сиселгәйне, сәс-башы туҙғайны. Буҙарған йөҙөндә әллә ниндәй ғәләмәт тимгелдәр ҡалҡҡан, күҙҙәре ут бөркә. — Ю-юҡ!
Иҙән шығырҙаны.
— Кем!
Магазин ҡарауылсыһы Ғәләү йөрөй икән.

Был хаҡта Миңзада, әлбиттә, берәүгә лә һөйләмәне, ләкин иртән бөтә сельпо гөжләй ине, бөтә ауыл белә. Ярай, Һибәтов үҙе, үс итеп, ҡарауылсыны эштән ҡыуманы, эсе янһа ла, тешен ҡыҫты. Әҙәм ышанмаҫ, сираттағы ғәйбәткә сығарырҙар был яңылыҡты, тип өмөтләнде.
Шунан һуң ауылда Миңзада менән Һибәтов йөрөй икән тигән хәбәр таралды. Был хәбәрҙе, әлбиттә, Нәкиә ханым үҙе таратты. Ә Миңзаданың эргәһенә инеп икенсе төрлө татылданы.
— Миңзада, ул хәбәрҙе һәр кергән кешегә Баныубикә һөйләп тора...
— Китсе, уның миндә ниндәй үсе бар икән?
— Барҙыр инде, һөйләгәс... — Нәкиә күҙен дә йомманы. — Миненсә, ул үҙенә һинең килендәш булыуыңды теләмәй...
— Ыста, мин уға килендәш түгел дә, булырға жыйынмайым да... — әхирәте Нәкиә, уға ышанған булып, эйәк ҡағып торҙо. — Ғәтиәт ҡәйнеше мине түгел, бүтәнде алды ла! Ҡыҙҙан алды, күңелдәре булһын, әйҙә, балалы бисәне тиң итмәне — тағы уларға ни етмәй? Шул балдыҙҙарын эстәренә бәйләһендәр! — Миңзада әхирәтенә лә төрттөрҙө. — Шул Ғәтиәттәре — инде әллә кем! Бер Ғәтиәт түгел, биш Ғәтиәт булды, ыста, кәрәкмәй, бото бер тин!
Әхирәте лә ҡыҫылды:
— Мин дә шулай тим — ул Ғәтиәттәрен ҡатҡан камбалаға ҡушып һатһаң да, алыр кеше юҡ.
Нәкиә, әлбиттә, әхирәте анттарына ышанманы — улмы Миңзаданы белмәй. Белә, ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә һиҙә Нәкиә. Миңзада Ғәтиәт тип йән ата, шул тип күҙе тона, шуның хаҡына әллә ниҙәргә дүнергә лә әҙер.
Һибәтов менән Миңзада йөрөй тигән хәбәр Миңзаданы сығырынан сығарҙы.
— Шул Баныубикәнән сыға икән ул ғәйбәт... — Нәкиә ҡуйманы. — Нейә, апаһы өсөн үс ала, һине уйнашсы тип, бөтә ауылға фаш итә!
— Ыста, мин уның ирен тартып алырға жыйынмайым да!
— Ирен булмаһа, еҙнәһенә ҡармаҡ һалғанһың! — Нәкиә кисекмәне.
— Ыста, әллә ҡасанғы тарих! Мин Тәлғәттең уның еҙнәһе булырын белгәнме?

Миңзада аһтар орҙо, Нәкиә тағы бер ҡат был бисәнең уйы Ғәтиәт икәненә инанды. Ҡурйынды ҡуйыртып ҡына торҙо, ҡотлоярҙар йортондағы һәр хәбәрҙе түкмәй-сәсмәй көнөндә әхирәтенә еткерҙе.

— Туйҙары тик бал менән үтте…
— Ғәтиәт менән килен табынға ултырманылар ҙа…
— Ғәтиәт илай…
— Килен баҫымсаҡ: күтәрелеп ҡарамай, ҡыйып һүҙ әйтмәй — Хәмиҙә ҡарсыҡ бәхет күгенең етенсе ҡатында… Килен менән ҡәйнә килешкән… Ҡарсыҡ ҡанатлы ҡоштай талпына, аяғы ергә теймәй…
— Килен гел эш өҫтөндә, гел — арбаҙҙа… Баш баҫып егелгән ҡотлоярҙарға — маҡтаулы килендәре булыр… Егеп алғандар йыуашты, хеҙмәт итә тегеләргә… Ҡотлоярҙар холҡо: баҫылғанды баҫалар, теле оҙонайһа, ҡырҡалар; уларға килендәрҙең баҡыр башлыһы ла, алтын башлыһы ла бер иш — ярамай.
— Уларға килен ҡәҙере — йәтим быҙау ҡәҙере…
— Баҫылғанды баҡа ла "баҫырмын" тигән… — Йөпләй әхирәте Нәкиәне.
— Шулай! — тип ҡаты мөһөр баҫа йәнә Нәкиә. Ишкә-ҡуш был әхирәттәр.

Миңзада ла Нәкиә апаһы менән әхирәт булышыуҙан йәм таба — шулай булһа ла, үҙенең Ғәтиәткә яҡынлығын, ҡатышы барлығын иҫбатлағыһы килә, ахырыһы. Шул да уны егеткә иш итә!

Миңзада үкенә: бәхетен ҡулынан ысҡындырҙы, дан егетте яттарға бирҙе. Хәҙер терһәгеңде тешләйһеңме? Ауылда яман ғәйбәттәр таралғас, Һибәтовҡа түгел, Баныубикәгә асыуы ҡабарҙы. Иң ҡурҡҡаны: ғәйбәттең Ғәтиәткә барып етеүе! Ҡалғаны — сүп кенә! Сынйырлап хурлыҡ бағанаһына бәйләһендәр, Мәғҙән урамдарынан шыр яланғас йөрөтһөндәр, ыһ та итмәҫ, бары Ғәтиәткә яман йоҡмаһын, Ғәтиәт быларҙың береһен дә белмәһен! Миңзада Ғәтиәттең күҙенән генә төшкөһө килмәй. Асырғаныу аҡтыҡ сиктә уны хәтәр аҙымға этәрә.

Миңзада егет юлына арҡыры төштө. Нисә көн һағаланы, тап итә алманы.

— Һин…
— Мин!

Ғәтиәт һағайҙы.

— …ышанаһыңмы, Ғәтиәт, шул һүҙҙәргә?
— Миңзада!
— Уф, алла! — Бисара аһтар орҙо. — Нисек ышанмаҫҡа, бөтә кеше һөйләй!
— Миңзада, тыныслан!
— Нисек? Йәнемде аҡтаралар, тереләй һуялар: мин — Һибәтовтың һөйәркәһе! Ярай, һин тегендә йәш кәләш ҡосағында… Һин — законлы, мин — законһыҙ!
— Миңзада, бер нимә лә аңламайым!
— Ярай, Миңзада ла үҙенә тәғәйенен тапты, тип ҡул һелтәнеңме?
— Мин был хәбәрҙе һинән ишетәм…
— Хәмиҙә ҡарсыҡ әйтмәнеме?
— Ауылдан хәбәр йыйып йөрөргә минең ваҡытым юҡ — Кәшкейәккә электр сымы һуҙабыҙ.

— Һин — бәхетле, донъяң — көйлө, ә мин...

— Билләһи, ишетмәнем, Миңзада!

— Һин минең хаҡта ишетергә лә, белергә лә теләмәйһең — миңә бөтөнләй төкөрөп ҡуйҙың...

Ғәтиәт ыҡ-мыҡ итте.

— Йәш кәләш йәрәштең, мине ташланың... Мин ни — битте һөртөп ырғытҡан таҫтамал ни!

— Ни эшләйем һуң, Миңзада? Һин үҙең дә...

— Эйе, үҙем ғәйепле, шуға үҙем генә ут йотам.

— Әйт, мин һинең өсөн ни эшләй алам?

— Һин?

— Мин!

— Ҡана, тыңла... — Миңзада тәүҙә Һибәтов менән булғанды һөйләп бирҙе — шулай баҫты йәнен, үҙенсә шулай киҫте ғәйбәт ҡойроғон. Әле генә аңланы: егет юлына бер ғәйбәт кенә һөйрәп сығармаған уны!

— Ғәтиәт, мин һине генә уйлайым, ә һин... Был нисек була инде?

Тегеһе өндәшмәй.

— Мин, был ғәйбәткә ышана икән, тип янам, ғәрлегем алҡымымдан ала, ә һин...

— Миңзада, мин бер ни ҙә ҡыла алмайым.

— Мәмәй! Үҙең мине яратам тинең — мин ышанған булдым. Миңзифаға ла игеҙәгем булғанға ғына өйләнергә йөрөгәнһең... Был ир икән, ир һүҙе бер икән, тип уйланым, хаталанғанмын. Мин бер яман һүҙ быға етмәһен, тим, ә ул...

— Миңзада...

— Һин мине яратмайһың — мине юрый язалайһың! Һибәтов менән йөрөүем дә, йөрөмәүем дә барыбер... Мин баштүбән йөрөһәм дә, ыһ та итмәҫ инең, бөтә ауыл ирҙәренеке булһам да, бармаҡ осон да ҡыбырҙатмаҫ инең! Һин мине ҡыҙғанмайһың! — Бисара йәшенә быуылды, ир тегенең алдында ни ҡылырға, нигә йоғонорға белмәне.

Үкһене лә үкһене бисә, ир ҡаңғырҙы, ваҡыт һуҙылды. Ахыр сая ҡатын баш ҡалҡытты. Сәстәре сыбалды, күҙенә төштө, муйынына уралды. Күҙе йәш менән тулы, ут булып баҙлай ине.

— Бар, ҡайт, йәш бисәңә! Уны ҡосаҡлап ят, мин бүтән ҡамасауламам, юлыңа ла арҡыры төшмәм. Бар, йүгер! Тотмайым да. Бер шаҡай бисә сыҡҡан икән юлыңа, аҡылынан яҙған, аңын юйған, уйнашсылыр әле ул, бәлки, ысынында түрәһе менән типтерәлер. Ышан шул ғәйбәткә, күңелең тыныс булыр: ана, Миңзада ниндәй, әлдә өйләнмәгәнмен — ул эштән сыҡҡан, юлдан яҙған, Шиҙәлелә лә шулай булғандыр әле, мәғҙәндәр белмәй генәлер... Кинән: Миңзада әллә ҡайҙа китмәгән, кәләшемдән артыҡ ере лә юҡ! Шулай йыуат үҙеңде, тынысланып йәшә. Бар! Миңзада урамда тороп ҡала, Һибәтов янына уйнаш итергә китә!

— Миңзада!

— Ашыҡ!

— Миңзада...

— Йүгер! — Шашҡан бәндә ирҙе этте лә үҙе, киҫә боролоп, юлында булды. Ай күрҙе, ҡояш алды. Һүҙҙәре һауала һәленеп ҡалды, ауаздары ҡолаҡ төбөндә сыңлап торҙо, әрнештәре йөрәк бәгерен телде. Ир урынынан ҡымшанманы, шашҡан бисәне күҙҙән юғалғанса күҙәтеп торҙо.

## VI

Әсләмдең, ниһайәт, күңеле урынына ултырҙы. Ул да туғанына игелек эшләне! Ҡотлояр ҡарттың тағы бер васыяты үтәлде: балалар, бер төптән тороғоҙ, бер-берегеҙ тип йәшәгеҙ! Ҡарт уғландарының барыһын да башлы-күҙле итергә тырышты... Хәҙер Ғәтиәт тә әҙәмсә донъя көтә башлар. Әсләм туған йәнле шул. Йәшерәк саҡта намыҫсан булды, ҡотлоярҙар даны өсөн янды. Зөлҡәрнәй ағаһы менән ғорурлана ине, уның кәләшен дә фәрештә күрҙе.

Шиҙәлегә юл төшкәс, ингәйне, аптыраны: еңгәһе бәйһеҙ, тотанаҡһыҙ икән. Әсләм Зөлҡәрнәй ағаһын ҡыҙғанып ҡайтты.

— Баныубикә, — тине ҡатынына, уйын сисеп, — абзыйым өйөндә стрәпкә тота!

— Ә?

— Кухарка. Ә еңгәм — дворян бисәһе! Өйҙә ята. Абзыйым елкәһендә!

Әсләмгә Ғәтиәт тә йәл. Ҡустыһы Мәғҙәндә беренсе егет — кәләше лә ауылда бер булһын! Ҡотлоярҙарҙың тормошо ал да гөл булһын, һүҙ тейҙерерлек булмаһын донъяһы!

Улар — ҡотлоярҙар. Ҡарт шул яҡшы атты васыят итте уларға.

Әсләм менән Ғәтиәт ҡатышып йәшәй. Камил ағалары — ситтә, Зөлҡәрнәй ағай — үҙенә бер башҡа кеше... ә былар — тиңдәр. Осрашһалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй, күрешһәләр, шәбәйеп китәләр: туғандар тау аҡтарыр, Мәғҙән донъяһын үҙҙәренсә генә ҡорор кеүек.

Был дыуамал уй иң элек ҡайһыһының башына килгәндер — икеһе лә тоҡанды ла китте.

— Әйҙә, Ғәтиәт, һине завпочта итәбеҙ!

— Әйҙә!

— Ниңә, беҙҙең ҡулдан килмәйме? — Әсләм ҡыҙҙы.

— Бер ҡыйынлығы ла юҡ инде уның — ултыраһың да эшләйһең! — Ғәтиәт шәбәйҙе.

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ! — Әсләм утҡа май бөрктө. — Ҡарт белеп туҡыған: кеше табаны аҫтында йөрөгәнсе, эш башында бул! Үҙ илеңдә, эйе, солтан булып йәшә!

Әсләм армиянан ҡайтып төшөүен, ҡарттың үҙен ауыл советына эшкә ҡушыуын хәтерләне.

— Әтейем дәртләндерә: күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй, егет маҡтана! Башта ҡыймайыраҡ торһам да, аҙаҡ күнектем. Кем белеп тыуған — тормош үҙе өйрәтә, энем.

Туғандар ҡәнәғәт ултырҙы, эре сирттерҙе.

— Ә Мофассаловты ҡайҙа ҡуяһың, абзый? — Ғәтиәт иҫенә килде.

— Ул эшен бисәһенә тапшырырға йөрөй, үҙе радиоузел техниги булып ҡала — шунан файҙаланабыҙ...

— Бына политика ҡайҙа бара...

— Почтала мотлаҡ ир кеше зав булырға тейеш! Мин район радиоузелы начальнигы Чебыкин менән һөйләшәм!

— Һөйләш, абзый! Мәғҙәндә почта-телеграф ҡотлоярҙар ҡулына төшә...

Ҡусты көлдө, ағай көлмәне: ...күперҙәр һәм банктар большевиктар ҡулына күсә...

— Ауыл советы — беҙҙең ҡулда, хөкүмәттә — ҡотлоярҙар, колхозы ғына...

— Сельпо — Ҡотлояр килендәре ҡулында... Ә Һибәтов, энем, Әбәт кулак балаһы!

— Контра!

— Контра! Ну, көнө тыуыр — уның да башын ҡыйып төшөрөрбөҙ, урынына Ҡотлояр киленен ултыртырбыҙ. — Әсләм полководец ҡиәфәтенә инде.

— Әйткәнебеҙ, абзый, фәрештәнең "Амин" тигән сағына тура килһен!

— Шулай. Мин әйттем.

Әсләмдең Шиҙәлегә юлы уңманы: Чебыкин завпочта Мофассаловҡа сат йәбеште — үҙебеҙҙең кадр! Чебыкин Мофассалов дуҫын һатманы.

Полководецҡа сигенеүҙән башҡа сара ҡалманы. Ә Мофассалов Чебыкинға үҙ планын еткергәс, тегеһе завпочта урынына дуҫының бисәһен ҡоҙалау менән һис ризалашманы: "Ул саҡта завпочтаны үҙем табам!" — тине.

Мофассалов тағы барҙы районға, контузия хитлай, баш зыңҡый, ни әйтһәгеҙ ҙә, эшләй алмайым, тине.

...Fәтиәт Ҡотлояровты Мәғҙән почтаһы начальнигы иткәндәр тигән хәбәр ауылды йәшен тиҙлегендә ураны. Бәғзеләр бот сапты, икенселәре ышанманы, өсөнсөләр, барып, үҙ күҙҙәре менән күрәһе, хатта ҡапшап ҡарағыһы килде. Башҡорт тотоп ҡарамай ышанмай. Fәтиәт Ҡотлояров тәүге көндәрҙә энә өҫтөндәгеләй ултырҙы: ҡыҙарҙы-буҙарҙы, бите бер янды, бер ағарҙы. Был авантюрист бигерәк тә иҫәп-хисап ғәмәленән ҡурҡа ине, ғүмерендә аҡса менән эшләп ҡарағаны юҡ; ә Әсләм ағаһы килеп тә баҫмай, финансҡа үҙем өйрәтермен тигән булды ла ни... Ярай, Чебыкинды мырҙаһын ике айлыҡ курстарға ебәртергә күндерҙе, шунына рәхмәт. Fәтиәт Ҡотлояров уҡырға китте. Донъяһын ташланы, кәләшен онотто.

Ике ай һә тигәнсе үтеп тә китте, Fәтиәт әйләнеп тә ҡайтты, эшем эйәһеләй начальник урынына менеп тә ҡунаҡланы, ә ирле-ҡатынлы Мофассаловтар ҡотлоярҙар диктатураһына протест йөҙөнән өйҙә бот күтәреп, түбә таҡтаһына төкөрөп ятты — ятһындар, ҡотлоярҙар ҙа төкөрҙө уларға. Ауылда власты тотошлай ҡулға төшөрөргә бер ниәтләгәс, Ленин бабай ҡушыуынса, большевиктарса эҙмә-эҙлекле булырға кәрәк. Шыйғанлау, тайшанлап ярты юлда туҡтау революцияны һәләк итәсәк. Мәғҙән революционерҙары ең һыҙғанып эшкә тотондо: инде почта-телеграф ҡулда ине, күперен дә, яйлап сельпоһын да алырҙар.

Төрлө һүҙ йөрөнө Мәғҙәндә, ул арала Ҡотлоярҙың балалары тормошонда тағы бер иҫтәлекле ваҡиға булып алды (бөйөк боролош): Зөлҡәрнәй Ҡотлояровты яңынан күтәрҙеләр — партком секретары вазифаһына ҡуйҙылар. Райком элекке кадрын онотмай, уларға төкөрөп ҡуймай — афарин, ҡотлоярҙар яңынан баш ҡалҡыта, ҡабат һын турайта был тоҡом: "Мәғҙәндә бөтә власть — ҡотлоярҙарға!"

Һөйөндө ҡотлоярҙар нәҫеле: өс көн, өс төн эстеләр Әсләмдәр өйөндә, унан Fәтиәттәрҙә — төп нигеҙҙә. Шунда Әсләмде лә, Fәтиәтте лә саҡ вазифаларынан бушатманылар, Хоҙай күрҙе, үҙе яҡлап ҡалды. Бер тиксегә ярлыҡаны! Ә Зөлҡәрнәйҙәрҙә бер ниндәй байрам-фәсмәтән булманы, ағай хатта туғандарына күренеп йөрөмәне, өс көн өйөндә ятты. Хәҙер, үрләгәс, тағы айырылды ағай туғандарынан — уларҙы күрмәҫ, танымаҫ булды. Донъя ҡуласа, әйләнә лә әүәлге нөктәһенә

килтереп баҫтыра бәндәһен. Зөлҡәрнәй Ҡотлояров — тағы түрә, ҡустыларынан юғарыла, атай васыятын үтәп йөрөһә лә, туғандар буй етмәҫ ерҙә. Был да ҡотлоярҙар холҡоноң бер хикмәте: һыуға батып барғанда туғаныңа баш һал, ярҙамға һалам түгел һал һора, ә түрҙә саҡта сабатаңды баш осона сөйгә эл дә үҙеңде генә бел, туған-тыумасаң да, дуҫ-ишең дә бимаҙаламаһын! Ҡан тартыуына дәғүәләп тә маҙаһыҙламаһындар! Туғандар эштән айыра, кеше алдында абруйыңды төшөрә! Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ та, нәҫел-нәсәп, туған-тыумасалыҡ та ят большевиктарға! Ул йоҡмай ҡотлоярҙарға! Революцион уяулыҡ ҡушмай.

Ғәтиәт Ҡотлояровты Мәғҙән почтаһы башлығы итеү ауылдаштарҙы шаңҡытҡайны, Зөлҡәрнәй Ҡотлояровтың ҡабат үрләүе кешене аптыратманы ла, туғандар ғына кинәнде, Әсләм менән Ғәтиәт үрле-ҡырлы һикерҙе. Ә Зөлҡәрнәйҙең иҫе лә китмәне — әйҙә, туғандары һоҡланһын, нәҫеле уға алҡыштар яуҙырһын!

Мәғҙән шаңҡып торҙо, Мәғҙәндә ысын түңкәрелеш булды. Ниһайәт, ҡотлоярҙар илдә тулы власын урынлаштырҙы! Почта-телеграф, ауыл советы, партком… Киләсәктә сельпо ла улар ҡулына күсәсәк!

## VII

Әсләм үҫмер көйө колхозда тырышып эшләп йөрөнө, атаһы өйрәткәнсә, үгеҙ эше баш баҫып ер һөрҙө — барыбер ярай алманы. Мәктәп директоры Урыҫ Хөсәйен, ”бер аҙна уҡырға йөрөмәнең” тип, мәктәптән ҡыуҙы, ФЗО-ға оҙатты.

Ә ниңә ул мәктәпкә йөрөмәне? Кем белеште, төпсөп һорашты? Атай ҡарт, аслыҡтан миктәп, һарыҡтар урынына үҙе йығылды — бәрәндәр, тәкә-бәрәстәр ас тормаһын, көн дә әҙләп булһа ла өнөрө таратырға кәрәк, тип Ҡотлояр ҡарт, усына келәт асҡысын һалып, уны фермаға ҡыуаланы!..

Ит изгелек колхозға — көт яуызлыҡ. Үҫмерҙең көсәнеүе, тырышлығы бушҡа булды. Дөрөҫө, ул Мәғҙәндә стахановса эшләне: уҡыны ла, атаһы урынына ферма мөдире йөгөн дә тарты, ә Хөсәйендәргә, Бәхти кеүектәргә барыбер ярай алманы.

Әгәр атаһы ҡартаймаһа, ауырып түшәккә йығылмаһа, Бәхти урынында ултырыр ине, яттарҙан улын ҡаҡтырмаҫ ине. Юҡ, атаһы ҡартайған, сүккән, власы ҡулынан киткән. Фәхретдин ағай ҙа алыҫта, обкомда — түрә. Уға һонолоп та барыбер буй етмәй. Тағы Ҡотлояр — ата большевик, ғәзиз балаһын үҙе өгөтләй ФЗО-ға. Үҙе!

Үҫмерҙең күҙенә йәш эркелә, йәне әрней, атаһына һарыуы ҡайнай…

ФЗО хаҡында ауылда күп ишетте. ”ФЗО фронт түгел, ут эсендә йөрөмәйһең”, — тип шөкөр итә атай. Ә Әсләм фронтҡа ғына китер ине. Унда, исмаһам, ашаталар, ҡышын һарыҡ туны бирәләр, оҙон ҡуңыслы быйма кейҙерәләр. Фронтҡа башын юғары тотоп китер ине Әсләм. Фронтҡа, йәшең етһә, китмәй ҡалып булмай, ә ФЗО-ға бармаҫҡа була ине. Урыҫ Хөсәйен ҡыуҙы, өҫтән яҙып бирҙе.

…Ҡастылар барыбер шул Белорет ФЗО-һынан, ҡастылар. Әсләм үҙе менән тағы ике ауылдаш ҡыҙҙы ла эйәртте. Уны элек бик үҙһенеп етмәгән Нәсимә менән Йыуан Фаҡый уға тағылып алды. Айырылманылар, ут-һыуҙарҙы кисергә лә әҙер ине үҫмерҙәр.

Йәйге төн ҡыҫҡа шул, тын алып өлгөрмәйһең, таң да беленә башлай. Тәүҙә аҡрынлап офоҡта күк көмбәҙе тишелә, ”тишек” ҙурайғандан-ҙурая бара. Ниһайәт, үҫмер өшөп уяна. Ҡайҙан һыуыҡ ел өргәнен, ҡайҙан танһыҡ йылы килгәнен абайлай алмай икенсе ҡабырғаһына әйләнә. Йыуанға төртөлә. Теге бесәй балаһы төҫлө үҫмергә моронон терәп кенә ятҡан. Ниһайәт, арып-талсығып ойоп киткән. Әсләм, кистәнге иркәләүҙе иҫләп, ҡыҙҙы үҙенә ҡыҫты. Хәҙер ул ерҙән, һауанан, йондоҙҙарҙан көс алғайны, йәш үләнгә баш терәп, саф шишмә ауазын тыңлап ял иткәйне; йомшаҡ йәшел түшәктә ауnаны, көс-кәр тупланы. Хәҙер әүәл йәне тартмаған зат та донъяла иң сибәр, иң танһыҡ кеүек күренде. Таң алдынан үҫмер алдында бар ҡыҙҙар ҙа тигеҙләнә, уларҙың барыһы ла сибәрләнә... Инде улар сибәргә, йәмһеҙгә бүленмәй, ятраҡанға, өнәмәгәнгә айырылмай — ҡаршыла бары бисә енесе генә... Таң ят менән үҙ ҡатыныңды ла тиңләй, һөйгәнең менән үҙһенмәгәнеңде бер таҡтаға баҫтыра, бары енестең ҡаршы яҡ енескә ынтылышы ҡала. Ике енес бер-береһенә ашҡына, таң уларҙы бергә ҡуша. Был тормоштоң үҙе түгелме?

Үҫмер ҙә хәҙер үҙ хоҡуҡтарын тойҙо, ҡаршыһында йыуан боттарҙы түгел, ә нәфис боттарҙы, ямаҡ йөҙҙө түгел, ә әкиәттәге илаһиәне күрҙе. Был — бәхет хәбәрсеһе, мөхәббәт наҙы ине. Хыялының өндәге сағылышы! Таң һылыуы — тандың иргә бүләге! Ир, ниһайәт, ҡосаҡтарын асты, күкрәктәрен кирҙе. Таң һылыуына, бисә енесенә табан йомолдо. Бармаҡ остары дерелдәне, ҡашы тартты, күҙҙәре сағыу тамашанан сылтсылт йомолдо. Таң ҡыҙы иҫ киткес бер гүзәл ине... Ул ожмах вәғәҙә итеп, әүрәтеп ята. Бит алмалары яна, ҡаш остарына аҫылташтар теҙелгән, ирендәре йәннәт иленең ҡапҡаһы... Ас шуны, үҫмер, йәнең булһа, яула шуны. Һинең татығаның бармы әкиәт емештәрен, иҫергәнең бармы хушбуй еҫтәренән? Тирмәнтауындағы сейәлек, тау битләүендәге бесәнлек... Сибәр еңгәләр, тығыҙ тәнле, төйөрөм осалы ҡыҙҙар һинең хыялың ине бит. Һин шунда завферма атайың урынына бесәнселәрҙең норма үтәүен хисаплап йөрөнөң. Ә төндәрен һаташып сыҡтың... Ул — ҡаршыңда! Ул ошо заттарҙың иң сибәре, иң затлыһы! Ал уны ҡосағыңа, өҙ ул емеште!

Үҫмер алға ташлана. Йыртҡыстай, ҡорбанына ымһына... Юҡ, уянмай ҡыҙ: уянмаясаҡ та. Арыған. Үлектәй йоҡлай. Кистән бимазалаусы ул түгел инеме? Әсләм иҫләй бит. Ҡыҙҙы бешкән алмалай әүәләй үҫмер: ялап та ҡарай таңда алһыуланған битен, саҡ ҡына ҡолаҡ осон тешләп тә ала — танһығы ҡанмай. Сей алма, бешмәгән алма. Үҫмер эҫергән, тирләгән тәнгә һөлөк ише ҡаҙала. Ирендәре упсып бөтә, һулышы өҙөлә, ҡыҙ яуапһыҙ. Иҙерәп йоҡлай талсыҡҡан бала: аяҡтары талған, быуындары ҡатҡан... Офоҡтар өнһөҙ, йондоҙҙар шаҡырайып ҡатҡан; Ай абыстай ҙа һалҡын сырайлы — күрмәй, яҡламай үҫмерҙе. Йондоҙҙар һүнгән, күк бите ойоған. Үҫмер үрһәләнә, сабый ише асығып, имсәк даулап, тамшана. Уға тәмле кәрәк, һөтләкәй бирегеҙ! Күктәр, керештәй тартылған офоҡтар, ниңә өнһөҙһөгөҙ; тауҙар, урмандар, ниңә йоҡоғоҙға баш була алмайһығыҙ? Тау сусаҡтары битараф, күк ҡыҙы — Таң һылыуы ғәмһеҙ. Тауҙар, урмандар, Айбикә ҡаһа, Ҡояш апай уянһа, Таң һылыуы ҡосаҡта булмаҫ. Таң һылыуы — танһыҡ һылыу, бер мәленә генә наҙ ҡоя... Наҙын тойоп, татып ҡалсы, егет аҫылы!

Үҫмер ҡамырҙай әүәләй Йыуанды, уҡтарын атып, тәнен, йәнәһе, тишкеләп бөтә; һаман быҙау һымаҡ бит алмаһын ялай… Тағы шыҡһыҙ көн тыуа, тағы ялҡытҡыс юл… Таң һылыуы, ҡайҙа ҡасаһың, серле төн, йондоҙҙар еңгәсәйе — Айбикә, ҡайҙа юғалдың?

Таң өҙөлә, хыял юғала; таң ҡаса, төҫһөҙ көн биләй йыһанды. Бары һин генә, үҫмер, хыял иленән айырылырға теләмәйһең, өн менән төштө бутайһың. Янында хыял ҡошо түгел, Йыуан бит! Юҡ, тип, ҡарышып, сибәр, тип, серәшеп маташаһың… Таңда ғына бисәләр барыһы ла танһыҡ, бер төрлө! Улар — һинең, минең ишем. Һин дә таңда юлдаш ҡыҙҙың табанын үбергә әҙер инең… Был таңда ул һинеке булырға тейеш ине…

Һинең хоҡуҡтарың хаҡ, теләктәрең аҡ ине, үҫмер… Һин үҙең дә матур, батыр инең был таңда… Йәнәшәндә — фәрештәң, яҙмышташың! Ал, ал яҙмышыңды ҡулыңа! Йәшәүҙе дауам ит, быуындар сылбырын ялға, тормошто тантана иттер, көслө ир, ғәмле кеше! Һин хыялды ла ысынбарлыҡҡа бәйләргә хаҡлыһың! Һуңынан Әсләм, йүләр, ике ауылдаш ҡыҙҙы имен-аман Мәғҙәнгә алып ҡайтып еткерҙем, тип маҡтанып йөрөгән буласаҡ.

…Хәҙер йәйәү. Таныш һуҡмаҡ, йәнгә танһыҡ ерҙәр. Өсәү көндөҙ ҡаса-боҫа бара, күберәген кисен юл ыратып ҡалалар; таң алдынан йоҡо баҫа. Ҡояш дилбегә буйы күтәрелгәнсе баш ҡалҡытмайҙар. Урман тулы емеш-еләк, йәйгә рәхмәт. Йәй — уларҙың дуҫы, төн — ҡасҡындарҙың ише. Йәйгә таянып, төнгә эйәреп, бер-береһен етәкләп баралар. Арыу — асығыуҙан. Үлән, еләкте күпме өҙһәң дә, һуты шыйыҡ, көсө әҙ; башаҡ тиреп ҡарайҙар. Ул асы, бешмәгән. Кипмәгән сей утын кеүек, йылыһы ла, көсө лә юҡ. Хәлһерәнеләр, бурлактар кеүек бер-береһенә тағылышып алдылар. Шулай юл ыраталар. Хәҙер һәр саҡырым — әжәл.

Ҡыйғыны үттеләр. Рухтин, Туғыҙлы артта ҡалды. Мәсәғүткә еткәнсе мең тайҙылар, мең тәкмәсләнеләр. Мәсәғүткә етеү ҡайтып етеү менән бер бит. Хәҙер көн кисләү менән йоҡоға талалар. Күҙҙәр үҙҙәренәнүҙҙәре йомола, быуындар өҙөлә, аяҡтар тыңламай. Хәҙер ҡарыу ҡайтты, теләк онотолдо. Арыу, асығыу быуынға төштө — йән аҫрау хаҡында ғына ҡайғырталар. Өсәү бер-береһенә һыйынышып ятып йоҡлай — төнөн шулай йылыраҡ. Бер-береһе ҡуйынына кереп баралар, тик теләк тоймайҙар. Әсләм Йыуандың боттарына ҡыҫылып ята, ашау хаҡында ғына уйлай; тегеһе лә ҡот көпшәһенә тейә, бары эсендә бүреләр олоуын һиҙә, Нәсимә бисараһы ла, йылынам тип, Әсләмдең арҡаһын ҡыҫып-ҡыҫып ҡоса, тәне дер-дер ҡалтырана. Бахыр, түшен тызый ғына ҡаҡ һөйәккә, сибек боттарын үҫмерҙең янбашына ышҡый. Йылынмаҫмы, көс артмаҫмы? Танһыҡ берәү генә: ашау, ашау, тағы ашау. Япраҡ ашанылар, бөрө тирҙеләр, шунан көн үләнгә ҡалды. Бәрәңге баҡсаһына төшөргә түгел, ауылға яҡынларға ҡурҡалар. Биш саҡырымдан эттәр абалап сыға, улар артынан — малай-шалай… Тотһалар, кире Белореткa, кире ФЗО-ға!

Ауылдарҙы урап үтәләр, кешенән ҡасалар. Үҙҙәре лә хәҙер өрәк кеүек… сыҡмай ҡалған йәндәре бар тәндәрендә. Һөйләшмәйҙәр. Һөйләшергә лә көс кәрәк. Һыу ҙа үлән. Һүҙһеҙ генә етәкләшеп алалар… Мәсәғүткә етһәләр, өйгә керҙеләр, тупһаны аша атланылар тигән һүҙ.

Мәсәғүт, Мәсәғүт... Хыял иле, яҙмыш саты. Ҡайҙа һин? Ниңә атлаған һайын артҡа сигәһең? Әллә, урыныңдан ҡубып, яй ғына кирегә сигенәһеңме? Үс тотаһыңмы балаларға? Улар — өсәү, һинекеләр бит...

Ҡасҡындар тип атама, яттар, тип ситкә типмә. Дезертир ҙа, тимә!

...Әсләм манма тиргә батып уянды. Хәлен аңғарғас, өнөн төшөнән айырғас, еңел һулап ҡуйҙы.

— Ыңғырашып, тағы уяттың! Иртүк — эшкә, башым тағы — тубал... — тип һуҡранды бисәһе.

Сельпо бухгалтерияһында тәтәй бисәнең эшләй башлауы, әлбиттә, Баныубикәнең хәлен хөртәйте. Шуға һуңғы арала бер кәйефе юҡ, йәне урынында түгел. Шул бер әйбер хаҡында уйлап, ҡаңғырып алып тик йөрөй! Имеш, Миңзада уның әүәлге тормошон баштүбән китерә, йән тыныслыҡтарын боҙа!.. Әле йүнләп күрешкәндәре лә, һөйләшкәндәре лә юҡ, ә шик күңелгә оялап алды. Тағы күрешкеләре лә килеп тормай, бүтән һөйләшмәҫтәр ҙә инде. Өйҙәге һәр хилаф, иренең яҙа баҫыуы, хырылдап ятыуы йәненә тейә... Юҡ, Баныубикә тегеләр хаҡында ғына уйлай, хәҙер шулар бар уйын, бар тормошон биләп алды... Иң хәтәре: ул — бер үҙе, ә тегеләр — икәү, һүҙҙәре береккән, теләктәре иш килгән. Йә был, йә теге мөйөштә торалар. Моғайын, Баныубикәне сәйнәйҙәрҙер, уға ҡаршы мәкер ауы ҡоралар ҙыр...

Нәҡиә хәҙер отчетын яңы экономист аша ғына үткәрә, элекке шикелле уныһын ике-өс ҡат кире ҡайтармайҙар — эше көйләнде. Һин — миңә, мин — һиңә. Эштәре беште, вәс-вәс икәү. Баныубикә һиҙеп йөрөй. ”Продмаг” һатыусыһы хәленең ҡатмарлашыуын аңлай. Икәү уға ҡаршы тора, ике ғәскәр бергә ҡушылды. Баныубикә — ҡамауҙа, ике фронтҡа ҡаршы һуғыша! Фронт һыҙығы оҙонайҙы, ғәскәре һирәгәйҙе. Хәҙер Һибәтовтың ҡайһы яҡҡа ауышыуы мәсьәләне хәл итәсәк. Теге икәү хәҙер сельпо рәйесенең йөрәге өсөн көрәшәсәк. Баныубикә лә өндәшмәй ҡалмай, үҙенекен даулай. Әллә килендәшенең көнсөллөгө сәмләндерә, айҙан-айға пландарын үтәргә көс бирәме? Баныубикә асыуын шулай баҫа, шулай көрәшә: эш менән булырға, планды үтәргә, шулай танауына сиртергә! Әйҙә, килендәш, сәсрәп кит, әйҙә, тонсоҡ көнсөллөгөңдән! Баныубикә ал бирмәҫ, ебеп төшмәҫ! Әйҙә, бынан һуң да ”Һибәтовҡа арҡаланып ҡына маҡтала”, тип ҡараһын! Тағы ниндәй сәбәп табыр икән? Баныубикә лә сәмле, ул да үҙенекен ҡулынан ысҡындырмаҫ, алдына алғанынан тайпылмаҫ!

...Баныубикә Хоҙайға, яңы ят килендәше Гөлбәҙәргә рәхмәттәр уҡыны: ниһайәт, ҡәйнеше башлы-күҙле, сәсе ипле бала менән бәйләнде, иблислеккә юл ҡуйылманы... Хоҙай ул иблистең юлдарын аймылыштырҙы, ул дошман бәндәләрҙе айырҙы, маңлайға-маңлай бәрҙермәне. Урынынан ҡупҡан йөрәге баҫылды, йәне тынысланды ҡатындың. Әләйһә, әллә ниндәй хәбәрҙәр донъяны тултырғайны.

## VIII

Хәмиҙә ҡарсыҡ, инә бөркөттәй иңһеҙ ҡанаттарын — итәктәрен йыйып, тәҙрәгә тексәйгән — яратҡан шөғөлө. Тәҙрәнән оло донъяны байҡап, ойоп та китә. Күпте кисергән, күпте татыған, инде арыған, талсыҡҡан, әле хәл йыя, уйын төйнәй.

Тышта тыныс. Төштән һуң донъя һилләнеп, ойоп ҡалған, хатта ваҡыт ағышы ла туҡтаған төҫлө. Ел әҫәре лә юҡ, һыуығы ла ҡаты түгел, бала-сағаны битенән семетеп, танауынан тартып өйгә ҡыуаламай. Ҡуянсыҡ — артҡы урам. Бында машина-тракторы ла гөжләп тормай, малай-шалай Ҡаштаҡ битләүендә сана шыуа, урам аша ашығып берәү, икәү үтә... Ҡарсыҡ тәҙрәнән һәр үткенсене барлап ултыра.

Ошо Ҡуянсыҡ урамында ғүмере уҙҙы. Әле күҙе лә асылмаған ҡуян балаһылай сағынан килен итеп төшөргәйнеләр — таштай батты. Яҙмышы шул булғандыр. Ҡотлоярҙар көслө, тармаҡлы тоҡом... Ҡыйыуһыҙ ғына сибек киленгә ошо ҡеүәтле нәҫелде ишәйтергә, тағы тармаҡландырырға яҙған. Хәҙер урам тарихын унан да ныҒыраҡ белеүсе юҡтыр. Ҡуянсыҡ башынан үткәндәр Хәмиҙә йөрәген дә елкендергән. Дыуан яғынан ҡыҙылдар уҙғанғаса замандарҙы ла иҫләй ул. Ҡаштаҡ башында әүәл сауылдар шаулап үҫә торғайны. Кисен шунан ҡуяндар төшә. Шеш ҡолаҡтар урамда уйын ҡора, малай-шалай менән дә ҡатышып китә. Әкәмәт: ҡуян балалары менән малайҙар баҫтырыша, уйнап туйғас, тегеләр тағы тауға ҡаса.

Хәмиҙә урамын ярата, уны Өлкөндө менән сағыштыра. Өлкөндө — һөҙәк тау аҫтында, түңәрәк кенә күле лә бар — бүтән йәме юҡ. Шунан уйы килененә күсә. Уны үҙенә алмашсы һымаҡ күрә, шул балала үҙен таный. Ә Миңзада анау алабарман көндәшенә тартҡан... Үҙе лә ҡартына ҡаршы әйтмәне, гел ыңғайына торҙо — шулай яраны, ҡотлоярҙар араһына ла һыйҙы. Ә Әлфирә килендәше нишләне? Күҙенә аҡ-ҡара күренмәне, сая ине... Сабырһыҙлыҡ кешене бөтөрә. Сибәр бисә матурлыҡ өсөн, ғишыҡ-ғишрәт өсөн тыуа, уның ғүмере, ғәҙәттә, ҡыҫҡа була. Ә тормош көтөр өсөн сабыр ҡатын кәрәк. Төҫкә-башҡа ямағыраҡ булһа ла, бата.

Был килен дә бәхетле булыр, тормошо уңып торор. Ҡарсыҡтың йөрәгенә — май, уң тура килде. Үҙ игеҙәге кеүек...

Ғәтиәт туйынан бушанғас та, ҡарсыҡ Әпшәнгә Рәшиҙә ҡыҙы менән Фазылетдин кейәүе янына барып ураны. Ҡайтыуына килене һағынып бөткән, инде ни ҡылырға белмәй, алдына-артына сыға.

— Әни, ташлап киттегеҙ, ялгыз башым... — Йөҙө лә асылып киткән, бит алмаларында нур уйнай. Балалар бәхетле булһа, тигеҙ ғүмер сикһә — Хәмиҙә ҡарсыҡҡа шул еткән.

Эңер төшә, ҡарсыҡ һаман урынынан ҡымшанмай. Шуға ҡыуана: Ғәтиәте барыбер Сатан игеҙәктәренән ҡотолдо бит! Ҡара, берәүһенән айырылғайны, алмашҡа — икенсеһе! Клубҡа сыҡһа, үтергә бирмәй ата шайтан, үтеп сыҡҡан Миңзада: һуҡыр себендәй күҙгә кереп бара. Сибәр ҙә икән — егеттәрҙе аяҡтан йыға. Тегеләр ҙә шундайҙарға әүрәй. Ҡарт та йәшлектә ҡыҙылға ҡыҙыҡты, ярай, аҙаҡ төшөндө, аҡылы бар ине. Хәмиҙә ҡарсыҡ ата менән улын сағыштырып ҡарай.

Инә бөркөт күҙен һирәк йома. Йомһа ла, мәлгә генә. Күберәк күҙ алмаһын күсәрендә әйләндерә — шулай ял итә. Ҡарсыҡтың да күҙе йомолоп-йомолоп китә, яурыны һәлпәйеп төшә. Инде һуң, ҡараңғы, тип тороп китергә ынтылғайны, күҙенә нәмә күренде, башы әйләнеп китте. Кем? Кем тәҙрә төбөндә? Ҡарсыҡтың хәле бөттө, тәне ҡалтыранды; күҙен бер асты, бер йомдо. Ышанманы. Иҫен йыйып өлгөрмәгәйне әле, түрбашта сылтырлап быяла ҡойолдо. Бәй, ҡарсыҡ сарбалап түрьяҡҡа йомолдо.

— Килен! Гөлбәҙәр!

— Ә, әни!

— Тәҙрә… Теге…

Ал яҡҡа сыҡтылар. Тегенән елдәр иҫкән. Хәмиҙә күрҙе бит, күрҙе! Шул, шул! Ғәтиәт ҡайтһын әле — ниндәй йыланды ҡуйынында йөрөткәнен белер!

Ғәтиәт ҡайтты, ышанмамышҡа һалышты. Тәҙрәгә мендәр тығып ҡуйған булдылар. Ғәтиәт, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға тип, өй баҫыусыны юллап китте.

— Милиционер Ғәниевҡа барам! Әйҙә, ул тикшерһен!

Өйҙәгеләр ышанды, асыуҙары ҡабарғайны: юлбаҫарҙы тоторға, хөкөмгә тарттырырға! Үс, үс! Үс йөҙәтә кешене, үс уны һуҡыр итә, аҡылын юя. Әгәр үс томаламаһа был бәндәләрҙең күҙен…

Ғәтиәт тәҙрә генә сиртте, юҡ, ватманы, ҡарттар ишетер, тип өрктө. Миңзада сыҡты. Ҡыҙарған-буҙарған, ике бит алмаһы яна. "Шуның ғына эше, бүтән кем йөрөһөн төн заманында", — тип уйлап өлгөрҙө ир, теге быуа ла башланы.

— Йәнем, көтә-көтә көтөк булдым — барһың икән донъяла… — Йәшенә төйөлдө, сәс остарын сылатып бөттө.

— Һин тәҙрә ватып йөрөйһөңмө? — тине Ғәтиәт, саҡ һулап.

— Юҡ!

— Өй баҫышып, донъя емермәһәң… — Ә сихырсы быуа ғына.

— Юҡ! — Ирҙе ялмап алды, борғалана-йомарлана, тағы ҡорбанына йомола, уны бер ынтылышта бөтәүләп һоғонмаҡ була.

— А-а!

Алҡымынан алды, бөтә тәненә һылашты.

Шунда ир аңында "йылан" тигән уй ялтланы — әсәһе лә иҫкәрткәйне бит… Бер бушата, бер һыға…

— Көт-төм… — Тәне йоҡа — усҡа йоҡмай ҙа, тәне шыма — бармаҡтан шылып сыға, үҙенә һылаша.

— Ы-ы…

Ҡармай. Ир тартыша ла башланы, шай.

— Һауа етмәй…

— Мәмәй! — Көлә сихырсы, йомро тәне ир һынына уралған, әллә нисә ҡат ирҙе, ҡомалаҡ һабағылай, сырмалтҡан.

— Миң-за-да.

Сая ҡатын баштан уҡ ирҙең һушын алды, тын алырға бирмәне.

— Инәйемдәр — күрше ауылда! Игеҙәгемдең бәпесе бар бит, ишетмәнеңме? — Сая бисә ҡараңғыла әйберҙәрҙе шыпырҙы, ир тәнендәгене лә өҙҙө-йолҡто.

Ир бер ни аңғармай, үлән һабағылай һығылып төштө. Теге шаша, үҙенә тотошлай һура… Ир оторо хәлһерәй, аҡтыҡ көсөнән яҙа.

— А-а! — Әллә ниндәй кейек, бер аҫта, бер өҫтә… Яҫҡынып һура, инде бөтөрә, ирҙең тәнендә аҡтыҡ ҡына йәнен ҡалдыра…

Ир ғәжиз булды, һынһыҙ ятты: ҡараңғыла бер йылан быуҙы, бер сабый бала илгәҙәкләнеп уйнаны. Бәүелсәккә һалып иркәләп бәүелтте.

— Миңзада… — Үҙ-үҙен ышандырырға тырышты. Әле генә уны ни эшләттеләр? Йылан да быуған кеүек, сабый ҙа шаярған һымаҡ… Әллә сихырланылармы? Ҡайҙа ята?

— …Һин мине сихырланың, — тине Ғәтиәт, көсәнеп. Теге көлдө. Күҙен ише түшенә йәшерҙе. Һырылып-һырышып барҙы, бәхетле йылмайҙы. Үҙен донъяла иң-иң бәхетле зат итеп тойҙо.

— Хәҙер ул тәҙрәне нисек ҡуйырбыҙ?
— Иртәгә үк әтейемде ебәрәм — ул оҫта…
— Мин үҙем дә — оҫта…
— Килен ҡәйнә, ә кейәү ҡайны тупрағынан…
— Һиңә — көлкө.
Сабыйҙай илгәҙәкләнде теге.
— Сысҡанға үлем, бесәйгә — көлкө. Йә, Ғәтиәт, сирттем генә… ярылды ла ҡуйҙы, ғәфү ит!
Ир бүтән һүҙ тапманы.
— Ғәтиәт, бүтән түҙемлегем ҡалманы, аулаҡ та булғас… Һине бик күргем килде, ә нисек саҡырырға? Зинһар, кисер!
— Һин уны минең бисәгә үс итеп ярҙың, бер юлы убырлы әбейҙе лә өркөтәйем, тинең… Был килендең ҡотон алайым — әйҙә, әҙер донъяла ятмаһын, тинең.
— Эһе, эһе! Ҡайҙан белеп тораһың ул, Ғәтиәт?
— Мин һинең почергыңды беләм.
— Ыста, минең почергымды ла белеп бөткән! — Илгәҙәкләнде сая, шул тигәнсе сабыйға әүерелде лә ҡуйҙысы.
Уйҙар йәшен сатҡыһылай телде ир аңын: сихырсы!
Һаҡаллы сабыйҙар эй килеште, эй һөйләнсекләнде! Икеһенә лә рәхәт, икеһе лә был уйындан йәм таба ине.
— Йомро баш һин…
— Сәсем дә оҙон, аҡылым да…
Күктәре аяҙ, көмбәҙҙәре бейек, офоҡтары икһеҙ-сикһеҙ, гүйә, бөтә булмыштары ҡыуана, бар донъя йылмая. Бер-береһенең һәр теләген үтәргә әҙерҙәр…
Ғәтиәт өсөн сая бисә бөтөнләй икенсе иш ине. Гөлбәҙәр түшәктә мыштым бит. Әллә ҡәйнәнән тартына, әллә иренән ятһына: күнәгенән ашҡан ҡамырҙай, түшәккә һылаша ла тыма. Ғәтиәт хәленсә әүәләй, бер ипкә килтерә алмай. Өҫтәүенә, пружиналы карауат төпкә батып китә; бында, ҡаҡ һикелә — йәннәт. Ир ғүмерендә күрмәгәнде күрҙе, татымағанды татыны. Был юлы дилбегәне үҙ ҡулына алды, аҫау айғырҙай бышҡырҙы… Миңзада ҡыҙҙарҙыҡы шикелле йоҡа тәнле икән дәһә! Биле лә бал ҡортоноҡолай өҙәләп бара, Ғәтиәттең көрәктәй усына һыйҙы ла ҡуйҙысы — бәпес тапҡан бисә лә тимәҫһең. Ә тәне… Хәс тә алҡын диңгеҙ, айҡала-сайҡала… Бер күтәрелә, Диңгеҙбикә бер ҡосағына йола, бер тағын ысҡындыра… Шулай уйната: яҡын да ебәрмәй, ситкә лә типмәй.
Гөлбәҙәр, әлбиттә, уның тырнаҡ осона ла тормай — ир быныһын аңланы. Ҡыҙҙан алды, ҡыҙ ҙа һөйҙө Ғәтиәт… Хәҙер ул ҡыҙ ҙа бисә, Миңзаданан ни алдын ере бар? Ҡайтышыраҡ булмаһа әле! Миңзада, ана, үлсәп беселгәнме: тәне тәненә иш, наҙы наҙға тап килә… Ғәтиәт бер ҡарашынан иҫерә, ымынан еңелә… Әллә Миңзада ирҙәрҙең серен белә, сихырына өйрәнгәнме? Гөлбәҙәр төҫһөҙләнә бара, шиңә бара, артҡа күсә бара.
Ирҙең зиһене үткерләнә: эт бисә юрый әүрәтә, арбай! Сихырсы! Ғәтиәт тағы һөрлөктө, ихтыяры һынды! Теге бармаҡ осо менән йөрөтә!
Сая ҡатын моратына иреште.
— Ғәтиәт, рәхмәт, ғүмерҙә онотаһым юҡ!
Ир үҙен быуынһыҙлыҡта ғәйепләне, ә бисә шат ине. Ул, ниһайәт, еңде! Ғәтиәт был кисте һис онотмаҫ, ҡайҙа булһа ла, ни кисерһә лә,

әленән-әле хәтеренә төшөрөр, үҙе лә аңһыҙ килеш гел шуға тартылыр. Шул әмәлде, исмаһам, тағы бер ҡабатлағыһы килер.

— Ғәтиәт, зинһар, ғәфү ит, юрый түгел, яңылыштан! Был — хәтәр, был — килешмәй!

Ир өйөнә ҡайтып торманы.

Ҡатын күңеле тилбер шул: һиҙҙе Гөлбәҙәр кейәүе күңелдәгеһен... Йәш тиһәң дә, исеме ҡатын бит әле уның. Шунда тәүләп йөрәгендә шик орлоғо яралды. Ә түрбаштағы ярыҡ тәҙрә һаман шул көйө өңрәйеп торҙо. Ирмен тигән ирҙең хәҙер унда эше лә юҡ ине.

## IX

Ғәтиәттең кәйефе юҡ: ғаилә тормошо ла яйланмай, эше лә алға бармай. Курстарҙы бөтөп, белем эстәһә лә, иҫәп-хисапҡа төшөнә алманы. Иҫәп-хисапҡа барымы юҡлығын, үҙенең урыны түгеллеген аңлаһа ла, һуң. Һәүетемсә көн артынан көн үтә. Ишкәксеһеҙ кәмә ел ыңғайына эйәрә, тулҡындар иркенә буйһона. Толҡаһыҙ был тормош даръяһында ҡайҙа барып башты орорға, ҡайһы һалам осона тотонорға?

Ғәтиәт Наполеонса эш итте: айлыҡ отчетын Миңзаданан тикшертеп алырға өйрәнде. Был юлы ла көнө шул сибәргә төштө. Миңзада почтаның бар документацияһын барлап ултыра, өҫтөнә — яңы мәшәҡәт. Нәҡиә әхирәте отчеты менән йөҙәтеүе етмәгән! Ике-өс бухгалтерияны алып барырға ҡәһәтләнә икән кеше, ташҡа сөй ҡаға. Барыһы ла мөхәббәт хаҡына!

Почта мөдире өҫтөнә ялыуҙар яуҙы. Һарай түбәһен терәп кенә тотоп буламы? Ярай, пенсия таратыу тәртибенә төшөндө Ғәтиәт, уныһын ведомостағы һандарға ҡарап һанаһаң, иҫәбе иҫәпкә тап килә. Аҡса переводын бирергә, хатта аҡса күсергәндә тарифҡа ҡарап юл сығымдарын хисапларға ла өйрәнде; бына һаҡлыҡ кассаһы эше бер мәшәҡәт булды. Ғәтиәт халыҡтан ингән аҡсаны һалыуын һала, тик процентын иҫәпләй алмай. Аҙаҡ Миңзадаға күрһәтермен тип, һылтарға ваҡыт ҡыҫа, кеше лә түҙемһеҙ бит: тауыш ҡуптара һала.

Почтальондар эштең айышына тиҙ төшөндө, ауыҙ баҫып көләләр ҙә ҡуялар, күҙҙәре һата. Их, шул күҙҙәрҙе соҡоп ҡына алырҙай була Мәғҙән Наполеоны, ирке етһә, ҡамсыһын алыр, халыҡты бер көтөү итеп өйөрөр ине.

Әсләм ағаһы менән дә кәңәшләште Мәғҙән почтаһы мөдире. Әсләм үҙе ҡара иҫәпкә лә, счетҡа ла шәп икән, һә тигәнсе меңдәрен, миллиондарын һанап сығара. Ҡағыҙ алып, һаҡлыҡ кассаһындағы таксаларҙы һалып, ҡустыһына процент иҫәпләргә өйрәтә. Юл ыңғайы үҙе лә өйрәнә.

— Ҡурҡма, шуға ғына ҡалғас... — Әсләм бирешмәй.

— Курстарҙа ла шуға төшөнмәнем.

— Счетҡа өйрәнгәнһең. — Әсләм баш баҫып ултырҙы. Үҙе өйрәнгәнде ҡустыһына өйрәтте. Төн уртаһынаса мәсьәлә сисәләр. Күҙҙәр һыҙлай, быуындар тала, йоҡо баҫа. Хәмиҙә ҡарсыҡ та, килен дә мыш-мыш, ә был ике йүләр счет төймәһе тарта, әллә ниндәй һандар сыймаҡлай ҡағыҙ битенә.

— Ҡаушама, энем, күҙеңде йом да тотон! Күҙ ҡурҡа, ҡул... — Әсләм атаһы һүҙен ҡабатлай. — Һин әллә бөтә начальниктар ҙа

белеп тыуған, академия тамамлаған, тиһеңме. Горький — самоучка, Бедный — пролетарий, Калинин — крәҫтиән. Фәхретдин абзыйымда — өс класс, бывший обком завы, ә әтейем — Ҡотлояр ҡарт гел юғарыла ултырҙы, безграмотный ине. Сулаҡ Хәлил ҡарт та — шул.

— Бригадир менән завфермаға бата әле, бында аҡса эше...

— Көймә, бөтә начальниктар ҙа — сей наҙан, улар өсөн ярҙамсылары эшләй.

— Мофассалов бисәһе, миңә протест йөҙөнән, өйҙә ята...

— Эштән ҡыу!

Ғәтиәт эстән ҡыҙыҡ өсөн генә: ”Миңзада почтаға эшкә килер ине микән?” — тип уйлап ҡуя.

— Чебыкин урынына кеше алырға ҡушмай. Бухгалтерым булһамы? — Саҡ ҡына: ”Миңзадаға ялыынып та, кеше көнлө булып та йөрөмәҫ инем”, — тип ысҡындырманы. Әсләм ағаһы ла, Баныубикә еңгәһе лә Миңзаданы яратмай. Миңзада исеме тыйылған ҡотлоярҙар өйөндә.

— Бер өйрәнеп китерһең әле, шунда ағайым ҡалай дөрөҫ әйткән, тип рәхмәт уҡырһың. Һәр эште башлағанда шулай. Үҙеңде ят ояға һалынған себеш балаһылай хис итәһең. Һине этәләр-төртәләр, йолҡҡослайҙар. Кешеләр ҙә, коллектив та башта ятты ҡабул итмәй. Аҙаҡ яйлана... — Тел биҫтәһе Әсләм, бер сиселгәс, тынманы. — Атай ҡарт ни ти торғайны? Үҙ илеңдә хужа булыу мең ҡат ҡыйыныраҡ — түҙегеҙ! Ситтә йөрөгәнсе үҙ илегеҙгә ҡайтығыҙ, шунда баш булығыҙ! Беҙ — ҡотлоярҙар, Ғәтиәт, большевик уландары!

Иртән Ғәтиәт, намыҫланып, тағы почтаға табан атлай. Дилбегәһен ҡатыраҡ тартҡан юлаусылай, тешләнә.

...Тағы өс аҙнанан Мәғҙән почтаһына район элемтә узелынан ревизорҙар килеп төшә. Тотош бригада. Һуңынан Ғәтиәт тә, Әсләм дә уларҙы, Мофассалов ялыуы буйынса килгәндәр, тип һөйләп йөрөйәсәк. Шул бригада Мәғҙән почтаһы эшен энәһенән-ебенәсә тикшерә, бөтә документтарҙы аҡтара. Почта мөдире эшмәкәрлегендә әллә ни саҡлы етешһеҙлектәр табалар, почта эшен тотошлай ҡәнәғәтләнерлек түгел тип, район элемтә узелы начальнигы Чебыкинға докладной яҙып бирәләр. Начальник, шул һығымтаға һылтанып, тағы ла өс көндән Ғәтиәт Ҡотлояровты вазифаһынан бушата. Мәғҙән тарихындағы олоғара эксперимент ослана, Мәғҙән Наполеоны башы шулай ҡыйып төшөрөлә, ә Наполеонды власҡа килтереүсе Мәғҙән Бурбондар династияһы шул көйө ҡала әле. Был юлы ла һыуҙан ҡоро сыға, династияның күп вәкилдәре әле һаман илдең башында ултырып, халыҡ өҫтөнән хакимлыҡ ҡылыуын дауам итә.

*(Аҙағы киләһе һанда)*